ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

23-29 ғинуар (һыуығай) 2016
№4 (682)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Бөгөнгө туйҙар...**
үҙ тәғәйенләнешендәме?



3

**Иғтибар: Бәйге!**




6

**Бер тырмаға ҡабат баҫабыҙ түгелме?**



Йәгни рус телен уҡытыу буйынса яңы концепция тураһында

8-9

**Ер шарының ҡояшлы яғында...**
әҙәбиәтте һөйгән кеше йәшәй



11

**ТВ-программа** 14

***ҠОТЛАЙБЫҘ! Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ишмөхәмәт улы Ялаловты 55 йәшлек күркәм юбилейы менән ҡотлайбыҙ. Рәсәй ҡалалары араһында иң төҙөк, иң матур һәм йәшәйеш өсөн иң уңайлы ҡалаларҙың береһе булып танылған Өфөбөҙҙөң үҫеше, яңырыуы, балҡыуы өсөн ғәйәт ҙур тырышлыҡ һалған етәксенең эшләгән эштәре, тырышлығы ысынлап та ике "бишле" билдәһенә баһалана икәнен танйыбыҙ, баһалайбыҙ, артабан да юғары үрҙәр яуларына ышанабыҙ. Һау-сәләмәт, һәр саҡ уңышлы, рәхмәтле булығыҙ, хөрмәтле Ирек Ишмөхәмәт улы!***

***Ихлас теләктәр менән "Киске Өфө"ләр.***



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Кино ҡарарға яратаһығыҙмы? Ниндәй фильмдар ҡарарға теләр инегеҙ?

***Айһылыу ИШКИЛДИНА, хаҡлы ялдағы уҡытыусы:*** Кинонын тәрбиәүи әһәмиәте хаҡында һөйләп тороу ҙа кәрәкмәйҙер, тием. Хәҙерге быуын, әлбиттә, Лениндың кем икәнен белмәй, ләкин шулай ҙа унын үлемһеҙ һүҙҙәрен иҫкә алып киткем килә: "Кино - бөтөн сәнғәт төрҙәренә ҡарағанда ла иң мөһиме",- тип тап ул әйтеп ҡалдырған. Ә бит ул заманда сәнғәттең был төрө әле үҫешә лә башламаған булған. Ниндәй кино ҡарауым тураһында шуны ғына әйтә алам: Өфө кинотеатрҙарына йөрөмәйем тиерлек, сөнки уларҙың репертуары тотошлайы менән минең өсөн ҡыҙығы булмаған сит ил фильмдарынан тора. Телевизорҙан ҡарарға тура килә кинолы. Унда ла күбеһенсә беҙҙең Рәсәй полицияһының "шанлы хеҙмәте", коррупция, енәйәт йә булмаһа шулар араһынан берике "дөрөҫ" тәфтишсенең мафияға ҡаршы көрәше тураһында күрһәтелә. Был да ялҡытты. Рәсәй йәки 1-се канал берәй мелодраманы туҡтауһыҙ әйләндерә. Шуға "Культура" каналынан ҡарарға тырышам фильмдарҙы. Минең быуын совет киноһының алтын фондын тәшкил иткән кинофильмдар йоғонтоһонда үҫте һәм тәрбиәләнде: уҙған быуаттың 50-60-сы йылдарына тиклем һәм унан һуң төшөрөлгән "Йәш гвардия", "Ысын кеше хаҡында повесть", "Оптимистик трагедия", "Сүллектең аҡ ҡояшы", "Ҡырҡ беренсе", "Амфибия-кеше", "Ҡыҙҙар", "Йәш гвардия", "Кеше яҙмышы", "Кавказ әсирәһе", "Гусарҙар балладаһы", "Бензоколонка королеваһы", "Юлаҡлы рейс", шулай уҡ 70-се йылдарҙа төшөрөлгән "Ә тандар бында тыныс", "Яҙҙың ун ете миҙгеле", "Офицерҙар", "Мимино", "Ҡыҙыл балан", "Улар Тыуған ил өсөн һуғышты", "Батальондар ут һорай", "Эҫе ҡар", "Мәскәү күҙ йәштәренә ышанмай", "Уңыш джентльмендары", "Солярис" һәм башҡа шундай онотолмаҫ фильмдар ине улар. Беҙҙең быуын ошо экран геройҙары менән һаташты, уларға оҡшарға тырышты, улар хаҡында уйҙар менән йәшәне.

Ә бына бөгөн кеше аңына, бигерәк тә йәштәргә шундай уҡ көслө тәьҫир итеүсе, улар хаҡында телгә алып һөйләрлек бер генә кино әҫәрен дә әйтә алмайым. Ауылдарҙа кино күрһәтеү тигән нәмә онотолдо, ә ҡала һәм район үҙәктәрендәге кинотеатрҙар репертуарҙарын сит ил фильмдары баҫып алды. Уларҙа ни тураһында һүҙ барыуын ҡарамайынса, атамаларынан да аңларға була: мистика йә фантастика, үҙ-ара һуғыш та атыш, ҡаты йоҙроҡло яңғыҙ герой йә булмаһа ҡара көстәрҙе тылсым менән еңеп сығыу. Совет фильмдарындағы тыуған ил темаһы, ватансылыҡ тойғоһо, намыҫ һәм әхлаҡ төшөнсәләре, саф һөйөү хистәре урынына беҙ Америка киноһының агрессия һәм көс ҡулланыусы йәнһеҙ роботтарын һәм машиналарын күрәбеҙ, Ергә һыймайынса, башҡа планеталарҙы яулау өсөн барған йондоҙҙар һуғышын "мауығып" күҙәтәбеҙ. Мин ана шундай кинопродукция етештереүселәрҙән һорарға теләр инем: ниңә гел һуғыш көҫәйһегеҙ, әфәнделәр? Алыҫ, сит йондоҙҙарға ынтылырҙан алда, тәүҙә үҙ планетабыҙҙа тәртип, тыныслыҡ һәм гармония булдырырға, уны ҡара көстәрҙән таҙартырға кәрәк түгелме икән? Бына шул хаҡта баш ватырға, шул идеяны күтәреп сығырға ине һеҙгә.

**(Дауамы 2-се биттә).**




**2015 йылда республиканың баш ҡалаһын яҙыусыларҙың һәм шағирҙарҙың ҡанатлы һүҙҙәре биҙәгәйне. Әле илдә һәм Башҡортостанда иғлан ителгән Рәсәй киноһы йылына арнап, Өфө урамдарында Рәсәй фильмдарынан һүҙҙәр яҙылған баннерҙар барлыҡҡа килде. Оҙаҡламай баш ҡала урамдарында "Башҡортостан" киностудияһы төшөргән башҡорт киноларынан цитаталарҙы ла күрергә мөмкин буласаҡ, тип көтөлә.**

12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төнөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ХОҠУҠТАРҘЫ ЛА, БУРЫСТАРҘЫ ЛА БЕЛӘЙЕК!

***Лена СӨЛӘЙМӘНОВА, тарих фәндәре докторы, Өфө дәүләт нефть техник университеты профессоры:*** Бөгөн беҙ илдә ҡуҙәткән модернизация, урбанизация процестары замандан артта ҡалмауҙы, иҡтисад, финанс һәм хоҡуҡ өлкәһендә юғары белемле булыуҙы талап итә. Сөнки бик күп мәсьәләләр хәҙер тап ошо өлкәләр тарафынан хәл ителә бит. Белмәгәндәр төрлө мутлыҡтарға ышанып, ауыр хәлгә тарый.

Беҙ бөгөн илдә кредит түләмәгән кеше бармы икән, тип шаяртып һөйләгән булабыҙ. Әммә күптәр кредит алған саҡта аҙаҡ уны банкка нисек кире ҡайтарасағы тураһында уйламай. Тиҙ арала матди проблемаһын хәл итеү мөһим, һунынан тағы берәй яйы килеп сығыр әле, тип еңел ҡарай. Банк кредитты мөрәжәғәт иткән кешегә билдәле бер килешеү нигеҙендә бирә, тимәк, кешенең хоҡуҡтарынан тыш, бурыстары ла барлыҡҡа килә. Шуға күрә, әгәр ҙә кеше иҡтисад һәм финанс өлкәһендә белемле булһа, өҫтөнә алған бурыстарҙы күрһәтелгән арауыҡ эсендә үтәй алырмы, аҡсаны ҡайтарып биреү көсөнән килерме, тип уйланып, үҙаллы һанап сығарып ҡарар ине.

Банктарҙың кредит биреү буйынса килешеүенең шарттары бик ҡаты, иң мөһим ҡағыҙҙәре ваҡ ҡына хәрефтәр менән яҙыла. Ҡайһы берәүҙәрҙең ваҡ хәрефтәрҙе уҡып ултырырға түҙемлеге лә етмәй, ә ул шуны ентекләп өйрәнеп сыҡһа, иң ваҡ хәрефтәр менән иҡтисади көрсөк ваҡытында һәм башҡа ғәҙәттән тыш хәлдәрҙә килешеүҙәге башта ҡуйылған шарттар нисек үҙгәртелеүе мөмкин булыуы билдәләнә икәнен аңлар ине. Мәҫәлән, иҡтисади көрсөк ваҡытында күп банктар кредиттың процентын ике тапҡырға арттыра.

Ғөмүмән, бөтә өлкәләр буйынса ла мәғлүмәтле булыу, үҙеңдең хоҡуҡтарыңды белеү кәрәк. Быны мин һуңғы йылдарҙа оптималләштереү процесы менән бәйле булған хәлдәрҙән сығып әйтәм. Төрлө сәбәптәр менән ауыл ерендәге мәктәптәр, медицина учреждениелары, мәҙәниәт усактары ябыла башлағас, үҙҙәренең төбәгендә теге йә был учреждениены һаҡлап ҡалыу өсөн ниндәй сара күрергә белмәй аптырап, ҡуркып ҡалды күптәр. Ниндәй генә осраҡта ла юғалып ҡалмау өсөн төрлө өлкәләге закондарҙы өйрәнергә, белемегеҙҙе камиллаштырырға тырышығыҙ, тип кәңәш итәм. Үҙегеҙҙең хоҡуҡтарығыҙҙы һәм бурыстарығыҙҙы аныҡ белеү һәр эштә ярҙам итәсәк.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Кино ҡарарға яратаһығыҙмы? Ниндәй фильмдар ҡарарға теләр инегеҙ?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Иршат СӘХИЕВ, блогер:*** Былтыр - Әҙәбиәт, быйыл- Кино йылы. Был, минеңсә, бик һәйбәт күренеш. Ил етәкселеге мәҙәни, рухи өлкәгә иғтибарҙы туплап, дөрөҫ эшләй, юғиһә, интеллигенция вәкилдәре ошоға тиклем мәҙәниәт өлкәһенең "ҡалдыҡ принцип"та йәшәүенә бик йыш үпкә белдерә килде. Ниһайәт, уларҙың тауышы юғары тарафтарға ла барып ишетелде, буғай. Дөрөҫөн әйткәндә, был йәш быуынды тәрбиәләүҙә бик мөһим өлкә. Бөгөнгө егет һәм ҡыҙҙарыбыҙҙың рухи донъяһы өҫтөнлөктәрен, зауыҡ кимәлдәрен генә түгел, ә тотош тормош йүнәлештәрен дөрөҫ билдәләүҙә мәҙәниәтебеҙҙең роле баһалап бөткөһөҙ әһәмиәткә эйә, тип әйтер инем. Мәсьәләнең, йәғни миҙалдың икенсе яғы шулай уҡ проблемалы, әлбиттә. Рус, совет әҙәбиәте классиктары әҫәрҙәрен, совет киноһының алтын фондын иҫәпләмәгәндә, ҡулдан төшөрмәй уҡырлыҡ әҫәрҙәр, геройҙарынан үрнәк алырлыҡ фильмдарыбыҙ бармы һуң бөгөн? Кино хаҡында һөйләгәндә күберәк сит ил продукцияһы күҙ алдына баҫа. Һис юғында, һирәкләп Рәсәй киноһы хаҡында ла һүҙ йөрөтөргә булалыр, бәлки. Ә бына башҡорт киноһы әле саҡ аяҡланып ҡына килә, тип әйтергә ҡала. Әйткәндәй, йыл аҙағында Өфөлә "Көмөш Аҡбуҙат" халыҡ-ара милли-этник кино фестивален тамаша ҡылырға насип булды. Матур ғына картиналар ижад ителгән. Үҙебеҙҙең башҡорт киноларын да ҡарағаным бар. Айырыуса йәш талант эйәһе Айнур Аҫҡаровтың һәр яңы эшен көтөп алам. "Еңмеш" менән "Әсә" фильмдары бик оҡшаны. Таңсулпан Бураҡаеваның "Ике егет"ен дә оҡшаттым. Уларҙың яңы ижад өлгөләрен түҙемһеҙләнеп көтәм. Ә былай үҙем ысын булған хәлдәргә нигеҙләнгән мажаралы детектив, боевиктар ҡарарға яратам. Яңыраҡ ҡараған ана шундай картина - Америка вестерны "Иҫән ҡалған" ("Выживший") - миңә бик оҡшаны. Ул кешенең һәләкәт, хәүеф алдында бирешеп ҡалмай, киреһенсә, икенсе һулышы асылыуы һәм шул арҡала иҫән ҡалыу ғына түгел, еңеүсе булыуы хаҡында ла һөйләй. Төп ролде башҡарыусы актер Леонардо Ди Каприо был эше өсөн "Алтын глобус" наградаһын алды ла инде, хәҙер ул "Оскар"ға дәғүә итә, тиҙәр.

Ватан киноларының да шундай өлгөләре бар, әлбиттә, тик унда ваҡиғалар үҫешен оҙаҡҡа һуҙып, көсөргәнеште йомшарталар, минеңсә. Күптән түгел ҡараған телесериал ("Неподкупный") аҡсаға ла, хәйләләргә лә һатылмаҫ совет тәфтишсеһе хаҡында ине. Реаль шәхес һәм булған хәлдәр тураһында. Ҡараған саҡта бик оҡшаһа ла, хәҙер яйлап хәтерҙән юйыла бара, сөнки картина 20-ләп серияға һуҙылған.

***Айгөл МӘЖИТОВА, студент:*** Мин тураһын әйтәм: сит ил фильмдарын ҡарарға яратам. Был хаҡта әсәйем менән йыш ҡына бәхәстәр ҙә тыуып тора, ул сит ил киноларына бик ҡаршы, кире фекерҙә. Ә ҡайҙа һуң үҙебеҙҙең картиналар? Иғтибарға лайыҡтарын мин күрмәйем. Булғандары ла ышандырмай, артистарға тәбиғилек етешмәй, оператор оҫталығы бөтөнләйгә - нуль. Икенсе күренеш - Америка, Голливуд әҫәрҙәре! Улар ысын мәғәнәһендә тамаша тыуҙыра белә: тәбиғәт тинәң - иҫ киткес тәбиғәт күренештәре, пейзаж, графика, махсус эффекттар, баш әйләндергес трюктар... Миҫал өсөн "Титаник", "Аватар", "Йондоҙҙар һуғышы" йәки Гарри Поттер хаҡындағы фильмдарҙы ғына алып ҡарайыҡ - иҫ киткес бит! Ысын мәғәнәһендә тамаша. Ә былай үҙебеҙҙең иң яҡшы фильмдарҙы ҡарарға теләгем бар. Былтыр Өфөнөң "Родина" кинотеатрында башҡорт фильмдары күрһәтелгәндә бер нисә картинаны барып ҡараным, ыңғай тәьҫир ҡалдырҙы, ләкин беҙҙең режиссерҙарға тәжрибә туплайһы бар әле. Шуның кеүек, баш ҡалабыҙ кинотеатрҙарында иң шәп совет һәм Рәсәй фильмдарын да күрһәтһәләр, Кино йылы бик файҙалы, урынлы сара булыр ине.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**



ШАҒИР ҺҮҘЕ

# ТЕЛӘКТӘР

*Өйләнеү - ул өй һүҙенән.*
*Өйһеҙҙәргә өй теләгеҙ.*
*Йорт эсендә етеш тормош,*
*Татыулыҡ һәм көй теләгеҙ.*
*Сырхауҙарға ныҡ һаулыҡты,*
*Иҫәнлекте мул теләгеҙ.*
*Бәхетһеҙгә бәхет килһен,*
*Ырыҫһыҙға бол теләгеҙ.*
*Керлеләргә таҙалыҡтар,*
*Уйҙарына сафлыҡ бирһен!*
*Моңһоҙҙарға моң теләгеҙ,*
*Илһамһыҙға илһам килһен!*
*Балһыҙҙарға бал бирегеҙ,*
*Тоҙһоҙҙарға тоҙ бирегеҙ,*
*Ниндәйҙер бер тәм бирегеҙ,*
*Ниндәйҙер бер ҡуҙ бирегеҙ!*
*Һүнгәндәргә ут теләгеҙ,*
*Йәрһеҙҙәргә йәр теләгеҙ.*
*Ҡотһоҙҙарға ҡот теләгеҙ -*
*Күңеленә йәм теләгеҙ!*
*Тиҫкәрегә - ыңғай холоҡ,*
*Күркәм холоҡ - ғәжәп байлыҡ.*
*Кемдең ниндәһе етешмәй,*
*Шуға эйә булһын барыбыҙ.*
*Тилмергәнгә - сабырлыҡтар,*
*Аңға килһен тилергәндәр.*
*Төйәк тапһын сит яҡтарҙа*
*Илдәренән тибелгәндәр.*
*Таш атырға баш кәрәкмәй -*
*Баш теләгеҙ башлыҡтарға.*
*Таш бәгерҙәр йомшаҡланһын.*
*Һыу теләгеҙ ташлыҡтарға,*
*Диңгеҙҙәргә әйләнһен сүл!*
*Яңырынһын ер шарыбыҙ.*
*Беҙ бер бөтөн кешелекбеҙ,*
*Беҙ бер бөтөн халыҡтарбыҙ.*
*Нимә етмәй, шуны телә,*
*Дошман түгел, дуҫ телкәйем!*
*Тыныслыҡтар етмәй беҙгә,*
*Имен булһын был еркәйем!*
*Ҡурҡаҡтарға батырлыҡ бир,*
*Саялыҡ бир йыуаштарға.*
*Бер Хоҙайым, йоҡо бирсе*
*Миндәй, йәрен юғалтҡанға.*
*Егет булып ҡалһын ирҙәр,*
*Намыҫ менән уйнамайса...*
*Сирләмәйсә үлмәгеҙ тик,*
*Һөйләмәгеҙ уйламайса…*

**Таңһылыу ҠАРАМЫШЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан - йорттарҙы сафҡа индереү буйынса Волга буйы федераль округында бишенсе урын биләй. Башстат мәғлүмәттәре буйынса, былтыр финанслауҙың бөтә сығанаҡтары иҫәбенә республикала дөйөм майҙаны 2690,7 мең квадрат метрлыҡ 34,5 мең фатир сафҡа индерелгән. Уҙған йылдың ошо уҡ осороноа ҡарата күрһәткес 1,5 процентҡа артҡан. Халыҡ үҙ иҫәбенә һәм кредиттар ярҙамында дөйөм майҙаны 1571,5 мең квадрат метрлыҡ 13,7 мең шәхси йорт һалған. Республика предприятиелары һәм ойошмалары сафҡа индергән торлаҡ күләме 16,4 процентҡа артҡан.

✓Бөрйән районының иҫтәлекле урыны - "Урал батыр ере" Рәсәй халыҡтары мәҙәни мираҫ объекттарының берҙәм дәүләт реестрына индерелгән. Хәҙер объект төбәк статусын алды. Республика Мәҙәниәт министрлығы ошо хаҡта бойороҡ сығарған. Был документ объект биләмәһенең сиктәрен раҫлауҙы һәм һаҡлауҙы регламентлай. Дөйөм майҙаны - 62 628 127 квадрат метр, уның төүге боролош урыны Шүлгәнташ мәмерйәһенән 938 метр алыҫлыҡта урынлашҡан. Объекттың сиге Кейекбай - Ғәҙелгәрәй автомобиль юлы буйынан үтә.

✓Былтыр Башҡортостанда төрлө ағыуланыуҙан 575 кеше вафат булған, тип хәбәр итә Роспотребнадзорҙың республика идаралығы. Уларҙың 200-ө - сифатһыҙ алкоголле эсемлек, 63-ө - дарыу, 36-һы наркотиктар ҡулланыуҙан үлгән, 95-е һөрөм газы менән ағыуланған, башҡа осраҡтар - 217 (көнкүреш химияһы препараттары, сәнәғәт газдары һәм парҙары, ағыулы хайуандар). Республикала 3686 киҫкен ағыуланыу осрағы теркәлгән, шуларҙың яртыһы тиерлек (1675) спиртлы эсемлектәрҙән зыян күргән.

✓2016 йылда әсәлек капиталы күләме 2015 йылғы кимәлдә ҡала - 453 026 һум. Әсәлек капиталын инвалид балаларҙың социаль яраҡлашыуы өсөн тауарҙар һатып алыуға йүнәлтеү мөмкинлеге мөһим яңылыҡ буласаҡ. Программа ике йылға оҙайтылды. Хәҙер әсәлек капиталына хоҡуҡ алыу өсөн сабыйҙың 2018 йылдың 31 декабренә тиклем тыуыуы йәки улылыҡҡа алыныуы шарт. 2016 йылда сертификат хужаларынан 20 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған аҡсаға ғариза йыйыу ҙа дауам итә.

*✓ Туй - ул йәш ғаиләнең оло тормошҡа ашатлап сыға торған тупһаһы. Эскелек байрамы итеп түгел, ә традицияларҙы дауам иттереүсе йола байрамы итеп үткәрәйек туйҙарҙы.*



*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# БӨГӨНГӨ ТУЙҘАР...

## үҙ тәғәйенләнешендәме?



**Күптән түгел туйҙа булғайным. Ғәҙәти ауыл туйы. Ошо мәжлес нигеҙендә, башҡа бик күп туйҙарҙы күҙ уңында тотоп, фекер йөрөтмәксемен.**

Башта шуны асыҡлап китәйек: бөгөнгө күҙлектән, нимә һуң ул туй? Уны нисегерәк ҡабул итәбеҙ һәм унда нимәләр күрергә теләйбеҙ? Башта телгә алынғанса, беҙ уны мәжлес итеп ҡабул итеп өйрәнгәнбеҙ. Ә асылда улай ғына булырға тейеш түгел. Туй - ул дөрөҫ тәғәйенләнешендә байрам ғына түгел, ә йола байрамы. Унда йолалар үтәлергә тейеш. "Башҡорт энциклопедияһы"нда ла был сара "йола байрамы", "туй йолалары" тип билдәләнә. Бында кәм тигәндә лә көрәгә асыу, йыуаса бейеүе, һоғондорошоу, һыуға башлау, килен һөйөү, һандыҡ һатыу, ҡыҙ оҙатыу, бал-май ҡаптырыу кеүек йолаларҙың булыуы шарт. Әммә, үкенескә ҡаршы, хәҙер ауыл туйҙары ла шағараҡ ҡороуға, сай-сой килешеп ашап-эсеүгә генә тороп ҡалған икән. Ҡалала иһә күптән инде туйҙар өс-дүрт сәғәтлек инглиз табынына әйләнгән. Ашап-эсәһең дә уйындар уйнайһың. Шул ғына. Ауылдарҙа әле был сараның йәме бар ине. Һәр хәлдә, шулайҙыр тип уйлағайным. Бәлки, ҡайҙалыр хәлдәр икенсерәктер ҙә, әммә әлеге күргән туй ишараты менән мин бер нисек тә килешә алмайым.

Ике яҡтың да - тәүге туйҙары, ата-әсәләр йәш. Бер яҡтан ҡарағанда, уларҙың йолаларҙы белмәүе лә ғәжәп түгел кеүек. Әммә, икенсе яҡтан ҡарағанда, шундай оло сараға әҙерләнеүгә ана шул тәртиптәрҙе, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе өйрәнеү ҙә инәлер бит. Юғиһә, ата-әсәләр торған була ла: "Беҙ йола белмәйбеҙ инде..." - тип аҡлана. Йола-ғәҙәтте белмәү уларҙы алдынғы ҡарашлы замана кешеһе итеп түгел, ә бары маңҡорт итеп күрһәтә.

Хәҙер тамада булып йөрөүселәр бик күп. Кешеләр менән, йәмәғәт менән аралаша белеүҙә, юмор стилен аса алыуҙа һәм, әлбиттә, интелектуаль кимәлдә уның эше лә юҡ. Был тамадасылар береһенән-береһе уҙҙырып, тоҙло-боросло хәбәрҙәр, билдән түбән шаярыуҙар, әҙәпһеҙ уйындарҙан торған мажара ҡуя. Ә бит ул мажараның төп геройҙары - хужалар үҙҙәре. Нишләп алдан тамаданың сценарийы менән танышмаҫҡа, бында йәш-елкенсәктән тыш әллә нисә быуын туған-тумаса, ололар булаһын иҫкәртмәҫкә? Юғиһә, ояттһыҙ анекдоттар тыңлап, ҡаршылағыларға күҙенде күтәреп ҡарарға оялып ултыраһың.

Һыу юлы башлауға сыҡһаҡ, унда халыҡтың маскарадҡа кейенгәндәй яһанышҡанына шаһит булдыҡ. Ирҙәр - ҡатындар булып, ҡатындар ирҙәр сүрәтендә мәсхәрәләнгән. Ул эске кейемдәрҙе тыштан кейеп, һалабаштар, кишерҙәр аҫып, бит-миттәрен буяп бөткәндәр. Иң ҡыйыу индеецтар ҡәбиләһе лә бындайға йөрьәт итмәҫ. Был халыҡ аңының шундай түбән кимәлдә булыуымы, әллә эскелек фантазияһымы? Элегерәк туйҙарҙа тундарының тиҫкәреһен кейеп, кәпәстәрен әйләндереп, һыу юлын быуғандарын, арҡан тартып, үткәрмәйенсә, хаҡ һорағандарын иҫләйем. Шул шаярыу ошондай түбәнселеккә барып төшкәндерме инде. Нишләп һыу юлына йырлашып, бейешеп кенә барып ҡайтмаҫҡа? Бындай ҡырағайлыҡ көлкөмө ни? Ҡатындар түшелдереге кейеп торған ирҙе күреп көлгән кешеһен әйтер инем.

Килен һыуҙы көйәнтәләмәне. Хатта яурынына һалып та ҡараманы көйәнтәне. Ул бахыр биҙрәләрҙе кемдәрҙер айырым-айырым болғап тотоп ҡайтты. Ҡайтҡас, һыуҙың барлығын-юҡлығын тикшергән, ҡабул иткән кешеһе лә булманы. Тимәк, был йөрөштөң төп маҡсаты ана шул ҡырағай маскарадҡа ғына ҡайтып ҡалды.

Туйҙа ололарға иғтибар, хөрмәт тигән нәмә тойолманы. Уларға һүҙ биреп, өгөт-нәсихәттәрен тыңларға, кәңәштәрен ишетергә тейештәр ине, минеңсә. Әллә ата-әсәләре үҙҙәре ураған һайын "белмәйбеҙ" тип йөрөп, бәҫтәрен төшөрөп ташланы. Беҙҙең яҡ туйҙарында ололарҙы айырым-айырым бейергә төшөрәләр. Ҡоҙалар ҙа бер-береһен саҡырып сығарып бейешә. Был бик мәртәбәле, һоҡланғыс күренеш була. Яҙмаларға төшөрөп ҡалырға тырышалар. Уйлап ҡараһаң, ололар ҡайҙа тағын шундай ғәм алдында бейеп йөрөргә мөмкин. Улар шулай туйҙы хөрмәтләй, үҙҙәренең ихласлығын күрһәтә.

Ысынында иһә, бөгөн матур туй үткәреү өсөн бөтә мөмкинлектәр ҙә бар. Теләк кенә булһын. Берәүҙәр туйҙарына махсус рәүештә йола белгән ике апайҙы саҡырғайны. Башҡорт милли кейемендәге апайҙар ваҡыты-ваҡыты менән килеп сыға ла ниндәйҙер йоланы үтәтә. Һандыҡ һатыу, ҡоҙаларҙы ҡыуыу кеүек күренештәрҙе йығылып ятып ҡаранылар, донъяларын онотоп сауҙалаштылар. Ололар "Бындай йолалар беҙҙең бала саҡта ғына була торғайны", тип аптырашты.

Икенсе танышым ҡыҙының туйына йырсы яллап, оҙатҡан саҡта сеңләү сеңләткән. Илашып бөткәндәр, бик тәьҫирле булған. Ҡунаҡтар һаман онотмай һөйләй, ти. Шулай уҡ бер туйҙа килен һөйгәндә өләсәй булған кеше "Килен, килен, киленсәк", тип оҙон ғына һамаҡ әйтте. Бөтөн туйҙың иң һөҙөмтәле өлөшө ошо булды ла ҡуйҙы. Ситтән килгәндәр инәйҙең был күренеште тағы бер ҡабатлауын һорап, камераға төшөрөп алды...

Туй - ул йәш ғаиләнең оло тормошҡа ашатлап сыға торған тупһаһы. Ул мотлаҡ йолалар менән байытылған булырға тейеш. Йәшәйештәре нисек кенә булып киткәндә лә, үҙ туйҙарын улар ғүмерҙәре буйына иҫләйәсәк. Шунлыҡтан, туйҙар хәтирәле, мәғәнәле, фәһемле булһын ине. Шундай яуаплы эш алдынан белмәгәнегеҙҙе өйрәнегеҙ, һорашығыҙ, бик булмаһа, яллағыҙ оҫталарҙы. Эскелек байрамы итеп түгел, ә традицияларҙы дауам иттереүсе йола байрамы итеп үткәрәйек туйҙарҙы.

**Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# ҺҮГЕНЕҮ ҺҮҘҘӘРЕН ЛӨҒӘТЕБЕҘГӘ ИНДЕРМӘЙЕК!



**Кеше өсөн тел, һүҙ, телмәр баһалап бөткөһөҙ әһәмиәткә эйә. Телмәр байлығы кешенең күңел байлығын, мәҙәни кимәлен, рухи үҫешен асыҡ күрһәтеүсе сара булып тора. Ләкин норматив булмаған лексиканың хатта ваҡытлы матбуғат биттәренә, әҙәбиәткә һәм телевизор экрандарына ла үтеп инә барыуы күңелде ҡыра. Шулай уҡ ҡайһы берәүҙәр үҙ телмәрендә ҡаты ғына һүгенеү һүҙҙәрен ҡушып ебәрергә лә күп һорамай. Был насар ғәҙәт ҡайҙан барлыҡҡа килә һәм унан ҡотолоу юлы нисек? Ошо хаҡта отставкалағы полиция капитаны Йәүҙәт ЯЛМЫРҘИН фекер йөрөтә.**

- Бала саҡта атайымдың мал-тыуарға йәки ни рәүешлелер йәнен үртәгән кешеләргә ҡарата әсе генә итеп һүгенеп ебәреүен ишетеп-күреп йөрөнөм. Ләкин уның һүгенеү һүҙҙәре бер ҡасан да әсәйемә, башҡа ҡатын-ҡыҙҙарға, балаларға һәм ололарға йүнәлтелмәне. Улар алдында бындай йәмһеҙ ҡыланыуҙан ҡаса торғайны. Минең ҡолаҡты, малай булараҡ, "йәлләмәгәндер" инде. Шуға күрә, мин дә егет ҡорона ингәс, иптәштәрҙән ҡалышмаҫҡа тырышып, "ул-был" һүҙҙәрҙе телмәремә ҡушып ебәрә торған булдым. Был малайҙар, егеттәр араһында, үҙенә күрә бер яҙылмаған ҡанун кеүек йәшәп килде. Әле булһа шулай икәнлегенә ышанам, сөнки телмәренде һүгенеү һүҙҙәре менән "байытып" ебәреү көслө затҡа ҡандан-ҡанға күсеп килеүсе ғәҙәттер, тип уйлайым. Әлбиттә, ҡайһы берәүҙәр үҙҙәрен йәмғиәттә бик тәртипһеҙ, ипһеҙ тота һәм норматив булмаған лексиканы аҙым һайын тиерлек ҡуллана. Шулай ҙа күпселек ир-егеттәр бындай йәмһеҙлектән ары тора.

Шәхсән миңә милицияла эшләү осоромда, йәшермәйем, бындай һүҙҙәрҙе күпләп әйтергә тура килде. Төрлө фильмдарҙағы матур итеп кенә һөйләшеп йөрөүсе милиция хеҙмәткәре минең өсөн ят күренеш. Ғәҙәти тормошта был өлкәлә эшләүселәрҙең лексиконы һүгенеү һүҙҙәре менән нығ "ҡупшылана". Хатта гүзәл заттар ҙа һүгенеү һүҙҙәрен йыш ҡуллана. Был алама ғәҙәттең эштән тыш тормошҡа ла эйәреп ҡайтыуы ғаиләлә, дуҫтар араһында етерлек кенә ығы-зығыға сәбәпсе булды. Көндәр буйы ошондай негатив мөхиттә йөрөгәндән һуң һүгенеү һүҙҙәрен ишек артында ҡалдырып инеүе бик ауырға тура килә ине. Ләкин үҫеп килеүсе улдарымдың ауыҙынан да ошондай һүҙҙәрҙең яңғырай башлауы үҙемде ҡулға алырға, эштәге кәйефте, тәртипте, булмышты өйгә алып ҡайтмаҫҡа өйрәнергә мәжбүр итте. Балалар ата-әсәйҙең ҡыланыштарын, уларҙың һүҙҙәрен, ҡылыҡтарын һеңдереп үҫә. Шуға күрә үҙеңдең холоҡфиғелең, башҡарған эштәрең һәм һөйләгән телмәрең өсөн оло яуаплылыҡ тойорға кәрәк. Ошоно миңә 4 йәшлек бәләкәй улымдың үҙемә ҡарата әсе генә итеп һүгенеп ебәреүе яҡшы аңлатты. Ошо хәлдән һуң үҙемә ситтән ҡараным һәм ҡыланыштарымдан сәсем үрә торҙо. Ни тиклем әшәкелек, негатив, наҙанлыҡ сәсеп йөрөгәнмен тирә-яҡтағыларға күпме йылдар буйы. Рухи яҡтан сәләмәт, аҡылы теүәл кеше телмәрендә бындай һүҙҙәрҙе ҡулланыуҙан алыҫ тора. Әлеге ваҡытта һүгенеү һүҙҙәрен ҡулланмайым һәм башҡаларға ла кәңәш итмәйем. Әҙәпһеҙ, әшәке һүҙҙәрҙе ҡулланыуыбыҙ үҙебеҙгә һәм эргәбеҙҙәге кешеләргә ҡарата ҡәһәрләү, ләғнәт уҡыуға тиң, тип иҫәпләйем. Хөрмәтле замандаштар, әйҙәгеҙ лөғәтебеҙгә һүгенеү һүҙҙәре индермәйек!

**Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓20 ғинуарҙа киске сәғәт 8-се яртыла "Рәсәй-1. Башҡортостан" телеканалында "Өфө хәбәрҙәре" тип аталған яңы тапшырыу башланды. Һәр шаршамбы эфирға сығасаҡ тапшырыуҙы Юлия Краснова алып бара. Өфө яңылыҡтарынан тыш, тиҙҙән тамашасылар "Рәсәй-24. Башҡортостан" каналында "Ҡала технологиялары" һәм "Өфө буйлап сәйәхәт" тапшырыуҙарын ҡарай аласаҡ.

✓Башҡортостанстат ағымдағы йылдың 11 ғинуарынан 18-нә тиклем социаль әһәмиәтле аҙыҡ-түлектең ҡайһы бер төрҙәренә хаҡтарҙың үҙгәреүе тураһында мәғлүмәттәр баҫтырып сығарҙы. Алманың (81,29, минус 1 процент), ҡарабойҙайҙың (57,39, минус 0,8 процент), макарондың (43,74, минус 0,5 процент) хаҡы төшкән. Ә пастеризацияланған һөттөң (40,39 һум), үҫемлек майының (99,82) хаҡы тотороҡло. Һыйыр ите (294,34 һум) 1,6 процентҡа, аҡ май (353,74) - 0,9, сусҡа ите (243,82), тауыҡ ите (120,38) 0,8 процентҡа ҡиммәтләнгән.

✓Быйыл февралдә эшләмәгән пенсионерҙарҙың страховка пенсияларын индексациялау күләме 4 процент тәшкил итәсәк. Апрелдә дәүләт пенсия тәьминәте буйынса, шул иҫәптән социаль пенсиялар 4 процентҡа индексацияланасаҡ. Эшләмәгән пенсионер статусы 30 сентябргә ҡарата билдәләнә. Рәсәй Пенсия фонды 2015 йылдың 30 сентябренән һуң хеҙмәт эшмәкәрлеген туҡтатҡан бөтә пенсионерҙарға ла февраль индексацияһын иҫәпкә алып страховка пенсияһын алыу өсөн ваҡытында ғариза бирергә кәңәш итә.

✓Валерий Нургутдинов "Салауат Юлаев" хоккей клубының яңы генераль директоры итеп тәғәйенләнде, быға тиклем ул "Торос" хоккей клубында ошо уҡ вазифаны биләгән. Александр Семак генераль директор ярҙамсыһы вазифаһына күсерелгән.

✓Башҡортостанда грипп, шул иҫәптән "сусҡа" киҙеүе менән сирләү осраҡтары теркәлмәгән, тип хәбәр иттеләр Роспотребнадзорҙың республика буйынса идаралығында. Уҙған аҙнала Рәсәйҙең ҡайһы бер төбәктәрендә грипп һәм ОРВИ менән сирләү осраҡтары күбәйгән. Лаборатор тикшереүҙәрҙә H1N1 киҙеүе вирусының пандемик штаммы билдәләнә. Уның үҙенсәлеге шунда: сир йоҡҡандан һуң 2-3 көн үткәс пневмония башланыуы ихтимал, был иһә үлемгә килтереүе мөмкин.

**"Башинформ"дан.**

## ЕТЕ РАЙОН

**Дим районы.** Йылды район хакимиәте ата-әсәләр конференцияһының сираттағы циклы менән башланы. 21 ғинуарҙа "Орион" Балалар-үҫмерҙәр ижады йортонда йәш ғаиләләр йыйылды. Улар алдында республиканың абруйлы ғалим-психологтары сығыш яһап, ғаиләләге гармониялы мөнәсәбәттәр сере менән уртаҡлашты.

**Киров районы.** Башҡортостандың һуҡырҙар өсөн махсус республика китапханаһында башҡорт яҙыусылары һәм шағирҙарының юбилейҙарына арналған "Тыуған халҡым өсөн йырлайым..." тип аталған саралар циклы асылды. Уның тәүгеһе башҡорт мәғрифәтсеһе, ғалим, яҙыусы Ғәли Соҡоройҙоң (Кейеков Мөхәммәтғәли Ғәбдесәлих улы) тыуыуына 190 йыл тулыуға бағышланды.

**Совет районы.** "Тамыр" Балалар һәм үҫмерҙәрҙең буш ваҡытын үткәреү үҙәге МБУ-һы ҡоштарға тағараҡтар эшләү буйынса экологик акция үткәрҙе. Уның маҡсаты - балаларҙы һәм үҫмерҙәрҙе тирә-яҡ мөхитте һаҡлауға һәм тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш булдырыуға ылыҡтырыу. Ҡоштарҙы ҡышын ашатып тороу уларҙың күптәренең ғүмерен һаҡлап ҡалыуға ярҙам итәсәк.

**Ленин районы.** 39-сы гимназия уҡыусылары С. Т. Аксаковтың йорт-музейында булды. Боронғо китаптар, интерьер предметтары, хатта уйынсыҡтар һаҡланған, яҙыусының бала сағы үткән йорт менән балалар ихлас ҡыҙыҡһынды, уның архитектураһы, 18-се быуат көнкүреше менән таныштылар.

**Октябрь районы.** 26-сы модель китапханаһында әҙәрмәнлек һәм тикшеренеү эшмәкәрлеге тыуған илдең ысын патриоттарын тәрбиәләүгә үҙенең өлөшөн индерә. Ошо көндәрҙә унда "Крайҙы өйрәнеүселәрҙең ултырышы" үтте. Уға ҡалала ғына түгел, республикала билдәле шәхестәр: яҙыусы Сабир Шәрипов, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Рәүил Йәлилов, отставкалағы хәрби Харис Сәғитов, Башҡорт Википедияһы хакимы Рөстәм Нурыев саҡырылды.

**Орджоникидзе районы.** Өфө дәүләт нефть техник университетында бизнес-клуб ойошторолған. Уның маҡсаты - эш башлаусы эшҡыуарҙарға ярҙам итеү. Студенттар өсөн практик менеджмент курстары ойоштороласаҡ, аныҡ бизнес-проекттар буйынса фекер алышыуҙар, эшлекле уйындар уҙғарыласаҡ, топ-менеджерҙар менән осрашыуҙар үткәреләсәк.

**Калинин районы.** Райондың Йәмәғәт имеңлеге һәм балиғ булмағандарҙың хоҡуҡ боҙоуҙарын иҫкәртеү идаралығы инспекторҙары "Юность" үҫмерҙәр клубында һөнәри йүнәлеш буйынса әңгәмә ойошторҙо. Шулай уҡ "Һөнәрҙәр донъяһында" темаһына викторина уҙғарҙы. Балалар сығыш яһаусыларҙы ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тыңланы, сөнки һөнәр һайлау - тормоштағы иң төп ҡарарҙарҙың береһе икәнлеген улар бөгөн үк аңлай.

### ...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# АЛТЫН-КӨМӨШЛӨ ЕҢЕҮҘӘР

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов Австрияның Инсбрук ҡалаһында үткән VII Ҡышҡы халыҡ-ара балалар уйындарында уңышлы сығыш яһап, 3 алтын, 3 көмөш һәм 2 бронза миҙал яулап ҡайтҡан 16 спортсы үҫмерҙе тәбрикләне.**



VII Ҡышҡы халыҡ-ара балалар уйындарында ҡатнашҡан делегация етәксеһе, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов оператив кәңәшмәлә ҡатнашыусыларҙы спортсыларыбыҙҙың сығыштары, яулаған уңыштары менән таныштырҙы.

- Австрияның көнбайыш төбәгендә урынлашҡан Тироль федераль ерҙәренең административ үҙәге Инсбрукта үткәрелгән Уйындарҙа донъяның 22 иленән 54 команда ҡатнашты, - тине Сынтимер Биктимер улы, - Өфө, Новоуральск, Петрозаводск ҡалалары Рәсәй командаһын тәшкил итте. Уйындарҙың төп үҙенсәлеге шул - уларҙа ҡатнашыусы 12-15 йәшлек спортсылар илдәр командалары исеменән түгел, ә үҙҙәре йәшәгән ҡала командаһы исеменән сығыш яһай.

Артабан билдәләнеүенсә, Уйындарҙа бөтәһе 8 төр буйынса ярыштар уҙғарылған, беҙҙекеләр 4 төрҙә - тау саңғыһында, сноубордта, конькиҙа шыуыуҙа һәм биатлонда ҡатнашҡан. Ярыштарҙың тәүге көнөндә биатлонсы егет Алмаз Вәлиев 20 дәғүәсене артта ҡалдырып, алтын миҙал яулаған. Артабан "сноуборд-кросс" бүлегендә Кирилл Педь көмөш миҙал яулауға өлгәшкән. Ошо уҡ дисциплинала көс һынашыусы Яна Вәлиева өсөнсө һөҙөмтә менән бронзаға лайыҡ булған. Уйындарҙың икенсе көнөндә Өфө ҡыҙы Татьяна Гришина, төрлө илдәрҙән йыйылған команда составында параллель слалом буйынса - алтын миҙал, тағы бер яҡташыбыҙ Александр Ғәлиәкбәров шундай уҡ ярышта көмөш миҙал яулай. Әйткәндәй, Александр Уйындар тамамланыр көндә ски-кросс буйынса тағы бер еңеүе менән Өфө командаһы иҫәбенә алтын миҙал яҙҙыра. Тау саңғысыһы Елизавета Воробьева ла ошо уҡ ярыш буйынса өсөнсө урын ала. Биатлонсы Алмаз Вәлиев ҡатнаш эстафетала көмөш миҙал яулай.

Бынан өс йыл элек, 2013 йылда, Өфөлә VI Ҡышҡы халыҡ-ара балалар уйындарында уңышлы сығыш яһаусы Антон Бабиков атлы егет бөгөн өлкән биатлонсылар араһында донъя ярыштарында сығыш яһап, уңыштары менән һөйөндөрә. Ул бөгөн Башҡортостандың иң яҡшы 10 спортсыһы исемлегенә ингән. Ошондай йәш спортсыларҙы донъя кимәлендәге ярыштарҙа ҡатнаштырыу һис һүҙһеҙ үҙ һөҙөмтәһен бирә, тиергә генә ҡала.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Халыҡ-ара балар уйындары комитетының генераль директоры Ричард Смит 2013 йылда Өфөләгә уйындарға килгәнендә әҙерлектең иң яҡшыларҙан икәнлеген билдәләгәйне. Әле килеп, МДИ етәкселеге 2019 йылда үтәсәк Уйындарҙы Өфөлә уҙғарыу мөмкинлеген ҡарай икән...**

Илгизәр БУЛАТОВ.

### БАШ ҠАЛА ҠУНАҠТАРЫ

# СИТТӘР...

## миллилекте лә баһаланылар




**"Үҙ хәбәрсе" мәғлүмәт агентлығы BlaBlaCar һәм LocalWay турсервистары ярҙамында ойошторолған "Рәсәй ни хаҡ тора?" тигән махсус сәйәхәт проекты һөҙөмтәләрен атаны.**

Проектта ҡатнашыусылар ил буйлап Камчатканан Карелияға тиклем 22 ҡалала булды. Владивосток, Хабаровск, Чита, Иркутск, Улан-Удэ, Красноярск, Кемерово, Томск, Новосибирск, Омск, Төмән, Екатеринбург, Пермь, Ҡаҙан, Түбәнге Новгород, Санкт-Петербург менән бер рәттән, улар Өфөнөң иҫтәлекле урындарын, төбәктең социаль-иҡтисади үҫеше күрһәткестәрен, милли һәм мәҙәни үҙенсәлектәрен ҡарай, көнкүреш һәм аралашыу үҙенсәлектәре менән танышып, баш ҡалабыҙҙы маршруттағы иң яҡшы ҡалаларҙың береһе тип билдәләй.

Агентлыҡ хәбәрсеһе Александр Баланкин фекеренсә, бер йәй эсендә ШОС һәм БРИКС илдәре башлыҡтарының саммиттарын уҙғарыу - ҙур уңыш. "Саммиттарҙан мираҫ булып тигеҙ юлдар, асыҡ юл билдәләре, яңыртылған светофорҙар ҡалған", - тип яҙа ул. Шулай уҡ журналист Ағиҙел ярының төҙөкләндерелеүен "көстө күрһәтеү, үҫеш нөктәһе һәм күршеңде уҙып китеү мөмкинлеге" тип баһалай.

"Үҙенсәлекле милли мотивтары менән" төбәк Бурятияға оҡшаш, тип белдерә ҡунаҡ. Уның өсөн шулай уҡ "Салауат Юлаев"тың хоккей командаһы ғына түгел, ә милли герой икәне лә асыш була. Конгресс-холл майҙанында журналистар Этноауылда була, кейеҙ баҫыу, милли ризыҡтар менән таныша. "Сәйәси яҡтан илһамландырылмаған, ура-патриотизмдан алыҫ торған, Башҡортостан тарихына ихлас һөйөү менән һуғарылған" - майҙансыҡтан һуң ҡунаҡтарҙа шундай тойғо ҡала. Ҡунаҡтар баш ҡаланың тағы бер иҫтәлекле урыны - "Ете ҡыҙ" фонтаны, шулай уҡ Ләлә мәсете менән таныша.

"Өфө тап милли ныҡлығы, боронғоноң бөгөнгөгә әүерелгән шаңдауының көтөлмәгән тупланмаһы булып тора. Интернет саммиттарға әҙерлектең күҙалланғанса килеп сыҡмауы тураһындағы тәнҡит менән тулып торһоҡҡанда ла, бөгөнгө Өфө - маршруттағы иң яҡшы ҡалаларҙың береһе", - тип тамамлай үҙенең яҙмаларын махсус проект сәйәхәтсеһе.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостанда Рәсәй киноһы йылының рәсми логотибы раҫланды. Бәйге комиссияһы бер тауыштан рәссам, "Рампа. Башҡортостан мәҙәниәте" журналының баш мөхәррире Игорь Тонконогийҙың эшен иң яҡшыһы тип тапты.

✓Республика Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, быйылдан башлап йән башына уртаса килеме балалар өсөн йәшәү минимумы дәүмәленән артмаған ғаиләләргә генә пособие бирелә. Әлеге мәлгә был 8 653 һум тәшкил итә. Быға тиклем был пособиены йән башына уртаса килеме йән башына иҫәпләнгән йәшәү минимумының икеләтә дәүмәленән артмаған ғаиләләр ала ине. Айлыҡ пособие өс йәшкә тиклемге балаларға түләнә, уның күләме - 500 һум.

✓Башҡортостан Рәсәй төбәктәре араһында Дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәр күрһәтеү буйынса күп функциялы үҙәктәр селтәрен үҫтереү өлкәһендә лидер булып танылды. Был хаҡта Мәскәүҙә Хөкүмәт ултырышында иҡтисади үҫеш министры Алексей Улюкаев хәбәр итте. Ул күп функциялы үҙәктәр селтәрен үҫтереү мәсьәләләрендә иң яҡшы һөҙөмтә күрһәткән төбәктәрҙе билдәләне. Башҡортостан Мәскәү, Свердловск һәм Ростов өлкәләре менән бер рәттән юғары күрһәткескә өлгәшкән биләмәләр иҫәбенә инде.

✓Илебеҙҙең баш ҡалаһында "Мәскәү һылыуҡайы-2016" гүзәллек бәйгеһендә ҡатнашыу өсөн кастинг иғлан ителгән. Финалды 5 мартта уҙғарыу күҙаллана. Еңеүсе "Һылыуҡай-2016" республика матурлыҡ бәйгеһендә ҡатнаша.

✓Ағымдағы йылдың 1 ғинуарына өфөләрҙең коммуналь түләүҙәр буйынса 1 миллиард 900 миллион һум бурысы йыйылған. Баш ҡаланың Берҙәм иҫәп-касса үҙәге генераль директорының беренсе урынбаҫары Айгөл Винникова һүҙҙәренсә, ҡаланың Берҙәм иҫәп-касса үҙәге 375 мең шәхси иҫәпте хеҙмәтләндерә, шуларҙың һигеҙ меңе буйынса алты айҙан ашыу бурыс бар.

✓25 ғинуарҙа иртәнге сәғәт 10-да республиканың Милли музейында "Башҡортостанда кино тарихы" тигән күргәҙмә асылды. Сара Рәсәй киноһы йылы сиктәрендә уҙғарыла. Күргәҙмә эшләгән ваҡытта режиссерҙар, актерҙар менән осрашыу, фильмдар ҡарау, оҫталыҡ дәрестәре һәм ижади кисәләр ойоштороу ҡаралған. Адресы: Совет урамы,14. Телефон: 273-50-27.

АЛДАНМАЙЫҠ!

# ТЕЛЕФОНДА ЛА...

## хәүеф бар

**"Киберенәйәттәрҙән иң һаҡланмаған операцион система - ул Android", - тип башлап китте һүҙен БР Эске эштәр министрлығының Енәйәттәрҙе тикшереү идаралығы начальнигы полиция полковнигы Виталий Портянко журналистар менән осрашыуҙа.**

Уның билдәләүенсә, тап ошо Android операцион системаһындағы зыянлы ҡушымталар, йәғни "вирустар" телефон хужаһының ниндәй урындарҙа булыуын күҙәтә һәм уғрыларға мәғлүмәт ебәрә, шулай уҡ мобиль банктан килгән смс хәбәрҙәрҙе уҡый, шпион программаһына яҙылған иҫәпкә аҡса күсерергә тәҡдим итә ала. Йыш ҡына телефон хужаһы тәҡдим ителгән һылтанмаға күсеп, картаһының мәғлүмәттәрен программаға индерә һәм енәйәтселәр был мәғлүмәтте үҙ файҙаһына ҡуллана һала.

"Мобиль банктар менән файҙаланғанда үҙеңде һаҡлау өсөн интернетҡа инмәй торған телефондар менән эш итергә кәңәш бирелә", - тип билдәләне Виталий Портянко. Бынан тыш, интернеттағы банктар менән яҡшы антивируслы компьютерҙарҙан инеү хәйерлерәк булыуын, телефондарға ла вирусҡа ҡаршы программа ҡуйып, уны ла һаҡлау мөмкин икәнлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды ул. "Әммә интернет-магазиндағы бушлай программаларҙың файҙаһы юҡ - улар урынына түләүлеләрен ҡуйыу отошлораҡ", - тип тә иҫкәртте.



Әйткәндәй, Android операцион системаһы ҡулланылған заман ҡорамалдарын һанап үтәйек. Тәү сиратта, смартфондар, йәғни бармаҡ менән ҡағылып файҙаланыла торған аҡыллы телефондар, электрон китаптар, планшеттар Android нигеҙендә эшләй. Юғарыла әйтелгәндәр был платформаның насар икәнлеге тураһында түгел, ә енәйәтселәрҙән иң йыш зыян күреүсе операцион программа булыуы тураһында икәнлеге аңлашылалыр. Компьютер аша инә торған бөтөн мобиль банктарҙа ла тиерлек инер алдынан ҡулланыусының телефонына серһүҙ яҙылған хат ебәрелә. Ана шул серһүҙ килә торған телефоныгыҙ Андроидлы булмаһын, ә ябай "кирбес" булһын, тигәнерәк мәғәнәлә кәңәш бирҙе Виталий Портянко. Ғәҙәттә, ундай телефондар һәр өйҙә кәштәлә саң йыйып ята. Андроидығыҙҙы интернет-банктан башҡа маҡсатта файҙаланығыҙ, ә баяғы "кирбес" телефонға онлайн банк менән бәйле картағыҙҙы ҡуйығыҙ, тип әйтмәксебеҙ.

**ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...**

Әлеге матбуғат конференцияһына тиклем бер-ике ай элек мин үҙем дә интернет-уғрылар тоҙағына эләгә яҙҙым. Бер көндө телефоныма: "Һеҙҙең бөтөн иҫәптәрегеҙ ҙә ваҡытлыса ғәмәлдән сығарылды. Мәғлүмәт өсөн телефон: 89608172510", - тип яҙылған СМС-хат килеп инде. Мин хафаланып, күрһәтелгән һандарҙы йыйып, шылтырата һалдым. Теге оста, Рәсәй Үҙәк банкының хәүефһеҙлек хеҙмәтенәнмен, тип яуап бирҙеләр. Ни өсөн шылтыратыуымды аңлатҡас, исем-шәрифемде, ниндәй банктарҙа ниндәй иҫәптәрем булыуы менән ҡыҙыҡһындылар. Уны-быны уйламай, һөйләп бирҙем. Шунан телефондың теге осондағы егет Рәсәй банктары клиенттарының иҫәбенән интернет аша аҡса урлаусылар төркөмө барлыҡҡа килеүен, уларҙың Рәсәйҙә йөҙ меңләгән кешенең иҫәбенән үҙҙәренә аҡса күсереүен, шунлыҡтан, хәүефһеҙлек хеҙмәте Рәсәй буйынса меңәрләгән кешенең иҫәбен ваҡытлыса ябып тороуын теҙеп һөйләп китте. Минең иҫәбемдә асыр өсөн 15 минут эсендә эргәләге банкоматҡа барып, иҫәбемде тикшерергә, тик картаны банкоматҡа үҙ белдегем менән индермәҫкә, ә тәүҙә уға шылтыратырға һәм уның кәңәштәрен көтөргә ҡуштылар. Минең: "Ә мин һеҙҙең һүҙегеҙгә нисек ышана алам?" - тигән һорауымды яуапһыҙ ҡалдырҙы, уның ҡарауы, автомат һымаҡ тәтелдәп, үҙ һүҙен тылҡый бирҙе. Тиҙҙән шылтыратырға һүҙ ҡуйышып, банкоматҡа сығып йүгерҙем. Юлда, хәҙер унда үҙ карталарын янынан астырырға телэгән, минең хәлдә ҡалған кешеләр күп булыр инде, тип уйлап киләм. Әммә банкомат янында бер кем дә булмай сыҡты. Шигем артты. Тоттом да, банкоматҡа яҙып ҡуйылған телефон һандарын йыйып, банктың "ҡыҙыу бәйләнеше"нә шылтыраттым. Хәлде аңлатып биргәс, улар минең кемлегемде бер-нисә һорау ярҙамында асыҡлағас, минең иҫәбем менән бер ни ҙә булмауын, миңә шылтыраткан кешенең уғры булыуын белдерел, мине тынысландырып ҡуйҙы, ә теге уғрыларҙың телефонын яҙып алып, "Улар менән беҙҙең хәүефһеҙлек хеҙмәте шөғөлләнәсәк", - тине. Банкоматҡа ҡуйып ҡараһам, картамдағы аҡсам урынында ине...

**Иҙел РӘХИМОВ.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# "ХЕҘМӘТ ВЕТЕРАНЫ" БИЛДӘҺЕ КЕМГӘ?



**Яңы йыл алдынан ғына Рәсәй Президенты В. Путин "Ветерандар тураһында" Федераль законға тейешле үҙгәрештәр индерҙе. Дәүләт башлығы "Хеҙмәт ветераны" һәм "Хәрби хеҙмәт ветераны" исемдәрен биреү нигеҙләмәләрен аныҡлаштырҙы.**

"Хеҙмәт ветераны" исемен биргәндә кешенең тейешле өлкәлә йәки иҡтисад тармағында 15 йылдан да кәм эшләмәгән стажы һәм хеҙмәт ҡаҙаныштары өсөн ведомство билдәләре, шулай уҡ РФ Президентының Маҡтау грамотаһы һәм РФ Президентының Рәхмәт хаты ла иҫәпкә алынасаҡ.

"Хеҙмәт ветераны" исемен биргәндә шулай уҡ пенсия тәғәйенләү өсөн кәрәкле (ир-егеттәр өсөн - 25, ҡатын-ҡыҙҙар өсөн 20 йылдан да кәм булмаған) эш стажы йәки пенсия тәғәйенләү өсөн кәрәкле календарь иҫәпләмендәге хаҡлы йыл (выслуга лет) булыуы ла шарт.

Федераль закон тарафынан 2016 йылдың 30 июненә ҡарата хеҙмәттәге ҡаҙаныштары өсөн (Федераль законды ҡабул иткәнгә тиклемге ҡағиҙәләр буйынса) ведомство билдәләре менән наградланған кешеләр өсөн "Хеҙмәт ветераны" исемен биреү хоҡуғы тейешле хеҙмәт стажы булған осраҡта 2016 йылдың 1 июленән һуң да һаҡланасаҡ.

ҺОРАУ - ЯУАП



# ЭШТӘН БУШАТА АЛАМЫ?

**Эш урынынан алыҫта йәшәү сәбәпле, ҡайһы саҡта эшкә һуңлап киләм. Етәксем эштән бушатыу менән янай. Бер ҡасан да аңлатмалы яҙма алғаны юҡ. Уның янауы ни тиклем етди икәнен белгем килә. Ул ысынлап та мине эштән бушатырға мөмкинме?**

- РФ Хеҙмәт кодексына (2-се өлөш, 21-се статья) ярашлы, хеҙмәткәр эске хеҙмәт тәртибенә һәм хеҙмәт дисциплинаһына бойһона. Йәғни, ул ваҡытында эшкә килергә, төшкө аштан һуң һуңламайынса үҙенең эш урынында булырға тейеш. Шул уҡ ваҡытта хеҙмәткәр бер тапҡыр тәғәйенләнгән ваҡыттан һуңға ҡалып килһә (әгәр ҙә һуңлау ваҡыты 4 сәғәттән ашмаһа һәм "прогул" төшөнсәһенә тура килмәһә), уны эштән бушатыу мөмкин түгел. Ләкин былай һуңлауҙар йыш ҡабатланһа, улар тейешле рәүештә теркәлһә һәм һәр осраҡта ла хеҙмәткәрҙән аңлатмалы яҙыу алынһа, эш биреүсе уны эштән бушатыу хоҡуғына эйә.

# БАҠСА КЕМДЕКЕ?

**2004 йылда расписка буйынса ғына баҡса биләмәмде һаттым. Бер йыл эсендә һатып алыусы тейешле документтарҙы үҙе юллай тигән телдән килешеү булды. Ләкин ул уны үтәмәгән һәм биләмәне һатып ебәргән. Әлегә тиклем биләмә минең исемдә һанала. Килешеүҙе ғәмәлгә яраҡһыҙ тип таныу һәм биләмәне кире үҙемә ҡайтарыу мөмкинме?**

- Әлегә тиклем ер һеҙҙең милкегеҙҙә һаналғас, суд ҡарарына ярашлы, уны кире ҡайтарыу хоҡуғына эйәһегеҙ, сөнки телдән килешеү юридик көскә эйә түгел. Шул уҡ ваҡытта һатып алыусы һеҙҙән баҡса биләмәһе өсөн түләгән аҡсаһын кире ҡайтарыуҙы талап итә ала, ләкин быны өсөн дәғүә белдереү ваҡыты үтеп киткән.

# АЙЫРЫЛЫШАЛАР...

**Ҡыҙыбыҙға бер бүлмәле фатир бүләк иткәйнек. Улар уны һатып, ире менән өс бүлмәлене һатып алды. Әлеге ваҡытта улар айырылыша һәм мөлкәт бүлә. Ҡыҙыбыҙға фатирҙың күпселек өлөшө ҡалһын өсөн нимә эшләргә?**

- Ҡыҙығыҙға өс бүлмәле фатирҙа 1 бүлмәле фатирҙың хаҡына торошло өлөшөн үҙенең шәхси милке булыуы тураһында дәғүә белдерергә кәрәк. Ләкин быны өсөн суд иғтибарына 1 бүлмәле фатирҙан килгән аҡса 3 бүлмәлене һатыусыларға туранан-тура йәки банк ячейкаһы аша тапшырылыуын раҫлаусы документ күрһәтергә кәрәк буласаҡ.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Һыуыҡҡа аллергия

❖ Әгәр ҙә ҡышын ғына түгел, йәйен дә аяҡ-ҡулдарығыҙ өшөй икән, ҡанды һәм ҡан тамырҙарын таҙартып ҡарағыҙ. 100 грамм быуын сәскә тамырын (корень цикория) ваҡлап, 750 мл ҡыҙыл шарапҡа һалып 10 минут ҡайнатырға. 9.00 - 10.00 сәғәт араһында 1 стакан төнәтмәне йотомлап эсергә. Төнәтмә бөткәнсе көн һайын дауам итергә. Көнөнә 20 балан емеше ашау файҙалы, тик алдан уға ҡайнар һыу ҡойоғоҙ.

❖ Ҡанды таҙартыу өсөн 2 бүлкәт һарымһаҡҡа 250 мл ҡайнар һыу ҡойоп, 10 минут төнәтергә һәм ҡайнар килеш 6.00 сәғәткә тиклем ас ҡарынға эсергә. 2 ай дауамында аҙнаһына 1 тапҡыр ҡабатларға. Дауаланыу курсын йылына 3 тапҡыр ҡабатларға кәрәк.

❖ Ҡанды һәм ҡан тамырҙарын таҙартҡандан һуң һалҡынға аллергияны бөтөрөү өсөн 100 грамм кесерткән (крапива) япрағына 75-әр грамм шыңмәсгел (бессмертник), лаванда үләндәрен ҡушып болғатып, 2 ҡалаҡ ошо ҡатнашмаға 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, төнгөләккә термоста төнәтергә. Иртән һөҙөргә һәм көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда ярты шар стакан эсергә. Дауаланған саҡта 2 ай дауамында иртән ас ҡарынға активлаштырылған күмер ашарға (10 кг ауырлыҡҡа 1 таблетка иҫәбенән).

## Бәшмәк ауырыуы

❖ Ҡултыҡ аҫтына сыҡҡан бәшмәк ауырыуын дауалау өсөн 3 ҡалаҡ аш һеркәһен (уксус столовый) ярты балғалаҡ бор кислотаһы менән болғап, көнөнә 1-2 тапҡыр һәм төнгөләккә һөртөргә.

## Иммунитет өсөн

❖ 1 ҡалаҡ гөлйемеш емешенә (плоды шиповника) 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, эмаль һауытта ҡайнау хәленә еткерергә, 10 минут талғын утта торорға, 24 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә, көнөнә 2 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда ярты шар стакан эсергә.

## Бәшмәкле пневмония

❖ Үпкә көпшәләре шешкәндә: фенхель, мәкә (бедренец), майағас (иссоп), сыскан ҡойроғо (истод), келән ҡурай (дудник), һаҙанаҡ (багульник), мәрүәт (бузина черная) төнәтмәләре, майҙары файҙалы.

*✓ Был турала "Сыңғыҙнамә" дастанының (XVI б.) башҡортса вариантында һүрәтләнә: Сыңғыҙхан үҙенең бейҙәренә ырыу тамғалары таратып биргән - тамға, оран, ағас һәм ҡош.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ЫРЫУ ҠОШО... һайыҫҡан

**Һайыҫҡан төрлө халыҡтарҙың йолаларында муллыҡ билдәһе лә, ул тәбиғәттең уяныуына йоғонто яһай, тигәндәр. Күп халыҡтарҙың фольклорынан күренеүенсә, әгәр ҙә ер һөрөргә сыҡҡанда тәүге бураҙнаға һайыҫҡан ултырһа, уңыш насар була тигән ышаныу бар.**

Һәр хәлдә, был йолалар һәм ышаныуҙар шуны раҫларға мөмкинлек бирә: һайыҫҡан ғаилә, никах кеүек категориялар менән берләшә. Раштыуанан һуңғы байрам көндәрендә ҡыҙҙар киләсәген юрап, ҡоҙоҡ эргәһенә йөҙөмлө йәки баллы бутҡа ҡуялар һәм ниндәй ҡош осоп килерен ҡарап торалар. Әгәр ҙә һайыҫҡан килһә, кейәү егете етеҙ, йылдам, шәп була. Һайыҫҡан ихатала шыҡырлаһа, ҡоҙалар килә, тиҙәр ҡайһы бер халыҡтарҙа. Французлар әйтеүенсә, бер юлы өс һайыҫҡан күрһәң - туйға.

Этнографик һәм фольклор мәғлүмәттәренә ҡарағанда, башҡорттарҙа ла һайыҫҡанға бәйле ышаныуҙар күп булған. Ҡыйғы районы Ибрай ауылында К. Муфтаеванан яҙып алынған "Сибәғәт әүлиә" легендаһында зыяраттың бейек ағастарында ултырған ҡарғалар һәм һайыҫҡандар аҡ һаҡаллы ҡарттарға әүерелеп ергә төшә һәм Сибәғәт әүлиәне төрлө доғаларға өйрәтә, һуңынан тағы ла ҡоштарға әүерелеп осоп китә.

Кешенең һайыҫҡанға әүерелә алыу күренеше ҡайһы бер кешеләрҙең йәне убырға әйләнә, тигән ышаныуҙа күренә. Пермь крайы Барҙа районында йәшәгән ғәйнә башҡорттары ышаныуынса, бындай кеше үлгәндән һуң уның йәне убыр һайыҫҡанға әйләнә, төнөн үҙенең йортона килеп, һайыҫҡан булып шыҡырыҡлай, тәҙрәне суҡый.

Ҡара табын (Учалы районы), яйыҡ-çыбы-мең (Әлшәй районы) башҡорттарында ла һайыҫҡан "убыр" тип ҡабул ителгән.

"Иҙеүкәй менән Мораҙым" эпосында ла һайыҫҡан убыр булып күҙ алдына баҫа:

*"Мин һайыҫҡан ҡош булам,*
*Убыр тигән ут булам,...*
*Сыуал япмай йоҡлаһаң,...*
*Өйөңә инһәм төнөңдә,*
*Бер балаһыҙ ҡалдырам..."*

Быға тиклем башҡорт халҡында айырым этник төркөмдөң һайыҫҡандан килеп сығыуын дәлилләгән легенда табылмаһа ла, беҙ боронғо башҡорттарҙың мифологик ҡараштарында башҡа халыҡтарҙа булған был мотивтың юҡлығын раҫлай алмайбыҙ. Беренсенән, ара, аймаҡ, түбә, зат, киҫәк, нәҫел, тоҡом атамаларының араһында "һайыҫҡан" орнитонимынан килеп сыҡҡандары байтаҡ. Мәҫәлән, үҫәргән башҡорттары (Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районы Үрге Үтәғол һәм Ибраһим ауылдары), ҡарағай-ҡыпсаҡ (Бөрйән районы Исламбай ауылы, Ырымбур өлкәһе Гай районы Иҫке Хәлил ауылы), бөрйән (Дәүләкән районы Иҫке һәм Яңы Көрмәнкәй ауылдары), шайтан-көҙәй һәм ҡыр-көҙәй (Салауат районы Юныс һәм Ишембай ауылдары), бишул-табын (Ауырғазы районы Үтәймулла ауылы), йомран-табын, ҡыр-ҡаңлы, балыҡсы (Аҫҡын районы Сурай ауылы). Икенсенән, һайыҫҡан түңгәүер башҡорттарының изге ҡошо. Был турала "Сыңғыҙнамә" дастанының (XVI б.) башҡортса вариантында һүрәтләнә: Сыңғыҙхан үҙенең бейҙәренә ырыу тамғалары таратып биргән - тамға, оран, ағас һәм ҡош. Улар араһында түңгәүер башлығы Тимер Ҡотло бейгә ырыу ҡошо булып һайыҫҡан сыҡҡан.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ӘЙ, ТУҒАН ТЕЛ!

# ХАТАЛЫ ҺӨЙЛӘШКӘНДЕ...

## төҙәтә йөрөйөк

**Һуңғы ваҡытта матбуғат баҫмаларында, зәңгәр экрандарҙа телебеҙҙе боҙоп һөйләгән телмәрҙәргә, яҙмаларға иғтибар итәм. Уйлап ҡараһаң, ябай ғына нәмәләрҙә яңылышлыҡтар китә икән.**

Мәҫәлән, һандарҙы ғына алайыҡ. "Дүрте" тигәнде дүртеһе, дүртәрҙе, дүртешәр йәки "туғыҙар"ҙы туғыҙышар тип яҙалар. "Ян-яғы" тигәнде йән-яғы тип яҙып ҡуялар. Ян-яҡ - тирә-яҡ, ә йән яҡ бит ул йән ер тигәнде аңлата, йәғни оят ер. "Туғыу" тигән һүҙҙе туҡыу тиҙәр. Һөткә йомортҡа туғып, ҡоймаҡ бешерҙем, тип әйтеү дөрөҫ. Ә туҡыу - ул келәм, балаҫ туҡыу була. Тағы ла "күптән" һүҙен күптәндән тип үҙгәртеп ебәрәләр. "Үсекмә"не - үсексән, "сауап"ты - һауап, "түңәрәкләп"те - түңәрәтеп, "әбейе"не - әбеһе, "сабыр"ҙы - һабыр, "туғандар"ҙы - тыуғандар, "зыялыһы" тигәнде зыялыйы тип һөйләйҙәр һәм яҙалар.

Бер көн генә ҡаҙыны ҡаҙылыҡ тигәндәрен тыңлап ултырҙым. Ҡаҙылыҡ - ул ҡабырғанан һыҙырып алып, эсәккә тултыра торған майлы ит була. Эсәккә тултырғас, ҡаҙыға әүерелә. Күлдәккә тип алынған тауар - күлдәклек, ә тегелгәс, ул бит күлдәк кенә булып ҡала. Шуның кеүек. Әйткәндәй, ҡаҙыға ла хәҙер ҡаҙылыҡ тултырмайҙар, бот ите, ярылар менән алдаштыралар. Намыҫлы кешеләрҙә генә ысын ҡаҙы әҙерләнә.

Һүҙ мәғәнәһен төшөнөп етмәгәс, йыр-шиғырҙарҙа ла туҙға яҙмағандар эләгеп китә. Мәҫәлән,

*Һандуғастар ҡапҡала*
*Ҡанаттары ҡапҡала,-*

тигән йырға ишеткән һайын хайран ҡалам. Яҡты донъяла һигеҙ тиҫтәгә яҡын йәшәп тә һандуғастың ҡапҡала ҡанатын һәлберәтеп ултырғанын күрергә яҙманы. Башҡалар ҙа бындайҙың шаһиты булмағандыр, тип уйлайым. Сөнки һандуғас ҡапҡаға ҡуна торған ҡош түгел, уның урыны таллыҡ, ағаслы һыу буйҙары. Ҡарлуғастың ҡапҡала булыуына ышанырға булыр ине әле.

Мин әле бында бер нисә генә миҫал ғына килтерҙем. Һүҙ ҡәҙерен белмәй, мәғәнәһен аңламай ҡулланғандарға шелтә итеп, йәғни. Бөгөн тел ғалимдары, уҡыған кешеләр, белемлеләр күп. Улар ҙа ситтә ҡалмаһын, күҙгә күренгән хаталарҙы төҙәтеп, өйрәтеп торһон. Шулай бергәләһәк, телебеҙ ҙә сүп-сар менән тулмаҫ ине.

**Рәйсә ҠАРАБАЕВА.**

ИҒТИБАР: БӘЙГЕ!

# УНЫ СЕЛТӘР ҘӘ, ҺАҠАЛ ДА, АЛМИҘЕҮ ҘӘ, ХӘСИТӘ ЛӘ ТИҘӘР...

**2020 йылда Башҡортостанда тағы ла бер абруйлы мәҙәни сара - Бөтә донъя Фольклориадаһы үтәсәк. Шул йылдың йәйендә тыуған республикабыҙ 60-лап илдән йыйылған өс меңдән ашыу таланттың үҙ мәҙәниәтен, сәнғәтен, фольклорын күрһәтеү майҙанына әүереләсәк. Республикаға исем биргән милләт булараҡ, башҡорттар, әлбиттә, ул майҙандың уртаһында булырға, республиканы лайыҡлы һынландырырға бурыслы. Ошо мәртәбәле сараға әҙерлек сиктәрендә һуңғы ваҡытта Республика халыҡ ижады үҙәге ҡарамағындағы "Сәсәндәр үҙәге", Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ҡарамағындағы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы, Сибай "Ағинәйҙәр ҡоро" инициативаһы менән ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың традицион биҙәнеү әйберҙәрен, башҡорт ырыуҙарының милли кейемдәрен тергеҙеү буйынса әүҙем эш алып барыла, оҫталыҡ дәрестәре үткәрелә. Был боронғо шөғөлдәребеҙҙе матур итеп үҙләштергән ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы дәртләндереү, башҡалар араһында ла ҡыҙыҡһыныу уятыу өсөн "Селтәр" бәйгеһе ойошторорға ҡарар ителде. Түбәндә уның положениеһын тәҡдим итәбеҙ.**




**Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының "Селтәр" традицион биҙәнеү әйберҙәре бәйгеһе положениеһы**

**1. Ойоштороусылар:**

- Башҡортостан Республикаһы Мәҙәниәт министрлығының Республика халыҡ ижады үҙәге ҡарамағындағы "Сәсәндәр үҙәге";
- Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ҡарамағындағы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы;

Мәғлүмәти бағыусылар:

- "Киске Өфө" гәзите редакцияһы;
- "Бәйләнештә" социаль селтәренең "Башҡорт ҡатын-ҡыҙы" төркөмө;
- Башҡортостан юлдаш телевидение каналы;
- "Шоңҡар" йәштәр журналы;
- "Аманат" балалар журналы.

**2. Бәйгенең маҡсаты һәм бурыстары:**

- башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының "Селтәр" традицион биҙәнеү әйберҙәре бәйгеһе башҡорт ырыуҙары милли кейемдәре традицияларын һаҡлау, үҫтереү, үҫеп килгән быуындың зауығын традицион халыҡ мәҙәниәте нигеҙендә тәрбиәләү һәм формалаштырыу;
- башҡорт халыҡ милли кейемдәрен пропагандалау;
- һәләтле оҫталарҙы асыҡлау һәм ярҙам итеү.

**3. Бәйгенең шарттары һәм үткәреү тәртибе:**

- Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының "Селтәр" традицион биҙәнеү әйберҙәре бәйгеһе 2016 йылдың 1 февраленән 28 октябргә тиклем үтә; -конкурста теләгән һәр кем, шулай уҡ бер коллектив йәки автор бер нисә номинацияла ҡатнаша ала.

Конкурс ике этаптан тора:

беренсе этапта ғаризалар һәм материалдар (фото, видео) 15 октябргә тиклем һайлап алына;

икенсе этап Өфө ҡалаһында 28 октябрҙә үтә һәм ул түбәндәге сараларҙан тора:

- селтәрҙәр күргәҙмәһе (мәҙәниәт йорто фойеһында);
- ҡатнашыусылар һәм ойоштороусылар менән конкурс һөҙөмтәләре буйынса түңәрәк ҡор;
- "Башҡорт милли кейеме" көнө (кисәгә милли кейемдә килеү);
- сәхнәнән селтәрҙәрҙе демонстрациялау;
- бәйгелә ҡатнашыусыларҙы бүләкләү.

**Һайлап алыу турында ҡатнашыу өсөн Ойоштороу комитетына түбәндәге документтар ебәрергә:**

- ҡатнашыу тураһында ғариза;
- бәйге эштәренән портфолио (фото, видео). Һәр фотоға һан ҡуйырға, аңлатма бирергә кәрәк.

Ҡатнашыусылар өсөн мотлаҡ шарт: селтәрҙәр автор эше булырға тейеш. Һуңғы ике йылда эшләнгән эштәр ҡабул ителә.

Ғаризаларҙы, материалдарҙы "Селтәр" тигән билдә менән ошо адрес буйынса ебәрергә: 450103, Өфө ҡалаһы, Зәйнәб Биишева 17/2, Республика халыҡ ижады үҙәге; 8-(347) 289-62-00 (тел. - факс), 289-66-96, e-mail: gukrcnt@mail.ru. Яуаплы: Гөлгөнә Вәлит ҡыҙы Баймырҙина.

**Номинациялар:**

1. "Ырыу-төбәктең селтәр өлгөһө" (аныҡ тарихи осорҙағы селтәрҙең реставрацияланған варианты).
2. "Ағинәй селтәре".
3. "Үҫмер ҡыҙ бала өсөн селтәр".
4. "Йәш-елкенсәк өсөн селтәр".
5. "Заманса стилләштерелгән селтәр".

**4. Бәйге еңеүселәрен билдәләү:**

Бер ҡатнашыусыға Гран-при, һәр номинацияла беренсе, икенсе, өсөнсө урындар билдәләнә.

Йәшәү, туҡланыу, транспорт йүнәлтеүсе яҡтың командировка саралары иҫәбенә башҡарыла.

**ОЙОШТОРОУ КОМИТЕТЫ.**

✓ ***Тимәк, ул ошондай мөнәсәбәттәр ҡорорға өлгөргән булып сыға. Сөнки тап унының ярҙамы менән физкультура техникумында уҡый башлаған Хөсәйен Әхмәтов музыка техникумының скрипка класы студенты булып китә.***



ХӘТЕРКИТАП

# ЗӘБИХ ИСҠУЖИН ТИГӘН ЗЫЯЛЫ



*Киләсәктең бер бәхетле тарихсыһы
был әйберҙе материал итеп алыр.
(Зәбих Исҡужин көндәлегенән)*

**2015 йылдың йәй айҙарының береһендә миңә Ҡаҙан ҡалаһында уникаль архив менән танышыу бәхете эләкте. Был - сығышы менән Йылайыр районының Мәҡсүт ауылынан булған Зәбих Исҡужиндың архивы. Ул 1911 йылдың ғинуарында тыуған. 1926-1929 йылдарҙа Каруанһарайҙа Башҡорт педагогия техникумында уҡый. 1929-1933 йылдарҙа Ҡаҙан ҡалаһында Шәреҡ педагогия институтының донъя әҙәбиәте факультетында белем ала. Ҡаҙан дәүләт педагогия институты аспирантураһында уҡый һәм Бабич ижады буйынса диссертация тамамлай. 1936 йылдың 11 ноябрендә Ҡаҙан ҡалаһында вафат була. Архив өс опистән һәм бер нисә йөҙ биттән тора. Башҡорт һәм татар филологияһы фәнендә, башҡорт һәм татар сәнғәте фондтарында бындай ҙур күләмле архивҡа минең тәүге тапҡыр осрауым. Йәнә лә, ғалимдың вафатына 79 йыл уҙғас, Башҡортостандан тәүгеләрҙән булып был архивты ҡулға алыу бәхете миңә эләкте.**

Улар тәүге тапҡыр Ҡаҙан ҡалаһында, 1931 йылда, осраша. Береһе - сығышы менән Йылайыр районының Мәҡсүт ауылы егете Зәбихулла Исҡужин, икенсеһе - Баймаҡ районының Сыңғыҙ ауылынан Хөсәйен Әхмәтов. Йылайыр егете ул ваҡытта Башҡортостан Халыҡ мәғарифы комиссариаты йүнәлтмәһе буйынса Ҡаҙанда Шәрек педагогия институтының донъя әҙәбиәте факультетында уҡып йөрөгән була. Әйткәндәй, ул осорҙа Башҡортостан Халыҡ мәғарифы комиссариаты милли кадрҙар мәсьәләһен талантлы йәштәрҙе илдең юғары уҡыу йорттарында республика иҫәбенә уҡытыу юлы менән хәл итә. Тап ошо осорҙа Ғабдулла Амантай Ленинградҡа, көнсығыш телдәр факультетына, Дауыт Юлтый Ҡыҙыл Профессура институтының әҙәби тәнҡит бүлегенә уҡырға ебәрелә.

Баймаҡта тау-сәнәғәт мәктәбендә белем алған Хөсәйен Әхмәтов та 1931 йылда Баймаҡ район партия комитетының сәнғәт һәм пропаганда бүлеге етәксеһе Сәғит Мифтахов фатихаһы менән Ҡаҙанға юллана. Уны Ҡаҙанға бында Шәрек педагогия институтын тамамлаған һәм Мәскәүҙең тау сәнәғәт академияһында уҡып йөрөгән ике туған ағаһы Ғәлләм Вәлиев алып килә. Тик Хөсәйен Әхмәтовҡа үҙе ниәтләгән музыка техникумына инергә насип булмай. Уның был маҡсатын тормошҡа ашырыуға Зәбих Исҡужин ярҙам итә. Фани донъяның асылында кешелек ҡөҙрәте тигән бөйөк төшөнсә бар. Кешелек ҡөҙрәте - эргәндәгеләрҙе күрә, таный һәм ишетә белеүҙән генә тормайҙыр. Ул талантлыларға, уларҙың таланты хаҡына хеҙмәт итә белеү! Егерме йәшлек студент Зәбих Исҡужин да үҙ өҫтөнә бик ҙур бурыс ала. Ул бурысты атҡарып сығыу өсөн йәш егеттең шәхси йәки эш мөнәсәбәттәре абруйлы һәм дәрәжәле кешеләр менән бик юғары кимәлдә булырға тейеш. Тимәк, ул ошондай мөнәсәбәттәр ҡорорға өлгөргән булып сыға. Сөнки тап унының ярҙамы менән аптырағандың көнөнән физкультура техникумында уҡый башлаған Хөсәйен Әхмәтов музыка техникумының скрипка класы студенты булып китә.

Ул саҡта музыка техникумы директоры булып Александр Александрович Литвинов эшләй. Александр Литвинов менән Зәбих Исҡужин Ғәзиз Әлмөхәмәтов аша таныш булырға тейештәр. Александр Литвинов - Ғәзиз Әлмөхәмәтов, Солтан Ғәбәши һәм Василий Виноградовтар тарафынан яҙылған һәм 1925 йылда ҡуйылған беренсе башҡорт һәм татар операһы "Сания"ның һәм 1930 йылда ҡуйылған "Эшсе" операһының дирижеры. 1929 йылда БАССР-ҙың 10 йыллығы уңайынан тынлы оркестр өсөн яҙылған "Башҡортостан маршы" менән дә ул етәкселек итә.

Ғөмүмән, үткән быуаттың 30-сы йылдарында Татарстан ерендә юғары уңыштарға өлгәшкән башҡорттар ярайһы уҡ күп кенә була. Татар дәүләт театры актеры, башҡорт дворяндары Мутиндар нәҫеленән булған Мөхтәр Мутин революция дәүерендә Ҡаҙанда Үҙәк хәрби коллегияның политбүлегендә эшләй, 1920 йылда ТАССР Наркомпросында театр бүлеге етәксеһе була. Татар театры өсөн махсус бина һалдырыуға өлгәшкән кеше лә ул була. Ғәзиз Әлмөхәмәтов 1930 йылда Татар дәүләт театрында опера студияһы артисы булып штатта тора. Зәбих Исҡужиндың да был театрға ҡағылышы бар. 1932 йылдың 7 декабрендә Һаҙи Таҡташтың хәтер кисәһе уҙғарыла. Татар халҡының бөйөк шағиры Һаҙи Таҡташ ижадына байҡау яһау бурысы башҡорт ғалимы Зәбих Исҡужинға йөкмәтелә. 1933 йылда "Бөгөнгө татар драма театры" тигән 4 биттән торған мәҡәләһе донъя күрә. Шулай итеп, Ҡаҙан башҡорттары өсөн Татар дәүләт театры танышыу һәм аралашыу мөмкинлеген тыуҙырған төйәк була. Йәнә, Ҡаҙанда "Башземлячество" тип аталған ойошма эшләй. Был ойошма студент Зәбих Исҡужинға стипендия түләп тора. Ғәзиз Әлмөхәмәтов та был ойошма өсөн үҙ кеше була.

Хөсәйен Әхмәтов Ҡаҙан музыка техникумында бер йыл уҡығас, 1932 йылда П.И. Чайковский исемендәге Мәскәү дәүләт консерваторияһы эргәһендә башҡорт студияһы асыла. Ғәзиз Әлмөхәмәтов Башҡортостандың төрлө төбәктәренән йыйылған буласаҡ опера йырсыларын консерваторияға уҡырға алып китә. Музыка белеменә эйә булмаған утыҙ башҡорт балаһы араһында Ҡаҙанда бер йыл музыка серҙәрен үҙләштергән Хөсәйен Әхмәтов та була.

Зәбих Исҡужин һәм Хөсәйен Әхмәтов... Башҡортомдоң ике данлы улы. Береһе - ағай, икенсеһе ҡусты булып, ни бары дүрт йыл йәшәп өлгөрәләр. Ошо дүрт йыл эсендә Мәскәүҙән оло ихтирам менән "Зәбих ағай" тип яҙылған хаттар килә. Ҡаҙандан Мәскәүгә юғары идеяларға, оло маҡсаттарға ҡоролған яуап хаттары китә. Был хаттарҙа Зәбих Исҡужин, моғайын, Бабич ижадына арналған диссертацияһын тамамлауы хаҡында ла хәбәр иткәндер. Һаҙи Таҡташ ижады хаҡында күләмле хеҙмәтенең Башҡортостанда айырым мәҡәлә булып донъя күреүе хаҡында ла яҙғандыр (1935 йылда әҙәби тәнҡит өлкәһендәге иң күләмле хеҙмәт). Йәнә лә, Баязит Бикбай менән хатлашыуын, аспирантураны тамамлағас, Ғөбәй Дәүләтшиндән, Ғабдулла Амантайҙан, Булат Ишемғолдан Башҡортостанға эшкә саҡырып һуғылған телеграммалары хаҡында шулай уҡ Хөсәйен Әхмәтовҡа хаттар аша һөйләгәндер (был хаттар һәм телеграммалар унының архивында һаҡлана - **Авт.**).

1934 йылдың 9 июлендә Зәбих Исҡужин көндәлегенә түбәндәге юлдарҙы яҙып ҡуя: *"Мин ғүмеремдең иң зауыҡлы, матур сағы әле алда тип ышанам, күргән-белгәндәрем, ҡайғы-шатлығым - улар барыһы ла матур киләсәгем өсөн алған һабаҡтарым булып ҡаласаҡ... Минең был ғүмер юлымды киләсәктә туғандарым (бәлки, шунда балаларым да) ҡыҙыҡһынып уҡырҙар, тигән уйҙы алға ҡуймайым. Киләсәктең бер бәхетле тарихсыһы был әйберҙе материал итеп алыр..."*

1936 йылдың 11 ноябрендә Зәбих Исҡужиндың ғүмере өҙөлә. Башҡортостан Хөкүмәте оло өмөттәр бағлап уҡырға ебәргән йәш ғалимын үҙ еренә ҡайтара алмай. Башҡорт һәм татар филологияһы фәне ҙур юғалтыу кисерә. "Заманаһы һайламайҙар, унда йәшәйҙәр һәм үләләр". Хәҡиҡәткә әйләнгән был фекерҙе кем башлап әйткәндер - билдәһеҙ. Әммә ысынбарлыҡ шул: заманаһы һайламаһаң да, заман өсөн хеҙмәт итеү кеүек бурыс бар. Был мәҡәләлә композитор Хөсәйен Әхмәтовтың биографияһына аҙмы-күпме юлдар ҙа өҫтәлгәндер, әммә Башҡортостан һәм башҡорт зыялылары заманына, халҡына хеҙмәт иткән Зәбих Исҡужиндың шәхесен дә онотмаҫҡа тейеш.

**Гөлсәсәк САЛАМАТОВА,**
**филология фәндәре кандидаты,**
**З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты доценты.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Иван ЛЕПЕХИН*

## XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Ысын башҡорт йәйләүендә булырға тура килгәнлектән, ошо хаҡта ла бәйән итәйем.

Улар йәйләүгә ғаиләләргә бүленеп сыға, шуға күрә йәйләү туған-тыумасанан хасил була. Йәйләү урынын һәр саҡта ла йылға һәм шишмә буйҙарынан һайлап, малдар тирмәләргә яҡын килмәһен өсөн кәртәләп ҡуялар. Туҡланған ризыҡтары башлыса һөт аштарынан булғас, уларҙың йәйләүҙәге төп эштәре лә шуның менән бәйле. Иртә менән малдарын ҡыуып килтереп, бейәләрен һәм һыйырҙарын айырып алып, төрлө һауыттарға һауалар. Һыйыр һөтөнән май, төтөндә ыҫланған сыр яһайҙар. Улар айран тип аталған әсетелгән һөттө, тарҙарҙағы кеүек, ғәҙәти эсемлек итеп ҡуллана.

Бейә һөтөнән яһалған ҡымыҙ уларҙың иң яратҡан эсемлеге булып, уларҙың төп аҙыҡтарынан һанала. Ҡымыҙ бешеү өсөн уларҙа һаба тип аталған күн тоҡ ҡулланыла, уға бер аҙ эҫе һыу ҡушылған бейә һөтөн ҡойоп, төпкә ултырмаһын һәм эремсеккә әйләнмәһен өсөн махсус эшләнгән бутағыс менән бутап торалар.

Йәйләүҙә мал аҫрау күп яҡтан ҡалмыҡтарҙыҡына оҡшаш. Иртән малдарҙы ҡыуып килтергәс, ҡолондарҙы һәм быҙауҙарҙы тирмәләргә яҡын ерҙә бауға бәйләп ҡуйып, көн буйына бер ниндәй аҙыҡһыҙ тоталар. Көн уртаһында тирмәләр тирәһенә башҡорттар төтөн ебәрә, күгәүендән ҡотолор өсөн малдар үҙҙәре ошонда килә; ҡолондар кешнәүенә, быҙауҙар баҡырыуына ҡарамаҫтан, уларҙың инәләре яҡын килмәй; әгәр ҙә уларҙан балаһына яҡынлашырға тырышыусылары табылһа, ҡолондарҙың моронона төпһөҙ тоҡ кейҙереп ҡуялар, ә уның ҡолондоң алғы иренен ҡаплап торған яғы оҙонораҡ була. Бына ошо бер эшкә ярамаған машина ҡолондарға инәләрен имергә ҡамасаулай.

Кискә табан уларҙың малдары билдәле бер ваҡытта шулай уҡ үҙҙәре тирмәләр янына ҡайта; әммә бейә, башҡорт ҡатыны уға ҡороҡ кейҙереп, ҡолон эргәһенә алып килмәйенсә, балаһы янына бармай; был осраҡта ла уға инәһенең бер имсәген генә алырға ирек бирәләр, быныһы ла, күрәһең, елендәге һөт имсәктәргә төшһөн өсөн генә эшләнә. Башҡорт ҡатындары ҡымыҙ бешер өсөн бейә һөтөн бөткәнсе һауып алып, буш еленле бейәләрҙе ҡолондары менән төнгөлөккә ебәрә. Һыйырҙарҙы ла шул тәртиптә һауалар. Был башҡорт ҡатындарының йәйләүҙәге төп эше булып тора. Ә башҡорт ирҙәре был саҡта ҡымыҙ һемереүҙән, йәиһә туғайҙарҙа ваҡыты-ваҡыты менән малдарҙы ҡарап килеүҙән башҡа бер нәмәне лә бар тип белмәй.

Беҙгә ярҙам итергә теләүсе старшина үҙ йәйләүендә башҡорттарҙы ҙур йыйынға саҡырҙы һәм беҙҙең бында ниндәй ниәттә ебәрелгәнебеҙҙе аңлатып, һәр кемдән беҙгә әйтер һүҙе булыу-булмауы хаҡында һорашты. Уларҙың яуаптарынан Ағиҙел буйындағы ике мәмерйәне барып ҡарау кәрәк, тип табылды. Улар старшина йәйләүенән 60 саҡырым тирәһендә булып, унда бейек тауҙар һәм урмандар аша барырға тура килде. Шулай итеп, ылауҙы йәйләүҙә ҡалдырып, унда һыбай киттек.

**(Дауамы бар).**

✔ *Рус теле буйынса БДИ тапшырыуҙа дөйөм Рәсәй күрһәткесенең Башҡортостанға, Татарстанға ҡарағанда 5-6 берәмеккә түбән булыу миҫалын килтерер инем. Тимәк, милли республикаларҙа рус теле тейешле кимәлдә өйрәнелә.*

# БЕР ТЫРМАҒА ҠАБАТ

## Йәғни рус телен уҡытыу буйынса

**Былтырғы йылдың һуңғы көнөндә Рәсәй Президенты В. Путин "Рәсәй Федерацияһының дөйөм белем биреү ойошмаларында рус телен һәм әҙәбиәтен уҡытыу концепцияһы"на ҡул ҡуйҙы. Был тема бынан ике йыл элек Рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының Бөтә Рәсәй ассоциацияһы съезында күтәрелеп, илдең гуманитар көрсөк алдында тороуы билдәләнгәйне һәм мәктәптәрҙә филология предметтарын уҡытыуға яңы ҡараш кәрәклеге һыҙыҡ өҫтөнә алынғайны. Документ буйынса фекер алышыу маҡсатында редакцияға мәғариф өлкәһендәге генә түгел, ғөмүмән, милләт яҙмышына ҡағылышлы бер генә мәсьәләгә лә битараф булмаған шәхестәр - Халыҡ-ара иҡтисад һәм хоҡуҡ институтының Өфөләге филиалы директоры, юрист Ғарифулла ЯПАРОВ менән Башҡортостан Мәғарифты үҫтереү институты доценты, юрист Фәнзил САНЪЯРОВты саҡырҙыҡ.**

**▸ Концепция буйынса илебеҙҙең милли республикаларында хатта дәүләт кимәлендә фекер алышыуҙар ойошторолдо. Ул фекер алышыуҙарҙа, Фәнзил Бүләк улы, һеҙ ҙә ҡатнаштығыҙ шикелле?**

**Ф. Санъяров:** Эйе, Татарстан, Саха, Бүрәт республикаларында дәүләт, власть органдары, мәғариф етәкселәре һәм киң йәмәғәтселек был мәсьәлә буйынса ныҡлап эшләй башланы. 27 ноябрҙә минә, республикабыҙҙа башҡорт телен, рус телен уҡытыу мәсьәләләрен ишетеп кенә түгел, күреп белгән бән фәкирегеҙгә, Ҡаҙанда Татарстан Дәүләт Советы ултырышында ҡатнашырға тура килде. Уны парламент рәйесе урынбаҫары Римма Ратникова алып барҙы. Ултырышта 60-лаған кеше, шул иҫәптән Рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының Халыҡ-ара ассоциацияһы Президенты, Рәсәй Мәғариф академияһы Президенты Людмила Вербицкая (әйткәндәй, документ авторҙарының береһе), Татарстан ғалимдары, йәмәғәт эшмәкәрҙәре, депутаттар, Сыуашстан Фән һәм мәғариф министрының беренсе урынбаҫары Светлана Петрова ҡатнашты. Барыбыҙ ҙа яңы Концепцияға ҡырҡа ҡаршы сыҡтыҡ. Бер яҡтан ҡарағанда, Концепцияны хупларға мөмкин. Сөнки уның 1-3-сө пункттарында рус телен уҡытыуҙы камиллаштырыу, рус теле уҡытыусылары кадрҙары әҙерләү йәһәтенән сифатын күтәреү, рус телен башҡа дәүләттәрҙә, БДБ республикаларында, мәҫәлән, Балтик буйы дәүләттәрендә, уҡытыу тураһында һүҙ бара һәм был йәһәттән хуплауға ла лайыҡ. Ысынлап та, Балтик буйы илдәрендә, Молдовала рус телен ҡыҫыу бара. Донъяла иң ҙур халыҡ-ара телдең береһе булған рус теленең донъя кимәлендә үҙенең позицияһы булырға тейешлеге бәхәсһеҙ. Шуға ла Рәсәй Федерацияһындағы белем биреү учреждениеларында филологик дисциплинаны ныҒытыу һәм белем биреүҙең яңы дәүләт стандарттары менән беойошторолдоргә ҡушып, көслө филологик киңлекте барлыҡҡа килтереү Концепцияның төп маҡсаты булып тора. Маҡсат изге, ләкин "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында"ғы Закондың ФГОС-ҡа ҡығылышлы 5-се статьяһы милли республикаларҙа телдәрҙе, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, йолаларҙы өйрәнеүҙе тулыһынса хуплай. Нишләптер, Концепцияны әҙерләүселәр ошо мөһим мәлдәргә иғтибар бирмәгән. Бында инде ниндәйҙер сәйәси ҡараштар булғанлығы һиҙелә. Мәҫәлән, шундай күренеш нигеҙ итеп алына: йәнәһе лә, бөгөн Рәсәйҙә 43 мең белем биреү учреждениеһы бар, шуларҙың 4 меңе (10 процент) - милли телдәрҙә уҡыта. Ана шул милли телдәрҙе уҡытыу арҡаһында Рәсәй халыҡтарының күбеһенең рус телендә белем алыу йәһәтенән хоҡуҡтары сикләнгән булып сыға. Йәғни, рус телен уҡытыуҙа тигеҙ булмаған шарттар тыуҙырыла. Был төптө буш нигеҙ. Сөнки рус телен рустар ғына түгел, рус булмаған халыҡтар ҙа бер тигеҙ кимәлдә өйрәнә. Һүҙҙәремде дәлилләп, рус теле буйынса БДИ тапшырыуҙа дөйөм Рәсәй күрһәткесенең Башҡортостанға, Татарстанға ҡарағанда 5-6 берәмеккә түбән булыу миҫалын килтерер инем. Был нимә хаҡында һөйләй: тимәк, милли республикаларҙа рус теле тейешле кимәлдә өйрәнелә, 100-150-шәр бала Санкт-Петербург, Мәскәү, Ҡаҙан һ.б. университеттарына бер ниндәй проблемаһыҙ уҡырға инеп китә. Әлеге дүрт мең милли мәктәпкә ҡарата әйтелгән һүҙҙең буш булыуына тағы бер дәлил был.



Беҙ ҙә саф башҡорт ауылында үҫкән балалар. Йомрантабын ырыуы башҡорттарыбыҙ. Тыуған ауылым Биш-Уңғарҙа (Ҡырмыҫҡалы районы) 100 йыл элек рус-башҡорт мәктәбе асылған. Уның тәүге уҡыусыһы - ғалим, Социалистик Хеҙмәт Геройы Сабир Ҡунаҡбаев. Рәсәйҙәге иң юғары кимәлдәге ғалим-аграрий, "Сулпан" арышы һәм башҡа сорт арыш буйынса белгес. Күпме арҙаҡлы кешеләр сыҡҡан минең мәктәбемдән! Уларҙың береһенә лә рус телен өйрәнеү буйынса айырым шарттар тыуҙырмаған. Мин үҙем ошо мәктәпте тамамлап, БДУ-ны, Свердловск педагогия институтын, БАГСУ-ны ҡыҙыл дипломға тамамланым. Хатта рустарға ҡарағанда ла юғарыраҡ билдәләргә уҡыным, сөнки рус теле ярҙам ғына итте. Бер ниндәй ҙә сикләнеү булманы. Шуға күрә лә бөгөн был Концепция ошо пункты менән ысынбарлыҡҡа тап килмәй, тип ышанысл итеп әйтә алам.

> ***Рәсәй Конституцияһының 26-сы статьяһының 2-се өлөшөндә "Һәр кем туған теле менән файҙаланырға, аралашыу, тәрбиәләү, уҡытыу һәм ижад телен ирекле һайларға хоҡуҡлы", тиелә. "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында"ғы Закон да ошо хоҡуҡтарҙы тормошҡа ашырыуҙың хоҡуҡи нормативтарын үҙ эсенә ала. Башҡортостан Конституцияһында 32-се, 48-се статьялар бар, унда ла граждандарҙың туған телен ҡулланыу хоҡуғы тураһында яҙылған. Рәсәй - 85 субъекттан торған федератив дәүләт һәм уларҙың һәр ҡайһыһының үҙ Констиутцияһы, ә милли республикаларҙың Төп Законында әле әйтеп киткән ике норма бар. Улар тел мәсьәләләрен урындарҙа нисек хәл итеүгә нигеҙ булып тора.***

**Ғ. Япаров:** Әйҙәгеҙ, рус телен күберәк уҡытайыҡ, тигән бер дәлилде Концепцияның нигеҙе итеп алып, уны бөтөн Рәсәйгә таратырға тырышыу - башҡа телдәргә иғтибарҙы кәметеүҙе, уларҙы асыҡтан-асыҡ ҡыҫырыҡларға тырышыуҙы күрһәтә. Сөнки мәктәптә дәрестәр билдәле ваҡыт эсендә уҡытыла, уларҙың нормалары бар, сәғәттәрҙе бер нисек тә арттырып булмай. Тимәк, рус теле ниндәйҙер икенсе предмет иҫәбенә уҡытылырға тейеш булып килеп сыға.

Минеңсә, Башҡортостанда рус теле мәктәптәрҙә һәйбәт уҡытыла. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзалары республиканың район-ҡалалары буйлап тикшереү менән йөрөнө, бер ерҙә лә рус теле уҡытылмай, тигән зарланыу булманы, киреһенсә, башҡорт теле уҡытылмауына дәлилдәр күп. Башҡорт телен уҡытыу мәсьәләһе әле лә көнүҙәк булып ҡала. Сөнки ҡайһы бер мәктәптәрҙә башҡорт теле дәрестәрен дәүләт теле кимәлендә генә уҡытҡан урындар ҙа бар. Рус теленән БДИ тапшырырға, тип, башҡорт ата-әсәләре үҙҙәре лә балалаларын туған телдән мәхрүм итеү юлында хәҙер. Улар төптән хаталана, әлбиттә. Уларға хаталарын танырға ярҙам итергә лә кәрәк. Был иң беренсе сиратта мәктәптәрҙең, уҡытыусыларҙың, Мәғариф министрлығының бурысы.

Белорет районында таныштарым бар, уларҙың мәктәпте башҡортса уҡып тамамлаған балалары Сорбоннала уҡып йөрөй. Бындай миҫалдар бирәү генә түгел. Бының менән нимә әйткем килә: милли республикала тыуып үҫкән балалар рус телен генә түгел, башҡа телдәрҙе лә яҡшы үҙләштереп, сит илдәрҙә лә уҡыйҙар. Тимәк, был Концепцияның положениеһы төптән дөрөҫ түгел. Ул милли республикаларға әллә ни файҙа килтермәйәсәк, файҙаһына ҡарағанда зыяны күберәк буласаҡ.

**Ф. Санъяров:** Татарстан Дәүләт Советындағы ултырыш ҡарарының 5-се пунктына, Концепцияла төбәк компоненты булырға тейеш, тигән тәҡдим индерелде. Йәғни, ниндәй генә концепция булыуға ҡарамаҫтан, ул төбәк компонентын мотлаҡ иҫәпкә алырға тейеш. Өҫтәп, шуны ла әйтер инем: Башҡортостанда рус һәм башҡорт, рус һәм татар билингвтарының ҙур тәжрибәһе тупланған. Беҙ милли мәктәптәрҙә рус телен өйрәнеү буйынса иң алға киткән республикаларҙың береһе. Быны раҫлау өсөн рус телен башҡорт мәктәптәрендә уҡытыу методикаһы өлкәһендәге белгес, педагогия фәндәре докторы Лена Саяхованың, педагогия фәндәре кандидаты Рәшит Әлмөхәмәтовтың, ике теллелек шарттарында рус телен уҡытыу методикаһы мәсьәләләре менән шөғөлләнгән педагогия фәндәре докторы Кәбир Закирйәновтың исемдәрен атау ҙа етә. Ысынлап та, республикабыҙ, уны В. В. Путин да бер нисә тапҡыр ҡабатланы, телдәрҙе уҡытыу буйынса Рәсәйҙә танылған лидер. Сөнки беҙҙә 14 тел өйрәнелә, 6 телдә уҡытыу ойошторолған. Хатта Марий Иле, Удмуртияға ҡарағанда ла мари һәм удмурт телен яҡшыраҡ уҡытабыҙ. Был бит күп нәмә хаҡында һөйләй.

Дөрөҫөн әйткәндә, Концепция милли республикаларҙа ғына резонанс тыуҙырманы. Миҫал итеп, "Литературная газета"ның 25-се декабрҙәге һанын килтерер инем. Филология фәндәре кандидаты, Мәскәүҙең асыҡ белем биреү институты профессоры Наталья Кутейникова, Концепция тураһында "смыслы туманные", ти. Атаҡлы рус теле белгесенең был һүҙҙәре күп нәмә хаҡында һөйләй. Мәскәүҙең 2097-се мәктәбенең рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, йылдың иң яҡшы уҡытыусыһы Ольга Зайцева ла Концепцияның бер ниндәй ҙә файҙаһы булмауын белдерә һәм, уға нигеҙләнһәк, рус теле мәҙәниәте тигән күренештәрҙе юҡҡа сығарасаҡбыҙ, тип белдерә. Иң мөһиме - ҙур йылғалар бәләкәй шишмәләрҙән хасил булған кеүек, бөйөк рус теле бит рус халҡының ғына теле түгел, Пушкин әйткәнсә, рус теленә тәрәнерәк инһәң, унда төрки телдәрен дә табырға мөмкин.

**▸ Закон күҙлегенән ҡарағанда, резонанс тыуҙырған пункт**

*✔ БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ҙа үҙенең ҡарашын белдерер, тип уйлайбыҙ. Сөнки уның корпусын бөтөн республика халҡы һайлаған депутаттар тәшкил итә. Әгәр был мәсьәләне улар күтәрмәһә, кем күтәрер?*



# БАҪАБЫҘ ТҮГЕЛМЕ?

## яңы концепция тураһында



**Төп Законға ҡаршы килә түгелме?**

**Ғ. Япаров:** Рәсәй Конституцияһының 26-сы статьяһының 2-се өлөшөндә "Һәр кем туған теле менән файҙаланырға, аралашыу, тәрбиәләү, уҡытыу һәм ижад телен ирекле һайларға хоҡуҡлы", тиелә. "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында"ғы Закон да ошо хоҡуҡтарҙы тормошҡа ашырыуҙың хоҡуҡи нормативтарын үҙ эсенә ала. Башҡортостан Конституцияһында 32-се, 48-се статьялар бар, унда ла граждандарҙың туған телен ҡулланыу хоҡуғы тураһында яҙылған.

Рәсәй - 85 субъекттан торған федератив дәүләт һәм уларҙың һәр ҡайһыһының үҙ Конституцияһы, ә милли республикаларҙың Төп Законында әле әйтеп киткән ике норма бар. Улар тел мәсьәләләрен урындарҙа нисек хәл итеүгә нигеҙ булып тора. Концепцияға ҡабат урап ҡайтҡанда, ул ҡарар (постановление) буйынса ҡабул ителде, тимәк, кимәле буйынса закондан түбән тора. Шуға күрә, ул юридик яҡтан нығытылһын өсөн йә айырым закон сығарылырға, йә ғәмәлдәгеләренә үҙгәрештәр индерелергә тейеш. Шуға тиклем үҙ һүҙебеҙҙе әйтеп ҡалыу зарур. Сөнки хатта "Рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары ассоциацияһы" Дөйөм Рәсәй йәмәғәт ойошмаһының ғилми-методик советы ағзалары ла Концепцияның бик күп эшләнеп еткерелмәгән урындарын билдәләп, һығымта яһаны.

Был Концепцияны әҙерләгән кешеләрҙең береһенә лә бысраҡ ташлағым килмәй, улар үҙ өлкәһендә абруйлы, арҙаҡлы белгестәр, ҙур ғалимдар. Рәсәйҙең ниндәйҙер төбәгендә рус телен уҡытыу түбән кимәлдә икән, ни өсөн уларҙа Башҡортостан кеүек алдынғы республикаларҙың тәжрибәһен таратмайҙар? Ниндәйҙер ялған ҡараштары алалар ҙа, шуны ҡуйырталар ғына. Йәнәһе, милли республикаларҙа рус телен белмәйҙәр һәм шуның арҡаһында юғары уҡыу йорттарына уҡырға инә алмайҙар. Әгәр быны инҡар итеүсе йөҙҙәрсә-меңдәрсә миҫал бар икән, быға нисек күҙ йоморға мөмкин?

**Ф. Санъяров:** Милли мәғариф мәсьәләһе тураһында һүҙ йөрөткәндә, беҙ, тәү сиратта, хоҡуҡи-норматив документ булараҡ, Балалар хоҡуғы тураһындағы конвенцияны күҙ уңында тотабыҙ. Ул Рәсәйҙә 1990 йылдың ноябрендә ратификацияланды. Һәм ул әлегәсә үҙ көсөндә, уны берәү ҙә юҡҡа сығара алмай һәм юҡҡа сығарырға хоҡуғы ла юҡ, сөнки ул Халыҡ-ара норматив документ. Уның 28-30-сы статьяларында һәр бер милләт, хатта аҙ һанлы милләттәр ҙә үҙ телен, үҙ йолаларын өйрәнергә тейешлеге аҡҡа ҡара менән яҙылған. Уны боҙорға хатта ил етәкселәренең дә хаҡы юҡ. "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында"ғы Закондың 14-се статьяһында әлеге положениелар тулыһынса һаҡланған һәм тулыһынса нормаға һалынған, нығытылған. "Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында"ғы Закондың 6-сы статьяһы ла быны таный. Тимәк, ниндәй генә концепциялар тәҡдим ителмәһен, авторҙары, уны әҙерләүселәр беренсе сиратта ошо норматив базаға таянырға һәм уны нигеҙ итеп алырға тейеш. Үкенескә күрә, яңы Концепцияла норматив-хоҡуҡи документтар инҡар ителә.

**Милли мәктәптәрҙәге, юғары уҡыу йорттарының ҡайһы бер бүлектәрендәге туған телдәге предметтарҙы уҡытыуҙы Концепция нисек күҙаллай? Әллә улар бөтөнләй бөтөрөлөп, уҡытыу тик рус телендә генә алып барылырға тейешме? Ул саҡта 9-сы синыфты тамамлаусылар ДАИ-ҙы туған телендә тапшырыуҙан мәхрүм ҡаласаҡмы?**

**Ф. Санъяров:** Аңлауымса, әгәр ҙә тиҙ арала Концепцияға үҙгәрештәр индереүгә өлгәшмәһәк, яйлап башҡорт теле генә түгел, башҡа милли республикаларҙағы туған телдәр ҙә ҡыҫырыҡланасаҡ. Ниәт - рус телен уҡытыуҙың сифатын күтәреү ниәте, ысынлап та, изге, әммә уның механизмдары изге түгел. Беҙҙе бына шул борсой. Башҡорт, татар, сыуаш һ.б. мәктәптәре булған, улар киләсәктә лә буласаҡ, сөнки Конституциябыҙ шуны гарантиялай, ил Президенты Конституция гаранты булып тора. Ә положениелар, концепциялар - улар үҙгәрергә мөмкин һәм, һис шикһеҙ, үҙгәрергә тейеш.

**ШОС һәм БРИКС илдәре башлыҡтары саммиттарынан һуң Рәсәй Президенты В. Путиндың, рус һәм башҡорт телен өйрәнегеҙ, тигәненә күп тә үтмәй, уның һүҙҙәренә ҡаршы килеүсе Концепцияның донъя күреүе аңлашылмай. Һәм ни өсөн Татарстанда был мәсьәлә Дәүләт Советы кимәлендә үтә, ә Башҡортостанда уны бары тик һеҙҙең кеүек айырым кешеләр генә күтәрә?**

**Ф. Санъяров:** Татарстанға БР Мәғариф министрлығы ҡушыуы буйынса, мәғариф структураһында эшләгән ғалим, Мәғарифты үҫтереү институты доценты, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы булараҡ барҙым. Эйе, беҙгә лә был документ буйынса ниндәйҙер ҡараш формалаштырырға кәрәк. Республика кимәлендә дәүләт структуралары, Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары, йәмәғәтселекте йыйып, тиҙ арала эшләүҙе түңәрәк ҡор уҙғарырға кәрәк.

**Ғ. Япаров:** БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ҙа, Татарстандың Дәүләт Советы кеүек, үҙенең ҡарашын белдерер, тип уйлайбыҙ. Сөнки уның корпусын бөтөн республика халҡы һайлаған депутаттар тәшкил итә. Әгәр был мәсьәләне улар күтәрмәһә, кем күтәрер? Улар бөтөн халыҡ вәкиле булған, халыҡты көйҙәләндергән, уның мәнфәғәтен яҡларға саҡырылған дәүләт органы бит.

**Былтыр "Рәсәй милләте берҙәмлеген нығытыу һәм Рәсәй халыҡтарының этномәҙәни үҫеше (2014 - 2020 йылдар)" программаһы донъя күрҙе, әле - яңы концепция... Был, ирекһеҙҙән, Рәсәй федерализмы унитаризмға әйләнеп бара, тигән фекергә этәрмәйме?**

**Ғ. Япаров:** Ундай тенденция бар. Әгәр ҙә федерализмдан унитар дәүләткә күсәбеҙ икән, унда милли республикаларҙың, тәү сиратта, аҫаба халыҡтың иҡтисад яғынан да, тел йәһәтенән дә, ер мәьәләһе буйынса ла һ.б. хоҡуҡтары ҡыҫыласаҡ. Рәсәйҙең үҫеше, уның киләсәге өсөн берҙән-бер юл - ул федерализм. Башҡа төрлө идаралыҡ тура килмәй беҙгә.

**Ф. Санъяров:** Күреүебеҙсә, Рәсәй етәкселеге Рәсәй империяһының идара итеү моделенә ынтыла. Ләкин шуны онотмаҫҡа кәрәк - Рәсәй империяһын бөгөн беҙ ни тиклем генә әрләһәк тә, милли мәсьәләләрҙә батшалар сәйәсәте бик төптән уйланылған булған. Мәҫәлән, Өфө һәм Ырымбур губерналарына тәғәйенләнгән генерал-губернаторҙар мотлаҡ башҡорт телен белгән. Әгәр ҙә шулай булмаһа, башҡорт халҡы Перовскийҙы, Циолковскийҙы хөрмәтләп, уларға арнап йыр һәм бейеү сығармаҫ ине. Перовский үҙенең эргәһендә юҡҡа ғына тәржемәсеһен - Владимир Далде, ике ҡурайсыны йөрөтмәгән. Тимәк, Рәсәй империяһы милли төбәктәрҙең менталитетын иҫәпкә алған, улар менән иҫәпләшкән. Шул ваҡытта уҡ беҙҙең башҡорт депутаттарының Дәүләт Думаһында йөрөүен дә онотмайыҡ. Рәсәй дәүләт булып йәшәргә теләй икән, уның өсөн иң ҡулай юл - ул федерализм. Федерализм бөттө икән, Рәсәй ҙә бөттө. Сөнки Рәсәйҙә - 200-ҙән, Башҡортостанда 130-ҙан ашыу милләт йәшәй. Уларҙы күпме генә урыҫ итмә, урыҫ менталитетын бер ваҡытта ла биреп булмай, сөнки менталитет ул ҡан менән бәйле. Рус телен рустан да яҡшы белергә, русса һөйләшергә, русса фекерләргә мөмкинһен, ләкин һинең тамырыңда төрки ҡаны, башҡорт ҡаны аға. Шуға күрә беҙҙең киләсәгебеҙ - бары тик федерализмда.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

***Донъяла иң ҙур халыҡ-ара телдең береһе булған рус теленең донъя кимәлендә үҙенең позицияһы булырға тейешлеге бәхәсһеҙ. Шуға ла Рәсәй Федерацияһындағы белем биреү учреждениеларында филологик дисциплиналы нығытыу һәм белем биреүҙең яңы дәүләт стандарттары менән беройошторолдорға ҡушып, көслө филологик киңлекте барлыҡҡа килтереү Концепцияның төп маҡсаты булып тора. Маҡсат изге, ләкин "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында"ғы Закондың ФГОС-ҡа ҡығылышлы 5-се статьяһы милли республикаларҙа телдәрҙе, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, йолаларҙы өйрәнеүҙе тулыһынса хуплай. Нишләптер, Концепцияны әҙерләүселәр ошо мөһим мәлдәргә иғтибар бир-мәгән.***

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Концепция буйынса фекер әйтеүен һорап, беҙ РФ Дәүләт Думаһы депутаты, Конституцион ҡанунлыҡ һәм дәүләт ҡоролошо буйынса комитет ағзаһы Рөстәм ИШМӨХӘМӘТОВҡа мөрәжәғәт иттек:**
"Милли республикалар йәмәғәтселегенең "Рәсәй Федерацияһының дөйөм белем биреү ойошмаларында рус телен һәм әҙәбиәтен уҡытыу концепцияһы"ның ҡайһы бер пункттары буйынса борсолоу белдереүе урынлы, - тине Рөстәм Рифат улы. - Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Әмир Ишмөғоловтан да ошо мәсьәлә буйынса позициябыҙҙы белдереүебеҙҙе һораған мөрәжәғәт килде. Концепцияны әҙерләү буйынса эш төркөмө етәксеһе, РФ Дәүләт Думаһы Рәйесе Сергей Нарышкиндың да субъекттар властарынан һәм йәмәғәтселек вәкилдәренән туған телдәрҙе уҡытыу мәсьәләһе буйынса хәүеф белдереп яҙылған бик күп хаттар алыуы мәғлүм.

Концепциялағы Эксперттар төркөмө тарафынан әҙерләнгән һәм туған телдәргә ҡағылған пункттар бер нисек тә ҡабул ителә алмаясағын барыбыҙ ҙа аңлайбыҙ, сөнки улар төрлө милләт халыҡтарының туған телен һаҡлау, өйрәнеү һәм үҫтереү өсөн шарттар тыуҙырыуға булған конституцион хоҡуғына ҡаршы килә. Мәктәп предметы булараҡ уҡытылырға тейешле телде һайлау - граждандарҙың һәм белем биреү ойошмаларының ихтыярында.

Әлбиттә, яуаплы Комиссия был пункттарҙы Концепцияның яңы редакцияһына индермәне. Йәғни, милли республикаларҙа резонанс тыуҙырған пункттар әле әҙерләнгән документта юҡ. Бындай етди документ комплекслы һәм киң ҡараш талап итә икәнен аңларға кәрәк. Шуға ла Концепция проектына һуңынан эксперттар үҙҙәре лә, йәмәғәтселек һәм закон сығарыусылар тарафынан да бик күп үҙгәрештәр индерелде. Ә беҙ, Рәсәй Федерацияһы халыҡтары вәкилдәре, туған телдәр мәнфәғәтенә ҡағылған пункттарға битараф ҡала алмайбыҙ. Шәхсән үҙемә лә документтың Конституцияға ҡаршы килмәүен күҙәтеү мөһим.

*✓ Прицелды объекттың ҡолаҡ тәңгәленә төбәп күреккә баҫты. Тауыштынһыҙ сығып осҡан пуля шул мәлендә тәғәйенләнгәндең ярты башын алып китеп, янындағы кәләштең аҡ күлдәгенә ҡыҙыл буяҡ һирпте.*






* * *

Аңлайышһыҙ һөйләшеүҙең осраҡлы шаһиты булғандан һуң, Булат, бик оҙаҡ уйланып йөрөгәс, эске тойомлауҙарына ҡолаҡ һалып, шулай ҙа ниндәй генә хәлдәргә лә әҙер торорлоҡ план төҙөп алырға булды. Уға хәҙер йәки барыһын да онотorға, йәки бөтөн был ҡатмарлы мәсьәләне асыҡлағансы тикшеренергә тура киләсәк. Иң башта ҡалаға сығып килергә кәрәк. Ул Палычтың ҡайтыу-ҡайтмауын белергә тейеш. Әгәр ҙә ул ҡайтһа - барыһы ла улай уҡ ҡурҡыныс түгел. Ә инде ҡайтмаһа... ни эшләр?

Сығыу юлы булмағандай сетерекле хәлдәрҙә хәл итеү, эҙмә-эҙлекле уйлай һәм эш итә белеүгә өйрәткәйнеләр түгелме һуң уларҙы армияла. Объектты билдәләү, уны күҙәтеү, ғәҙәттәрен, шөғөлдәрен, көндәлек эштәрен ятлап алыу... Унан юҡ итеү. Снайпер булғайны. Икенсе Чечен һуғышында.

Баш ҡала хәрби комиссариатында уҡ уларҙы төркөмдән айырып алдылар. Башта тағы ла бер ҡат сәләмәтлектәрен тикшерҙеләр, психологтар ҡат-ҡат һөйләште, әллә ниндәй һүрәттәр төшөртөп, һорауҙарға яуап бирҙертеп йөҙәттеләр. Унан дүртәүһе төшөп ҡалып, алтау ҡалдылар. Шунан был тағы ла бәләкәсләнә төшкән төркөмдө Сочи ҡалаһына оҙаттылар. Унда килеп төшкәс, шундай уҡ төрлө тарафтарҙан йыйып алып килгән башҡалар менән ҡушып казармаларға урынлаштырҙылар.

Аңлатыуҙарынса, эттәр менән эш итергә тейеш ине был егеттәр. Тик тәүге ике айҙа әле эттәрҙең ҡойроғон да күрһәткән кеше булманы. Таңдан тороп йүгереп, ашап алғандан һуң эштәре прицеллы винтовканы өйрәнеү булды. Уны яһау, ҡороу, таҙалау. Унан атыу күнекмәләренә керештеләр. Быныһы оҡшаны егеттәргә. Күптәр былай ҙа атыу буйынса спорт мәктәптәрендә шөғөлләнеп, Булат кеүектәр һунарсылыҡ менән таныш булып килгән. Һәр хәлдә сәпкә атыу береһенә лә яңылыҡ түгел.

Тик быға белгәндәре әле өйрәнгәндең бер кескәй генә өлөшө лә түгел икән дә. Иң башта һунар итәһеңдең ғәҙәттәрен, көн дә эшләр эштәрен хәрәкәттәренә ҡәҙәр күҙәтергә, белергә тейешһең икән. Унан һунар итеү урынын табыу, унда урынлашыу, йәшеренеү төрҙәрен һайлау, көтөү. Көткән саҡта йоҡлап, онотолоп китмәү өсөн хатта ниндәй уйҙар уйларға мөмкинлекте лә ентекләп тикшерҙеләр, башҡарып ҡаранылар.

Алты ай шөғөлләнеүҙәрҙең һуңғы аҙнаһында эттәр килтерелеп, һәр береһенә таратып бирелде лә, төп хеҙмәт урынына күсерелделәр. Уйынсыҡтары булғанға ҡыуанышып та өлгөрмәнеләр, Грозный ҡалаһына килеп төшкәс тә улары йыйып алынды.

- Иптәш командир, беҙҙең эттәрҙе тартып алалар! - тип һөрәнләп йүгерешеп килде бер ни аңламаған егеттәр штаб янына.

Командир, утыҙ биш менән ҡырҡ араһындағы оло сырайлы ерән әҙәм, нимәлер ашауҙан майланған ауыҙын һөртә-һөртә килеп сыҡты ла, ҡайышы буйлап ҡулдарын йөрөтөп алғас, ялтыр итекле аяҡтарын кирә баҫып, ҡаршыһында геүләгән төркөмгә ҡәнәғәт булып ҡарап торҙо.

- Иптәш командир, - тип ялынды йәштәр, - ни өсөн?

- Ә шуға, - был кешегә яңы килеүселәрҙең аптыраныуы оҡшай ине, ахыры.

- Нисек инде? Нисек аңларға?

- Сөнки һеҙ кинологтар түгел.

- Ә кем? Кем һуң беҙ?

- Бына нимә, һөтимәрҙәр! - Командирҙың тауышын күтәрә төштө, әйтерһең, тыңлаусыларына нығыраҡ тәьҫир итергә теләне, - Һеҙ бөгөндән - снайперҙар! Ошо минуттан иң яҡын дуҫығыҙ - винтовка, иң яман дошманығыҙ - сәптәге объект!

Эттәр араһында көн итте шулай ҙа егеттәр. Быныһы ҡаршы яҡтың күҙен бәйләү өсөн эшләнде. Заданиела булмағандарға эттәр менән уйнарға ла, шөғөлләнергә лә рөхсәт бирелде.

Күпмелер ваҡыттан Булат менән Ертай исемле ҡаҙаҡ егетенә задание бәхете эләкте. Ысын эш көтөп зарыҡҡан, ниндәйҙер батырлыҡ ҡылыуға атлыҡҡан егеттәр көтә-көтә көтөк булғайны инде. Шунлыҡтан һикереп төштөләр. Бурыстары ҡайҙандыр сит илдән килә торған ҡунаҡтарҙы ҡаршы алып, шуларҙың араһынан фотола күрһәтелгәнен юҡ итеү булды. Бик оҙаҡ текләне фотоға егеттәр. Хатта ул кешене әллә күпме халыҡ араһында ла танырлыҡ хәлгә еттеләр. Мәғлүмәт биреүсе объекттың елкәһен һыйпау ғәҙәте барлығын, уң күҙенә аҡ төшкән булыуын, шунлыҡтан һөйләшкәндә һул яғы менәнерәк боролоп тороуын, оҫта ата һәм бысаҡ һелтәй белеүен еткерҙе. Бойороҡ буйынса башта Булат ата, Ертай, кәрәк булғанда, уның хатаһын төҙәтә.

Был халыҡ оло ҡунаҡтарҙы мотлаҡ ҡала ситендә үк ҡаршы алырға яратыуын иҫәпкә алып, снайперҙарҙы шлагбаум тәңгәле ер-һыуын байҡаттылар. Урынды, тәүге тапҡыр булғас, өйрәтеүсе ярҙамында һайланылар. Булат ҡаршылағы ҡаяташ араһына ҡыҫылып инеп ултырһа, пары икенсе яҡтан ағас башын оя итте. Шунда өс көн күҙ талдырҙылар. Дүртенсе көн тигәндә ҡала яғынан килеп туҡтаған өс джиптан сығып һибелгән ирегеттәр эргә-тирәне байҡап сыҡты, биноклдән күҙәтте. Тын алырға ла ҡурҡып, һалҡын таш эсенә һеңерҙәй булып һылашты Булат. "Тапһалар" тигән ҡот осҡос уйҙан иҫен юйыр хәлгә етте, шыбыр тиргә төштө, сығып йүгереү теләгән нисек баҫырға белмәй, ирендәрен сәйнәне. Тамағына ағып төшкән йылы ҡан тәме былай ҙа ҡайнаған аңын тамам томалағандай итте.

Бына ҡаршы яҡтан ике машина пәйҙә булды. Көтөүселәр юл ситенә теҙелеп баҫып күренеште сикләне. Килеүселәр етер-етмәҫ туҡтап, берәүһенең сығып ишек асҡанын көттө. Һәр сығыусыны күҙлек аша ентекле күҙәтте Булат. Уға кәрәклеһе икенсе машинаның артҡы ишегенән пәйҙә булды. Фотолағыса оло сәлләлә, оҙон халатта. Уны шундуҡ уратып торҙолар. Снайпер прицелда йылпылдауҙы баштар араһынан үҙенекен тоторға, ысҡындырмаҫҡа тырышты. Ҡаршы алыусылар менән күрешкән һайын елкәһен һыпырҙы ҡунаҡ, башын уң яҡҡа ҡырыныраҡ тотто.

Сәпте эләктерә алмай арманһыҙ булды Булат, йә уны һаҡсылары ышыҡланы, йә тура килгәндә өлгөрә алманы. Шулай мыштырлай торғас, тегеләр ҡапыл-ҡапыл йыйынышып машиналарына ултырҙы ла ҡуҙғалып китте. Илай яҙып ҡарап торҙо ла ҡалды снайпер. Хәҙер, хәҙер яйы сығыр тип көткәйне, ул яй булманы ла ҡуйҙы.

Ҡайтҡас, икеһен дә барыһы алдына баҫтырып ҡуйып, биш ҡатлы итеп һүкте офицер. Киҫерелгәндән һаман ҡалтыранып торған егеттәр винтовкаларын һығып ҡосаҡлап ҡатып тороуҙан башҡаға эшкинмәне.

- Ҡурҡаҡтар! Һеҙ - ҡурҡаҡтар! - тине офицер маңлайҙарына бармағын төртөп, - Етлекмәгәндәр! Һеҙҙе бушҡа ашатабыҙ!

Ҡоралдарын тапшырғас, инструктор снайперҙарҙың хатаһын асыҡлау өсөн тикшереү эшен башланы, һәр хәрәкәтте, һәр күргәнде һүрәтләп һөйләп сыҡтылар. Һығымтала икеһе лә булған мөмкинлеген ҡуллана алмаған, ҡурҡҡан йә мыштырлаған булып сыҡты.

Киске аштан һуң янына Ертай килде. Борсолоуҙан йөҙө һурылып киткән байғоштоң.

- Ҡарале, Булат, мин бүрәнең күҙенә генә атып ала ла ҡуя торғайным. Хатта уҡ менән әллә ҡайҙағы бөркөткә тигеҙгәнем бар, - тигән булды үҙе бер аҙ шым ултырғас.

- Бүре менән бөркөт кеше түгел инде, - Булаттың һаман был хаҡта тылҡырға теләге юҡ.

- Ысын икән. Ышанаһыңмы, бына, ата алманым да ҡуйҙым. Үҙемсә "был дошман" тип уйлап та ҡарайым - юҡ - булмай.

- Әллә эт өйрәтергә генә күсәйек тә ҡуяйыҡмы? - был уй әле генә башына килде Булаттың.

- Кем күсерә унда һине! Тағы ошондай хәл булһа, былай ҙа мәсхәрә менән берәй яҡҡа оҙатырҙар инде, - Ертай яҙмышына күнгән хәлдә башын һәлендереп китеп барҙы.

Икенсе заданиеға ярты йыл алдараҡ хеҙмәт башлаған Виталий менән күрше ҡалаға алып барып ҡалдырҙылар. Тәжрибәле снайпер уны үҙәк майҙан ситендәге ярым емерек йорт ҡыйығына урынлаштырҙы ла, үҙе икенсе яҡта ышыҡ тапты. Был юлы оҙаҡ көтмәнеләр. Майҙан эргәһендәге ихатаның ҡапҡалары ике яҡҡа шар асылып китте лә, халыҡ ағылып сыға башланы. Туй бара. Уртала егет менән ҡыҙ, уларҙы уратып осоп-ҡунып бейешәләр, шарт та шорт килтереп һауаға аталар, дәррәү сәпәкәйләйҙәр.

Булат "күҙ"ен етеҙ шылдырып хәтеренә һеңдергән һаҡалтайҙы эҙләй. Был түгел, был түгел, эх, эттәһе, быларҙың ни барыһы ла тигәндәй һаҡалтай. Туҡта-туҡта, әһә, бына уға кәрәге. Йәштәрҙе ҡосаҡлап-ҡосаҡлап ҡотлай, күрәһең. Яйлап сәпкә индереп алды уны снайпер. Хәҙер ысҡындырмаҫҡа, уңайлы мәлен генә тоторға кәрәк. Хата китһә төҙәтеп булмаясаҡ. Һаҡалтай кәләштең ҡулдарын тотоп һаман да нимәлер һөйләй, тегеһе баш һелкә-һелкә ризалашып тора. Ҡыҙы микән әллә, һуңғы өгөт-нәсихәтен бирәлер. Ошондай уйҙан бөтөнләй ҡыйын булып китте Булатҡа. Тамағына ҡаты төйөр килеп тығылды, көсөргәнештән тубыҡтары ҡалтырай башланы. Хәҙер ҡулдарына ла төшөр һәм бынан шылыуҙан башҡа юл ҡалмаясаҡ. Викторға ышаныр ине, уныһы был операцияла ҡаплаусы ғына. Тағы ла килеп сыҡмаһа, ояты ни тора. Бер генә секундҡа күҙҙәрен сытырлатып йомоп асты ла, прицелды объекттың ҡолаҡ тәңгәленә төбәп күреккә баҫты. Тауыш-тынһыҙ сығып осҡан пуля шул мәлендә тәғәйенләнгәндең ярты башын алып китеп, янындағы кәләштең аҡ күлдәгенә ҡыҙыл буяҡ һирпте. Ҡапыл шау-шыу ҡупты, бер-береһен тапап йүгерештеләр, сыр-сыу ҡысҡырыштылар, этә-төртөшә ҡапҡа эсенә йомолдолар. Бөтөн был мәшхәрҙе һаман прицелдан күҙәтеп, шаңҡып тик ултырҙы Булат. Күпме дауам итер ине икән был хәл, шул мәл Виктор килеп елтерәтмәһә. Ул иптәшенең винтовкаһын тартып алып, үҙен терһәгенән тотоп алға өҫтөрәне.

- Һин нимә, алйот, хәҙер килеп баҫасаҡтар! Үлемеңде көтөп ултыраһыңмы?! Әйҙә ҡыбырла! Шәберәк!

Ике күләгә таш ҡоймалар, емерек йорттар араһынан ҡаса-боҫа ҡала ситенә елдерҙе. Урамдарҙы сығып бөтөп, йылға буйындағы үҙәктә йәшерелгән машинаға ҡәҙәр саптылар. Килеп еткәс, Виктор яҙа-йоҙа бит-ҡулын сайҙы ла маскировкаһын сисеп ябай хәрби формаһын кейҙе һәм һуңғы сабырлығын йыйып Булатты көтөп тора башланы. Дүрт аяҡлап йөрөп уҡшый, шуның араһында буҫлығып-буҫлығып илай ине тегеһе.

Заданиеға сыҡмаған саҡтарында, тренировкаларҙан буш ваҡыттарҙа ихатала үҙҙәре нимә теләй, шуның менән мәшғүл булды һалдаттар. Кеме йоҡо һимертә, кеме эт көсөктәрен уйната, кеме урындағы алыпһатарҙарҙан алған телефон, планшеттарға сумған. Урындағылар тигәндән, Булат яндағы ҡасабанан килеп йөрөүсе Абулхай исемле малай менән дуҫлашып алды. 12-13 йәштәрҙәге ҡаҡса ғына ҡарасман уларға һөт алып килеп һата. Башта офицерҙар уның килеп йөрөүен оҡшатмай ине, бер-ике ҡыуылып киткәндән һуң хәйләкәр үсмерҙең ҡуйынында ярты сүрәтендәге күстәнәстәр ҙә табыла башланы. Тора-бара уны күҙгә элеүсе булманы, күреп өйрәнделәр. Күптәр менән танышып, дуҫлашып алды. Уны хәҙер теләһә ҡайһы мәлдә ниндәй нөктәлә осратһалар ҙа аптырамаnылар. Етем бала икәнлеген, инәйендә тамаҡ хаҡы өсөн ошолай хеҙмәт итеүен дә белгәс, ҡул һелтәнеләр, күрәһең.

Һөтөн һатып бөткәс, Абулхай бушыраҡ күренгән һалдаттарҙан атырға өйрәтеүҙе һорап ҡаңғыртыр булды. Эйәреп йөрөп инәлеп аптыратты. Кемде ризалатмағанда ла Булатты күндерә ине ул. Егет малайҙың себешләп бөткән тарамыш бармаҡтарын ҡармап тотоп ҡорал менән булыштырып ҡаратты. Исмаһам, берәүҙең күңелен күтәрәм был үлем таяғы менән, тип уйланы үҙе сараһыҙҙан.

Ҡайһы саҡ улар һәүетемсә генә һөйләшеп тә ултырғыланы. Чечен малайы арыу уҡ русса ла һупалай. Белеме өс класс ҡына булһа ла аңы яҡшы үҫешкән, фекерҙәре ҡыйыу ине уның.

- Ни өсөн һин бында килдең? - тип һораны малай бер шулай сәпкә бысаҡ ташлап уйнағанда.

- Нисек нишләп, мин бит илгә хеҙмәт итәм, мин - һалдат, - тип аңлатты Булат.

- Һеҙҙең ил һалдаттары башҡалар илен онтап-емереп, кешеләрен үлтереп хеҙмәт итәме ни? - тип ныҡышты һаман Абулхай.

- Минең бер нәмәгеҙҙе лә емергәнем юҡ, берәүҙе лә.... - ары аҡлана алмай ине ул, аҡланыр һүҙ ҙә, дәлил дә тапманы.

**(Дауамы бар).**

✓ *Миңә лә бихисап осрашыуҙарҙа ҡатнашыу бәхете тейҙе. "Хәҙер халыҡ уҡымай бит", тигән һүҙҙең дөрөҫлөккә тап килеп етмәүенә шаһит булдым. Ололар әле лә китап уҡый. Йәштәр ҙә уҡый.*



ӘҘИП ҺҮҘЕ

# ЕР ШАРЫНЫҢ ҠОЯШЛЫ ЯҒЫНДА...

## әҙәбиәтте һөйгән кеше йәшәй



**Әҙәбиәт йылы тамамланды, әммә гәзитебеҙҙәге "Әҙип һүҙе" рубрикаһы дауам итә. Сираттағы ҡунағыбыҙ - Башҡортостандың халыҡ шағиры Фаҡиһа ТУҒЫҘБАЕВА. Әхлаҡ, тәрбиә, әҙәбиәтебеҙҙең бөгөнгө хәле менән бәйле мәсьәләләр буйынса мөрәжәғәт итеп, унан беҙ илһөйәр граждан, әсә һәм шағирә булараҡ йөкмәткеле фекерҙәрен ишеттек.**

### Ҡабаландыҡ түгелме?

Тәрән фекерле, аҡыл хазинабыҙ бай, саф, хыялға бирелеүсән халыҡ беҙ - башҡорттар. Әммә беҙгә үлсәп эш итеү, һығылмалыҡ етешмәй. Милләтебеҙгә хас булмаған башҡа ҡайһы бер кире ҡылыҡтарҙы ла үҙләштереп алдыҡ. Быға кем гәйепле? Бәлки, донъя, заман беҙҙе ошондай хәлгә ҡуялыр? Бында ҡырағай капитализм йоғонтоһо тәҫмөрләнә. Беҙҙең быуын социализмды ла күрҙе. Ул ҡоролоштоң да ыңғай яҡтары күп ине. Мин үҙемдең партия ойошмаһы сәркәтибе булыуымды бер ҙә оялмайынса әйтә алам. Әсәйем ҡарамағында атайһыҙ буй еткерҙем, әммә үҙемде етем итеп тойманым - дәүләт ҡурсыуын тойоп үҫтем. Ауылдан ҡалаға уҡырға сығып киткәнемдә бер тоҡсай китаптарым, бер ҡулдағем һәм бер пар ҡатам ғына бар ине. Бер ниндәй ярҙамһыҙ, ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡһыҙ, үҙемдең белемем менән юғары уҡыу йортона уҡырға инә алдым. Ижадҡа, әҙәбиәткә һөйөүем шиғриәткә ылыҡтырҙы - шуның менән бик бәхетлемен.

Ваҡыт үтә, техник үҫеш алға бара, тик етем балалар бөгөн дә бик күп шул, үкенескә ҡаршы. Балалар йорттарында әсәйле, атайлы көйө яҙмыш ҡосағына ырғытылғандар туп-тулы. Иң саф, иң таҙа әсә тигән кеше күңеленә лә әхлаҡһыҙлыҡ үтеп инә бара. Ҡатындарҙың үҙ сабыйҙарының ғүмерен өҙөүенә бөтөнләй аҡлау табып булмай. Былдай күренештәрҙең барыһы ла сит идеология йоғонтоһонда баш ҡалҡытты. Зәңгәр экрандарҙан бер туҡтауһыҙ үлтереш, ҡыйралыш, бәйелһеҙлек күренештәре ағылғанға күрә лә, аңыбыҙға йыртҡыстарса ғәҙәттәр ояланы. Минеңсә, телевизорҙан йөкмәткеһендә кеше үлтереү, кеше туҡмау күренештәре булған нәфис фильмдар күрһәтеүҙе бөтөнләй тыйырға ваҡыт.

Капитализмға Ҡытай һымаҡ яйлап ҡына күсеү яҡшыраҡ булыр ине. Социализмдың, коммунистар партияһы идеологияһының иң яҡшы тәжрибәһен, аҡылын һаҡлап, уларҙы ҡулланыу илде бөгөнгө көрсөктән һаҡлар ине. Хәйер, былар барыһы АҠШ-тың махсус хеҙмәттәре тарафынан эҙмә-эҙлекле алып барылған күп йыллыҡ эш һөҙөмтәһе тигән фекер ҙә йөрөй. Булмаҫ, тимә! Бөйөк Ватан һуғышы тамамланғас, Аллен Даллес СССР-ҙы дәүләт булараҡ юҡҡа сығарыу маҡсатын алға һөргән доктрина (ғилми, сәйәси, фәлсәфәүи теория, система) тәҙөгәнлеге бөгөн күптәр өсөн яныҡлыҡ та түгел. Унда яҡынса былай тип яҙылған: "СССР-ҙы юҡҡа сығарыу өсөн совет йәштәре аңына аҙғынлыҡ һымаҡ түбән сифаттарҙы һеңдереү ҙә етә... "

### Ғаилә һәм хеҙмәт

Иң мөһим хазинабыҙ, ҡайғыртҡан хәстәребеҙ - ғаилә булһын ине. Әгәр ғаиләләр матур йәшәһә, атай-әсәй балаларына яҡшы тәрбиә бирһә, сит йоғонтонан ҡурҡмаҫ та инек. Әле күптән түгел БСТ каналында, "Сәләм"дә, Ғафури районының Имәндәш ауылында йәшәүсе иҫ киткес һоҡланғыс ғаиләне күрһәттеләр. 9 балалы был ғаиләнең 100-ләгән умартаһы, ҡураһында - 30-лаған баш эре малы бар. Әсә кеше һис тә төҫ ташламаған - ҡыҙҙар шикелле. Хужабикә әйтеүенсә, һәр баланың үҙенә йөкмәтелгән эше бар. Ошондай ғаиләләребеҙ күп булһа, улар барҙа - бирешмәсбеҙ әле. Иман барыбер өйҙән, ғаиләнән башлана. Мәктәптең дә тәрбиәүи әһәмиәте ҙур, шулай ҙа иман атай йортонда һалына. Мәктәп хәҙер бары тик белем биреү урынына ғына әйләнде. Уны ла замана афәттәре йөҙәтә. Ҡыҫҡартылыу ҡурҡыныcы янаған ваҡытта мәктәпте балалар тәрбиә сығанағы итеп ҡабул итә аламмы? Ошо һорауға үҙебеҙ яуап табып ҡарайыҡ. Үҙ ауылындағы мәктәп ябылғанға күрә, башланғыс синыф уҡыусыһы автобуста 20-30 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан күрше ауыл мәктәбенә уҡырға йөрөй башланы, ти. Башланғыс синыфтарҙың, урта класстарҙың дәрестәре өлкән кластарҙың дәрестәренән күпкә алдараҡ тамамлана. Автобус уҡыусыларҙы көнөнә бер генә таптҡыр ташығанға күрә, башланғыс синыфтар менән урта синыфтар өлкән синыфтарҙың дәрестәре бөткәнен көтөргә мәжбүр. Ә былдай шарттарға ҡуйылған бала, иртәме - һуңмы, мәктәптән ялҡа, әлбиттә.

Беҙҙең быуын да мәктәптән ҡайтып инмәне, төрлө түңәрәктәрҙә шөғөлләнде. Ләкин беҙ дәрестәрҙән һуң өйгә ҡайтып, ашап-эсеп, мәктәпкә яңынан бара ала инек. Беҙҙә әҙәбиәт түңәрәге эшләне. Шунда шөғөлләнеп, шағриәткә ғашиҡ булдым. Спорт, ҡул эштәре түңәрәктәре лә булды. Мин, мәҫәлән, артһыҙ ултырғыс эшләй беләм. Хеҙмәт тәрбиәһе был. Ғаиләләге тәрбиә тураһында әйткәндә, тәү сиратта, хеҙмәттең иң ҙур тәрбиә булыуын күҙ уңында тотам. Хеҙмәт кешене боҙолоуҙан һаҡлай. Әхлаҡи тәрбиә хеҙмәт тәрбиәһенән килә. Һин былай эшлә, һин тегеләй эшлә, тип, аҡыл һатыуға ҡарағанда, баланы үҙенә эйәртеп эшләтеүҙән файҙалыраҡ нәмә юҡ ул. Беҙ әсәйҙәр менән бесәнен дә саптыҡ, утынын да алып ҡайттыҡ. Туғандарына ярҙамлашып, уларға мәрхәмәтле булып үҫкән бала сит кешегә лә шәфҡәтле була.

### Әҙәбиәт йылыһы

Әҙәбиәт йылында үҙенсә күренеш булырлыҡ матур сараларҙан ниҙәрҙе һанар инегеҙ, тигән һорау ҡуйылһа, мин былай тип яуап бирер инем. Әҙәбиәтебеҙҙең рупоры - "Ағиҙел" журналы был юлы ла әҙәби процессты асыҡ сағылдырыуы менән айырылып торҙо. Әҙәбиәт йылы Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығы менән тап килгәнгә күрәләр, әҙәби журналыбыҙ быйыл төп иғтибарын һуғыш темаһына яҙылған әҫәрҙәргә бүлде. Ябай һалдаттың фронттағы уй-кисерештәренән башлап, һуғыш ветеранының аяуһыҙ тормош ысынбарлығы менән күҙмә-күҙ осрашыуына тиклем сағылдырған психологик әҫәрҙәр илебеҙ тарихының яңы биттәрен асты. Тәрбиәүи әһәмиәткә эйә был әҫәрҙәрҙе йәш быуын мотлаҡ уҡып сығырға тейеш. Әҙәбиәт - кешенең күңелен, рухын, батырлығын иң тулы сағылдыра торған жанр. Был йәһәттән башҡорт әҙәбиәте лә яулаған үрҙәре менән хаҡлы рәүештә ғорурлана ала. Ул һәр ваҡыт кешене бейеклеккә, яҡтылыҡҡа әйҙәне. Әҙәбиәтебеҙ классигы Мостай Кәримдең шундай һүҙҙәре бар: "Әҙәбиәтте, шиғриәтте һөйгән кеше - ер шарының ҡояшлы яғында йәшәй"... Ысынлап та, халҡыбыҙ ер шарының ҡояшлы яғында йәшәһен өсөн яҙыусылар берлеге ғәйәт күп көс һалды, минеңсә. Рәсәйҙә беренселәрҙән булып райондарҙа "Әҙәби нағыш" марафоны үткәрелде. Йәштәрҙең ҡульяҙмаларын тикшереп, йәш шағирҙарҙы, йәш яҙыусыларҙы табыу маҡсатынан ошондай осрашыуҙар бөтә райондарҙа ла үтеп бөттө тиерлек. Иң яҡшы әҫәрҙәр альманах булып донъя күрәсәк. Халыҡтың яҙыусы менән осрашыуы үҙе үк тәрбиә ысулы.

Миңә лә бихисап осрашыуҙарҙа ҡатнашыу бәхете тейҙе. "Хәҙер халыҡ уҡымай бит", тигән һүҙҙең дөрөҫлөккә тап килеп етмәүенә шаһит булдым. Ололар әле лә китап уҡый. Йәштәр ҙә уҡый. Тик улар китапты китапхананан яҙҙырып алып түгел, ә интернеттан уҡый. Йәштәр менән аралашып, мин шуға иғтибар итем: күптәр компьютерға, китапҡа теклəп ултырыуҙан ялҡып, китаптарҙы аудио форматта тыңлауға өҫтөнлөк бирә. Был дөрөҫ тә, сөнки хәҙер йәш кешенең бер урында ултырып китап уҡырға ваҡыты ла юҡ. Аудио-китапты башҡа берәй эш эшләгәндә лә тыңлап була.

Совет осоронда Яҙыусылар союзында пропаганда бюроһы бар ине. Шул бюро һәр аҙна китап уҡыусылар менән осрашыуҙар ойоштора ине. Хәҙер халыҡ менән бушлай осрашыуға барған берҙәнбер ижад кешеһе - яҙыусы. Былдай мөмкинлектәр йышыраҡ булһын ине, тип әйтмәксемен.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

АҠЫЛЛЫҒА - ИШАРА

# КЕМ НИМӘГӘ БАЙ...

## шуның менән бүлешә



**Бер танышым шылтыратып хәл белешкән һайын яңы күршеһенә зарланды. Йә уға күршеләрҙең бесәйен подъезға сығарыуы оҡшамаһы, йә балалары артыҡ шаян кеүек тойолдо - тапты инде сәбәбен. Тиҙҙән был ике күрше араһында ысын мәғәнәһендә көрәш башланды, эш хатта полицияға барып етте. Әммә бер-береһен күрә алмаған ике кешегә башҡа кешеләр нисек ярҙам итһен инде? Бер-береһенә иғтибар итмәҫкә, күрмәҫкә, өндәшмәҫкә, һөйләшергә тура килгәндә әҙәпле булырға, бер-береһен кәмһетмәҫкә күрһәтмә биргәндәр ҙә, ҡайтарып ебәргәндәр.**

Былар шулай итәләр ҙә. Подъезд янындағы эскәмйәлә береһе ултырһа, икенсеһе сыҡмаҫҡа тырыша. Сүп түгеү машинаһы килгәндә лә, бер-береһе менән осрашмаҫ өсөн, береһе сыҡҡанда икенсеһе сүбен түкмәй өйҙә ҡалыуҙы хуп күрә. Элеккесә, күҙгә-күҙ ҡарашып әрләшмәһәләр ҙә, бер-береһенә янамаһалар ҙа, былар араһында эске көрәш, күрә алмаусанлыҡ дауам итте.

Бер уйлаһаң, дошманлашыуға артыҡ сәбәп тә юҡ һымаҡ. Подъезға бесәйен бер уның ғына күршеһе сығармай, шаулаған күршеләр ҙә бер улар ғына түгелдер. Бәләкәй балаларға килгәндә, хәҙер уларҙың бөтәһе лә гиперактив, береһенән тыйып өлгөрмәйһең, икенсе эш боҙоп та ҡуя. Тик танышым нилектәндер тап ошо күршеләренә ҡаныҡты ла ҡуйҙы. Тегеһе лә ҡуймай, бөтә бәләләрендә минең танышты ғәйепләй. Һыуытҡысы боҙолһа ла, һыу краны эшләмәһә лә, күҙе тейә, тип, өйҙәгеләрен хатта танышымдың ишегенә әйләнеп ҡарарға ла тыйып ҡуйған икән. Бер-береһенә көнләшеп, ғауға ҡуптаралар, тиер инең, икеһе ике быуын кешеһе. Асыҡлабыраҡ әйткәндә, танышым оло йәштә, күптән хаҡлы ялда, икенсеһе - бер-бер артлы ике ул табып, яңы декрет отпускыһынан эшкә сыҡҡан яңғыҙ йәш ҡатын. Бүлешер, уртаҡлашыр әйберҙәре лә юҡ һымаҡ. Тик береһе мин - йәшмен, икенсеһе оломон тип, ошо "иғлан ителмәгән һуғыш"ты беренсе булып туҡтатырға ашыҡманы.

Берҙән-бер көндө йәш ҡатын иртән эшкә киткәндә ишек төбөндә ятҡан сүп-сарҙы күреп, сығырынан-сыға. Күршеһенең алҡымынан алырға уйлап, ишеген шаҡый, әммә, әмәлгә ҡалғандай, был көндө танышым баларында ҡунырға ҡалған була. Теге ҡатын күп уйлап тормай, һепертке алып сыға ла, сүпте күршеһенең ишеге төбөнә өйөп ҡуя. Боҙомға, сихырға, күҙ тейеүгә ышанған, уныһынан да бигерәк уларҙан ныҡ ҡурҡҡан танышым быны күреп, саҡ ауырыуға һабышмай. Бер-ике көн бикләнеп ятҡандан һуң, теге сүпте ҡағыҙға урап, сихырын ҡайтарам тип, ноҡотмо-кәртме һалған кешегә барған. Тегеһе уға бик матур кәңәш биргән:

- Кем нимәгә бай, шуның менән бүлешә инде. Ҡыйы күп булған кеше - ҡыйы, асыуы күп булған - асыуы менән бүлешә, яуыз яуызлығы менән уртаҡлаша. Был сүпте уға кире һалырға уйлаһаң, икенсе көнөнә ул тағы ла артығыраҡ һинең ишек төбөндә ятасаҡ тип уйламайһыңмы? Алып килгән ҡый-ғыпырыңды хәҙер үк сүп һауытына ташла ла, магазиндан ҡайтҡанда күршеңдең ике улына ике тәмлекәс ал. Артабан нимә булырын үҙең күрерһең, - тип, ҡайтарып ебәргән.

Танышым ҡағыҙға төрөлгән сүпте ташлап, юл ыңғайы ике шоколад ала. Был кәнфитте балаларға нисек бирермен икән, тип уйлап ул өлгөрмәй, подъезд алдындағы эскәмйәлә ике улы менән күршеһе ултыра. Элекке һымаҡ уларҙы күрмәҫ өсөн инер ерҙән инмәй урап китә торған танышым туп-тура тегеләр янына бара һәм балаларға берәр шоколад тоттора...

Шул көндән алып был ике күрше араһында йылылыҡ барлыҡҡа килә. Улай ғына ла түгел, улар дуҫлашып китә. Йәш ҡатын балалар баҡсаһына барырға өлгөрмәгәндә танышым ярҙам итә, ял көнөндә балаларҙы ҡарап торорға ла баш тартмай. Тиҙҙән улар яҡын дуҫтарға әйләнде.

Ваҡытында дөрөҫ кәңәш биргән кешеләр булыуы ҡайһылай яҡшы. Күберәк булһын ине шундайҙар...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

✔ *Быуа уртаһына өй төҙөйҙәр: ағасты кимереп йығалар, тейешле оҙонлоҡта бүрәнәләргә турайҙар һәм кәрәк урынға алып баралар. Йыуан бүрәнәләрҙән ҡыуыш төҙөп, ярыҡтарына мүк тултырып, тыштан балсыҡ менән һылап ҡуялар.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ТЕЛЕФОНДЫ...
## кесәндә йөртмә

■ Австралияның диетологтар ассоциацияһы ғалимдары ҡәһүә яратыусыларға тағы ла яҡшы яңылыҡ еткерә. Ҡәһүәне күп эсеү йөрәккә зыянлы тип иҫәпләүселәр яңылыша, тиҙәр улар, шулай ҙа сама белеү ҙә кәрәк. "Был ни тиклем ҡыҙыҡ күренмәһен, ҡапыл үлеү коэффициенты ҡәһүәне даими ҡулланыусылар араһында иң түбәне. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, көнөнә 1-2 сынаяҡ ҡәһүә эсеүселәр үҙҙәренә оҙайлы һәм бәхетле ғүмер йәшәү мөмкинлеге бирә", - ти профессор Клэр Коллинз. Етмәһә, сифатлы ҡәһүәлә бауырҙы зарарлы токсиндарҙан һаҡлаусы элементтар бар, тимәк, бауыр яман шешен булдырмай был эсемлек. Тик ҡәһүәнең файҙаһы булһын өсөн уны һөтһөҙ, шәкәрһеҙ эсергә кәрәк.

■ Хәҙерге заман кешеләре смартфонға ныҡ бәйле, улар был замана техникаһын бер минутҡа ла ҡалдырмай. Был сәләмәтлек өсөн ҙур зыян килтерә, ти ғалимдар. Телефон иң тәүҙә зарарлы нурҙар таратыуы менән насар. Доктор Деврa Дэвис телефонды кесәлә йөрөтөргә кәңәш итмәй. Юғиһә, телефон нур терапияһына тиң, ти улар. Табиптар телефондан бүленгән күләмдәге нурҙарҙы бауыр яман шешен дауалау, баш мейеһендә дарыуҙарҙың үҙләштерелеүенә булышлыҡ итеү өсөн ҡуллана. Эксперт һүҙҙәренә ҡарағанда, телефон депрессияға, диабетҡа килтерә ала, йөрәк эшмәкәрлеген боҙа. Шуға ла телефонды сумкала йөрөтөргә кәрәк.

■ Кем йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре менән яфалана, уларҙа депрессия ла күҙәтелеүе ихтимал, ти Эмори университеты ғалимдары. Йөрәк өйәнәге менән дауаханаға эләккәндәрҙең 20 процентында был замана сире күҙәтелә икән. Шуға ла белгестәр депрессия менән яфаланыусыларға спорт менән шөғөлләнергә кәңәш бирә. Сөнки әүҙем тормош алып бармағандар йышыраҡ күңел төшөнкөлөгөнә бирелә.

■ Эшкә бар күңелең менән бирелеү шәхси тормошҡа насар йоғонто яһай, тип уйлаусылар хаталана. Швейцария тикшеренеүселәре Швейцарияла һәм Германияла йәшәгән 285 ғаилә парын тикшергән һәм быныҡ дөрөҫ түгеллеген дәлилләгән. Ғалимдар билдәләүенсә, кем күп эшләй, улар буш ваҡыттарын ғаиләһенә арнай. Шуға ла бындай ғаиләләрҙә ир менән ҡатын бер-береһенән ҡәнәғәт була. Женева университетында үткәрелгән һынауҙар күрһәтеүенсә, ғаилә мөнәсәбәттәрендәге көсөргәнеш бала тыуғас барлыҡҡа килә. Кемдеңдер ауырып китеүе мөнәсәбәттәргә бер ниндәй ҙә йоғонто яһамай. Ғалимдар билдәләүенсә, хаҡлы ялға сығыу өлкәнәйгән ғаилә парҙарын тағы ла яҡынайта төшә.

■ Ҡатын-ҡыҙҙың балалары ни тиклем күберәк, улар шул тиклем яйыраҡ ҡартая. Күп балалы әсәйҙәрҙә хромосоманы һаҡлап тороусы оҙон теломерҙар күберәк була. Күҙәнәк бүленгән һайын, теломер ҡыҫҡара бара. Ә ҡыҫҡарған теломер хромосоманы яҡлай алмай һәм күҙәнәк эшләү һәләтен юғалтып, ҡартая. Саймон Фрейзер университеты профессорҙары билдәләүенсә, һәр бала тапҡан һайын теломерҙар оҙоная. Ғалимдар быны эстроген гормоны менән бәйләй. Ҡатын кеше ауырлы саҡта был гормон кимәле юғары була. Ә эстроген - антиоксидант, ул теломерҙарҙы ҡыҫҡарыуҙан һаҡлай.

ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

# КЕСЕ ТУҒАНДАРЫБЫҘ...
## тәбиғәтте афәттән ҡотҡармаҡсымы?



Ҡондоҙҙар кеше һымаҡ...

Ҡама тураһында ваҡыт үтеү менән ниндәйҙер кимәлдә мәғлүмәт туплай алһам, ҡондоҙ тураһында китапты тик 90-сы йылдарҙа ғына осраттым. Был мин тапҡан берҙән-бер мәғлүмәт, унан яҡшыраҡ бүтән сығанаҡтар таба алманым. Хәҙерге заман кешеләре ҡондоҙ тураһында бер нәмә лә белмәй.

Тапҡан китабымдың исеме "Саджо и ее бобры" тип атала. Авторы америка индеецы Вэша Куоннезин - Һоро Өкө. Тәбиғәтте бөтә нескәлектәре менән белгән, уны бөтә күңеле менән яратҡан кеше була. Ҡондоҙҙар тормошон өйрәнеп, уларҙы Кесе Туғандар тип атай.

Иҫ киткес эш һөйөүсән йән эйәләрен яҡлау өсөн ошо китапты яҙа һәм уларға һүнәр итеүҙе бөтөнләй ташлай.

Ҡондоҙҙар тормошон ентекле күҙәтеп, яҙып бара. Китап кешеләрҙә ҡондоҙҙарға ҡарата һөйөү тойғоһо уятырға һәм һүнәр итеүҙе туҡтатырға йүнәлтелә. Тырышлыҡ бушҡа китмәй: Канада хөкүмәте ҡондоҙҙарҙы яҡлап закондар сығара һәм улар йәшәгән ерҙәрҙе ҡурсаулыҡ итә, унда йөрөү, ҡондоҙҙарҙы бимазалау тыйыла.

Һоро Өкө үҙ китабын тәбиғәт яратҡан бөтә кешеләргә һәм балаларға бағышлай. Бөтә урман йәнлектәре һәр ваҡыт хәрәкәттә. Уларға кешеләр кеүек үк, күп эшләргә тура килә: ашарға табырға, балаларҙы тәрбиәләп, аяҡҡа баҫтырырға кәрәк. Ҡырағай хайуандарҙың ҡайһылары яңғыҙ йәшәй, даими төйәге лә юҡ. Икенселәре күмәкләшеп көн итә, йорттар төҙөй. Улар араһында иң аҡыллылары ҡондоҙҙар: йылы өйҙәр төҙөй, быуалар ҡора, ҡышҡылыҡҡа аҙыҡ запасы туплай, кеше һымаҡ эшләйҙәр, ял иткәндә бер-береһенә нимәлер һөйләйҙәр. Уларҙың аҡылына һәм эшһөйәрлегенә хайран ҡалырлыҡ. Хатта һөйләшеүҙәренә тиклем кешенекенә оҡшап ҡуя. Шуға индеецтар уларҙы нығ ихтирам итә һәм Кесе Туғандар тип йөрөтә.

Һоро Өкө китабындағы ҡондоҙҙар тау йылғаһын ағас сыбыҡтарынан ситән үреп быуа, тишектәренә мүк тултыра, балсыҡ менән һылай, нығ булһын өсөн өҫтөн эре таштар менән баҫтыра. Хатта артыҡ һыуҙы ағыҙыу өсөн уртанан уйпат ер ҡалдыра. Быуа уртаһындағы ҡалҡыу ергә ағастан өй төҙөйҙәр: ағасты кимереп йығалар, тейешле оҙонлоҡта бүрәнәләргә турайҙар һәм кәрәк урынға алып баралар. Йыуан бүрәнәләрҙән ҡыуыш төҙөп, ярыҡтарына мүк тултырып, тыштан балсыҡ менән һылап ҡуялар. Йылы өй шулай барлыҡҡа килә. Әҙер өй өҫтөнә арҡыс-торҡос итеп эре ағастар өйәләр. Диаметры - 3, бейеклеге 2 метр тирәһе, кәбәндә хәтерләткән ҙур өй хасил була. Был өйөмдөң ситтәре һыу эсенә батып тора: ҡоро ерҙән дә, һыу эсенән дә өйгә инерлек түгел. Йәй көнө өйҙө киң быуа һыуы йыртҡыстарҙан һаҡлай, ә ҡыш боҙ өҫтөнән килгән йыртҡыстар һыуға ҡуша туңған ағастарҙы бер нисек тә аҡтара алмай. Шулай ҡондоҙҙар һаҡланыу сараһын да күрә белә. Быуа йырылһа, уларға үлем килә. Сөнки улар йыртҡыс түгел, тыныс хеҙмәтте генә белә, үлән һәм ағас ҡайырыһы менән туҡланып көн итә.

Ҡондоҙҙоң өйөнә тик һыуҙан ғына, үҙҙәре генә белгән ерҙән инергә мөмкин. Ул - үҙҙәре һыйырлыҡ ҡына тар тоннель, өйҙөң ситенә килеп сыға. Тышҡа килеп сыҡҡан ерҙә, ҡыйыҡ һымаҡ булып, өй өҫтөнә өйөлгән бүрәнәләрҙең сите сығып тора, ҡапыл ғына табырлыҡ түгел. Запас юлдары ла була. Һыуҙан тоннель буйлап килеп сыҡҡан ҡондоҙ тәүҙә һыу һарҡыта торған майҙансыҡҡа баҫа. Шунда тиреһенең һыуын һарҡыта, йөнөн һыға, ҡорота, тарай. Оҙаҡ ҡына үҙен тәртипкә килтерә. Ҡороған йөнөн яҡшылап тарау өсөн уның махсус тырнағы ла бар. Тамам таҙарынғас ҡына өҫкәрәк күтәрелә: унда ҡоро хуш еҫле үлән түшәлгән майҙансыҡ. Шунда ял итәләр, йоҡлайҙар, балалары уйнай. Өй эсе шаҡтай ҙур, хатта эсенә оло кеше бөкләнеп һыя ала.

Аҙыҡ запасы ла өй эргәһендә генә, һыуҙа һал кеүек йөҙөп йөрөй, алыҫ китмәһен өсөн өй ситенә беркетелгән. Өҫтә-өҫтөнә өйөлгән ағас һыуға тәрән батып, һыу өҫтөндәгеһе саҡ ҡына күренеп тора. Шулай кәрәк тә: ағастар кипмәй, һәр ваҡыт яңы булып һаҡлана. Аҙыҡҡа сыҡҡан ҡондоҙ һал аҫтынан ағасты алып, тоннель буйлап өйгә индерә. Йылы өй эсендә рәхәтләнеп кимерәләр. Ҡайырыһы кимерелгән ағасты өйөм ситенә ҡуялар. Шулай, өйҙө ҡаплаған өйөм аҫтан да үҫә.

Ҡондоҙҙо нимәләр эшләп бөксәйеп ултырған кешегә оҡшаталар. Артҡы аяҡтары оҙон, бармаҡтары араһында ярыһы бар, йөҙөү өсөн бик уңайлы. Ялпаҡ ҡойроғо руль булараҡ хеҙмәт итә. Кәрәк саҡта шул үк ҡойроҡ өҫтөнә балаларын ултыртып һөйрәй. Алғы тәпейҙәре ҡыҫҡа, кеше ҡулына оҡшаған, хатта бармаҡтарына тиклем кешенекенә тартым. Шул ҡулдар менән ағастар, ташый, быуа төҙөй, өйөнә үлән, аҙыҡ килтерә, балаларын тәрбиәләй.

Һыуҙа бик йылғыр, шәп йөҙә. Уның ҡарауы, ҡорола насар йөрөй: алғы аяҡтары ҡыҫҡа булғас, йөрөүе уңайһыҙ. Шуға ла ҡондоҙҙо ҡорола йыртҡыс хайуан еңел генә тота ала. Шуға ла уның йән һаҡсыһы - быуа. Бөтә тормошо шул быуаға бәйле. Һәр ваҡыт күҙәтеп, тәрбиәләп, йүнәтеп торалар. Төп ҡоралы - өҫтән һәм аҫтан бөрәр пар бысаҡ кеүек үткер тештәре. Оҙон булып алғараҡ сығып тора, бер туҡтауһыҙ үҫәләр. Шуның өсөн бер туҡтауһыҙ кимерергә мәжбүрҙәр. Йыуан ағастарҙы ла тиҙ генә йыға алалар. Бик һаҡ хайуандар: көндөҙ ял итәләр, төнө буйы эшләйҙәр. Саҡ ҡына шикле тауыш ишетеү менән һыуға сумып юҡ була улар. Кәрәк мәлдә ошо үк тештәр менән дошманына ҡаршы үлемесле алышҡа сыға.

Ҡама ҡондоҙҙарҙың иң яуыз дошманы. Быуаларын йырып, һыуын ағыҙалар. Өлкән ҡондоҙҙар быуа менән булышҡан арала балаларын тотоп ашай. Балалары бик һөйкөмлө, матур була. Кеше балалары кеүек илайҙар. Улар иркен бүлмәлә рәхәтләнеп йәшәй, ата-әсәһенең һөйөүгә тулы тәрбиәһен ала, ҡондоҙ тормошона өйрәнә.

Тағы бер мөһим үҙенсәлек: өй эсендәге сума торған һыу кимәле дөйөм быуа кимәле менән бер үк. Быуа йырылып, һыу аҡһа, өй эсендәге һыу кимәле лә кәмей. Быуа именлеген шуға ҡарап беләләр. Һыу кәмей башлау менән тышҡа ташланалар, йырылған урынды табып, йүнәтергә тотоналар. Шулай итеп, ҡондоҙҙарҙың имен йәшәүенең төп шарты - быуа.

Бынан өс-дүрт йыл элек Күжә, Ҡамшаҡлы йылғаларында, быуа быуып, ҡондоҙҙар йәшәй башлауы ишетелгәйне. Даими белешеп торҙом, тик артыҡ бер нәмә лә әйтә алманылар. Күжә ҙур ғына йылға, ә Ҡамшаҡлы бик бәләкәй, тауыҡ кисмәле генә. Шул йылғала быуа быуылып, ҙур ғына һыу яткылығы хасил булыуын ишеткәс, хайран ҡалғайным. Йәнә шуныһы: барған кешеләр быуаны йырып ҡарай. Һыуы кәмегән быуаға ҡарап, ҡондоҙҙар кеше һымаҡ сенләп илай, ти. Береһе хәбәр тарата: йәнәһе лә, ҡондоҙҙо илатһаң, ҡарғышы төшә. Йән өшөткөс һыҡтаулы илау тауышы бер кемде лә битараф ҡалдырмайҙыр. Хәҙер быуа йырыу тураһында хәбәр ишетелгәне юҡ. Исемен дә белмәгән йәнлек менән халыҡтың танышлығы шулай башлана.

Өсөнсө йыл Шүлгән йылғаһына ҡондоҙҙар килгән, тигәнде ишетеп, бик ҡыуандым. Бесәнде тамамлағас, ҡатыным менән күрергә барҙыҡ. Ауылдан өс саҡрым тирәһе алыҫлыҡта Күсәй атамаһын йөрөткән ерҙә булып сыҡты ҡондоҙ быуаһы. Урынды ла һайлай белгәндәр. Йөҙ метр самаһы киңлектә ике тау араһы быуа менән кәртәле ине. Элек был ер шайтан ботон һындырырлыҡ, үтеп сыҡҡыһыҙ ҡуйы әрәмәлек ине: муйыл, ерек, тал дымлы һыу ситендә ҡүкрәп үҫте. Ҡомалаҡ менән сырмалған ағас араһынан үтермен тимә, элек ҡомалаҡҡа йөрөгәс, был ер яҡшы таныш.

Шүлгән йылғаһы йәй көнө бәләкәй генә булып, уң яҡ ситтәнерәк көнә йырҙа яһап аға. Һул яҡ тау ситендә ҡороған йырҙа, унан һыу яҙғы ташҡында ике тау араһын тултырып аға. Ике йырҙа уртаһындағы ҡалҡыулыҡ беленеп тора. Ләкин ҡайҙа ҡарама - ағас, ҡуйы әрәмә. Шул тиклем ағастарҙы ҡырҡып ситкә ташып, ер таҙартырға ҡайҙан көс тапҡандарҙыр? Күҙ алдына килтерегеҙ: текә генә битле ике тау араһы быуылған. Быуа аҫтында элекке шырлыҡ, ә өҫ яғы тап-таҙа, элек ағастар үҫкән ерҙә йәйрәп һыу ята. Ундабында ғына серек ҡайын төпһәләре һерәйеп ултыра. Файҙаһы булмағас, серек ағасҡа теймәгәндәр. Һыу үренә лә йөҙ метр самаһы күҙгә кеүек һыу ялтырай. Яткылыҡ уртаһында, әлләҡайҙан күренеп, ҡондоҙ өйө урын алған. Күрәһең, һыу бик тәрән. Быуа бейеклеге был тәрәнлекте тағы ла арттыра. Шулай итеп, ҡондоҙ өйөнә үтерлек түгел: ҡайҙа ҡарама, тәрән һыу.

**Рауил АЙСЫҒОЛОВ.**
**Бөрйән районы**
**Ғәҙелгәрәй ауылы.**
**(Дауамы. Башы 3-сө һанда).**

ЭТИКЕТ

# ҠЫЛЫҠТАРЫҢА - ТӨҘӘТМӘ,

## йәғни визит этикеты тураһында

**Ҡунаҡ саҡырыуҙың да, ҡунаҡҡа йөрөүҙең дә үҙ ҡағиҙәләре бар. Түбәндә һүҙ визит этикеты тураһында барасаҡ.**

● Кемгәләр ҡунаҡҡа саҡырылып, саҡырыуҙы ҡабул иткәндән һуң, килмәй ҡалыу саҡырыусыға ҡарата ихтирамһыҙлыҡ буласаҡ. Әгәр ҙә ҡунаҡҡа барыу ҡапыл килеп сыҡҡан ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында кисектерелһә, был хаҡта саҡырыусыларҙы иҫкәртергә онотторға ярамай. Ләкин иҫкәртеү мөмкинлеге булмаһа, тиҙ арала телдән йәки яҙма рәүештә, килә алмауҙың сәбәбен аңлатып, ғәфү үтенеү мөһим.

● Кемдәләр йыш ҡунаҡта булып, уларҙы үҙегеҙгә саҡырмау - әҙәпһеҙлек. Әгәр ҙә йортта ҡунаҡ ҡабул итерлек шарттар булмаһа, танышығыҙҙы ресторан, кафе йәки театрға саҡырырға йәки тәбиғәт ҡосағына ла алып сығырға мөмкин.

● Саҡырылған ҡунаҡҡа 10 минуттан да оҙағыраҡҡа һуңлау кешене яҡшы яҡтан күрһәтмәй. Ә әйтелгән ваҡыттан алдараҡ килеү тағы ла насарыраҡ.

● Һәр бер ҡунаҡҡа, әгәр ҙә ул тыуған көн, юбилей, туй тантанаһы булмаһа, ниндәйҙер күстәнәс йәки бүләк тотоп барыу ҡаралмаған. Ләкин бик тә буш ҡул менән инеү унайһыҙ булһа, балаларға - тәмтом алырға, хужабикәгә сәскә бүләк итергә була.

● Ҡатын-ҡыҙҙарға ҡул сумкаһын туалет өҫтәлендә ҡалдырыу урынлы буласаҡ. Әгәр ҙә бик кәрәк булһа, уны ултырғыҫка элмәскә йәки тубыкҡа ҡуймаҫҡа, ә үҙегеҙҙең янға иҙәнгә ҡуйырға мөмкин.

● Дүрт-алты кешелек табынға йыйылғанда ҡунаҡтарға урынды хужалар күрһәтә. Кеше күп булған тантаналарҙа урын булған ергә йәки күңел теләгән урынға ултырырға мөмкин.

● Кемдәндер саҡырыу алған саҡта: "Ә тағы ла кемдәр була?" - тип һорау матур күренеш түгел. Саҡырыусы, кәрәк тип тапһа, был хаҡта үҙе әйтә.

● Ҡунаҡ булараҡ барған өйҙә тикшереп ултырыу, ниндәйҙер иҫкәрмә йәки шелтәләр яһау урынһыҙ. Шулай уҡ мебель, картина йәки башҡа әйберҙәрҙең ҡайҙан, күпмегә һәм ҡасан алыныуы тураһында һорау алыу ҙа йәмһеҙ



күренеш. Был хаҡта тик хужалар ғына һүҙ ҡуҙғатырға мөмкин. Кәштәләрҙә торған матурлау әйберҙәрен ҡулға алып ҡарау, фарфорҙың маркаһын тикшереү ҙә килешмәй.

● Балаларҙы улар менән бергә саҡырған осраҡта ғына алып барырға була. Ниндәй тыныс бала ла ололарға ҡамасау буласаҡ - был хаҡта һәр саҡ иҫтә тотоу мөһим һәм, әгәр ҙә баланы өйҙә ҡалдырыу мөмкинлеге булмаһа, үҙегеҙгә лә ҡунаҡҡа бармайынса, өйҙә ҡалырға тура килер. Тик саҡырыусыларҙы килмәүегеҙ хаҡында алдан иҫкәртергә онотмағыҙ. Шулай уҡ үҙегеҙгә алыҫтан килгән дуҫ йәки туғанығыҙҙы ла саҡырылған ергә алып барыуҙан тыйылыу мөһим.

●Тирә-яҡтағыларҙы ҡатынығыҙ (ирегеҙ) тураһында ҡыҙыҡтар һөйләп әүрәтеүҙән бөтөнләй тыйылырға кәрәк. Ҡайһы берәүҙәр күп кеше араһында үҙенең икенсе яртыһынан шаяртырға әүәҫ. Был, улар уйлағанса, бер ҙә ҡыҙыҡ түгел, ә, киреһенсә, барыһының да йәненә тейә. Шулай уҡ ҡатындың һәм ирҙең бер-береһенең йөшенә, тышҡы ҡиәфәтенә, холҡона ҡағылышлы йор һүҙлеләге лә йәмһеҙ күренеш.

● Әгәр ҙә ирле-ҡатынлыларҙың береһе ҡунаҡтан ҡайтыу тураһында һүҙ ҡуҙғатһа, икенсеһе уның был ҡарарына бер һүҙһеҙ ҡушылырға тейеш. Быға бәйләнешле бәхәстәрҙе кеше алдында ҡуҙғатыу - әҙәпһеҙлек.

● Ҡунаҡта тәҡдим ителгән аш-һыуҙан баш тартыу насар күренеш. Хужалар килтергән һәр аҙыҡты бер һүҙһеҙ ҡабул итеп алырға кәрәк. Ашағығыҙ килмәһә, тәрилкәгә аҙ генә һалып алырға һәм хатта уны ашамайынса ҡалдырырға ла була. Тик үҙегеҙҙең диетала булыуығыҙ йәки был аш-һыуҙы яратмауығыҙ тураһындағы хәбәрҙәр менән тирә-яҡтағыларҙың иғтибарын йәлеп итмәгеҙ.

● Аш-һыуҙан баш тартыу ҡабул ителмәһә, иҫерткес эсемлектәргә ҡарата был ҡағиҙә таралмай. Әгәр ҙә теләгегеҙ юҡ икән, был хаҡта аныҡ итеп әйтегеҙ. Тәрбиәле хужа ҡунағының был теләген ихтирам итергә бурыслы.

● Табынға ҡуйылған аш-һыуҙы маҡтарға онотмағыҙ. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың хужабикәгә теге йәки был аш-һыуҙың рецебын һорап мөрәжәғәт итеүе, уға ҡарата маҡтау һүҙе булып яңғырасаҡ. Шулай ҙа хужабикә был хаҡта артыҡ һүҙ ҡуйыртҡыһы килмәһә, ныҡышырға ярамай.

● Ҡунаҡтан бик тә ашығыс китергә тура килһә, хужаларға рәхмәт әйтеп һәм китеүегеҙҙең ҡыҫҡаса сәбәбен аңлатып хушлашыу урынлы буласаҡ. Табын артында кеше күп булһа, уларҙың иғтибарын йәлеп итмәй генә сығып китеү яйын ҡарарға кәрәк. Тәү сиратта хужалар менән хушлашырға һәм унан һуң ғына кейенеү мөһим.

● Ҡунаҡта күпме ваҡытҡа тиклем ҡалырға була? Бында аныҡ ҡына ҡағиҙәләр юҡ. Шулай ҙа һеҙҙе төшкө ашҡа саҡырһалар, был ҡискә тиклем ултырырға мөмкин тигәнде аңлатмай. Кискә әйтелгән ҡунаҡтан, гәҙәттә, күпселек кеше ҡуҙғала башлағас, артыҡ тотҡарланырға ярамай.

● Кемгәләр ҡунаҡҡа барғанда, әгәр ҙә телевизор тоҡандырылмаған булһа, хужаларҙан быны эшләүҙе һорарға ярамай. Тик һүҙ араһында ғына тап ошо ваҡытта телевизорҙан буласаҡ ҡыҙыҡлы тапшырыу тураһында әйтеп үтергә була. Ләкин хужалар уны ҡарарға теләк белдермәһә, ныҡышырға ярамай.

● Телевизор эшләп торған осраҡта, унда барған тапшырыу хаҡында негатив фекерҙәр менән бүлешеү йәки артистың (йырсы һәм башҡа ижади кешеләрҙең) төҫ-ҡиәфәте тураһында һүҙ йөрөтөү тәрбиәһеҙлек билгеһе. Шулай уҡ башҡалар ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡарап ултырған тапшырыуҙы туҡтатыу йәки икенсе каналға бороу тураһында һүҙ ҡуҙғатыу ҙа әҙәпһеҙлек. Ҡунаҡтар ҡайтырға йыйына башлағас, фильмды йәки концертты ҡарап бөтөү теләгегеҙҙе белдереп ултырып ҡалыу йәмһеҙ күренеш.

● Өҫтәл артында ултырған саҡта башты бороп, телевизорға текәлеп ултырыу ярамай. Башҡа ҡунаҡтар һәм хужалар ашһыу ашаған саҡта өҫтәл артынан тороп, телевизор артына барып ултырыу бөтөнләй ярамаған эш.

● Кемгәләр алдан хәбәр итмәйенсә ҡунаҡҡа барыуҙан тыйылыу мөһим. Бик кәрәк осраҡта ғына иҫкәртмәйенсә визит яһарға мөмкин. Әгәр ҙә ишеккә ике тапҡыр туҡылдатҡандан (шылтыратҡандан) һуң да ишек асыусы булмаһа, китеү яғын ҡарағыҙ.

● Сирле кешегә барыу ҡағиҙәләрен дә белеү мөһим. Кеше ныҡ ауырығанда, уның хәле тураһында яҡындарынан белешеп тороу ғына урынлы, ә өйөнә барыуҙан тыйылырға кәрәк. Хәле еңеләйеп, килеүселәрҙе ҡабул итеү мөмкинлегенә эйә булғандар янына барғанда ла, уның янында оҙаҡ ултырырға, хәбәрҙәр менән ваҡытын алырға ярамай.

● Хеҙмәттәштәрҙең дауаханалағы сирле коллегаһына барыуы мотлаҡ түгел. Уның хәлен телефон аша ғына ла белешеп торорға була. Ләкин ҡайһы саҡта эш буйынса барырға тура килә. Был осраҡта сирлене мотлаҡ алдан иҫкәртергә кәрәк.

● Башҡа ҡала йәки ауылдарҙан килеүселәр йорт хужаларына бихисап проблема тыуҙыра. Шуға күрә таныштарҙа һәм туғандарҙа уларҙың берһенсә тапҡыр саҡырыуынан һуң ғына туҡтарға мөмкин. Һәм, тәбиғи, килер көнөгөҙҙө һәм күпме ваҡыт булыуығыҙ тураһында иҫкәртергә онотмағыҙ.

УҢЫШ ҠАҘАН

# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Өсөнсө сер: үҙеңде ҡабул итеү сәнғәте

Ҡиәфәт шулай уҡ түбән үҙбаһаның төп сәбәбе булып тора. Бик күп бала физик, аҡыл, хис-тойғо етешһеҙлегенән ыҙалана. Әгәр даими рәүештә уға "һимеҙһең", "ҡолғалайның", "бәләкәйһең", һ.б. тип тылҡып торһаң, кәмселек комплексы ныҡлы тамырлана һәм киләсәктә унан арыныуы еңел булмаясаҡ. Ҡайһы бер ата-әсәләр аҡсаға һәм матди етеш тормошҡа артыҡ иғтибар бүлә. Балалар быға күнегә һәм матди тормош рәүеше ҡолона әүерелә. Уларҙың күпселегенә аҡса өсөн өйләнә йәки кейәүгә сыға һәм һуңынан булған байлығы өсөн бик юғары хаҡ түләй. Әгәр матди байлыҡҡа артыҡ ҙур иғтибар бирелә икән, бала, үҫкәс, хатта үҙенең аҡсаһы булмаһа ла, аҡса туҙҙырырға әүәҫ буласаҡ. Бик йыш, тирә-яҡтағыларҙа тәьҫорат уятыу маҡсатында, кәрәкмәгән нәмәләр һатып аласаҡ. Матдилек баланың үҙенең әһәмиәте хаҡындағы ҡуҙаллауын емереү менән, ул байлыҡ артынан ҡыуыуға әүәҫләнеп китә һәм тап шулай итеп кәмселек комплексын компенсациялай.

Быға тиклем күпселек ата-әсәнең балаларында үҙлек формалаштырыу өҫтөндә эшләмәй етди хата яһауы хаҡында бәйән иткәйнек. Ныҡ баҫым яһаған йәки тылҡып торған ата-әсә, балаларын шәхси милке итеп күреп, уларҙы хис-тойғоһоҙ инвалидтарға әйләндерә. Тормош юлында осраған теләһә ниндәй ҡаршылыҡтарҙы ышанысһыҙ һәм тыныс ҡабул итеү урынына кәрәкле дәртләндереүҙән мәхрүм ҡалған балалар, ҡаршылыҡтар бигүк осрамаған юлды һайлай. Балаларҙы маҡтауға һәм яза биреүгә ҡоролған тәрбиә системаһы түбән үҙбаһа формалашыуҙы гарантиялай. Ата-әсә балаға тормош һабағын алғансы хаталар яһау мөмкинлеген бирергә, был осраҡта бала яза алаҫаҡмын тип ҡурҡмаҫҡа тейеш. Һабаҡ алғас, бала башҡа бер ваҡытта ла ул хатаһын ҡабатламаясаҡ. Ул нимә генә эшләһә лә йә маҡталасағын, йәиһә үҙ хаталарының əҙəмтəһен күрәсәген белеп торорға тейеш. Быны аңлау ни тиклем иртәрәк килә, шул тиклем яҡшыраҡ.

Түбән үҙбаһаның хәүефле мәле шунда - беҙ уны быуындан-быуынға тапшырабыҙ. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, бер ғаиләнең бер нисә вәкиле үҙ-үҙенә ҡул һала. Был ғәжәп тә түгел, бары тик түбән үҙбаһа нәҫелдән күсә икән, ҡайһы бер осраҡтарҙа уның сағылышы фажиғәле тамамлана.

Балаларҙан башҡа, беҙ тормош юлында осраған барыһын да түбән үҙбаһа менән зарарлайбыҙ. Уҡытыусы йәки рухани булһаҡ, кәңәш һорап йәки илһам эҙләп килеүсегә вирус йоҡторабыҙ. Кешеләр һеҙҙең түбән үҙбаһағыҙҙы тоя һәм йәлап ҡына уны үҙҙәренә ала башлай. Мин үҙ-үҙҙәренә ышанысһыҙ булмау һөҙөмтәһендә тормошта аптырап ҡалған, уларҙы хәл итә алмаған йөҙҙәрсә кешегә консультация бирҙем. Уларҙың һәр ҡайһыны ғаиләлә, мәктәптә, диндә формалаштырылған түбән үҙбаһа продукты ине. Түбән үҙбаһа бик күп насар сифаттар йәки ғәҙәттәр менән үрелеп бара. Уларҙы көндәлек тормош талабынан тайпылыш өсөн формалаштырылған исулдар йәки ғәҙәттәр, тиергә мөмкин. Улар бары тик ысынбарлыҡ менән күҙгә-күҙ осрашмаҫ өсөн уйлап табылған аҡланыу ғына. Был кире күренештең етдилеге кәмселек тойғоһо менән үҙебеҙҙең кем булыуыбыҙҙы раҫлау зарурлығынан ҡурҡыуға туранан-тура бәйле. Бойондороҡло кеше тирә-яҡтағылар белмәһен өсөн үҙенең түбән үҙбаһаһын йәшереү маҡсатында уйҙырмалар, аҡланыу файҙалана.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 25 ЯНВАРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.20 "Таблетка" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Мажор". Драматический сериал. 1-я и 2-я серии (16+).
23.40 Ночные новости.
23.55 "Германия 83". Драматический сериал (16+).
01.50 "Наедине со всеми" (16+).
02.50, 03.05 "Модный приговор".
03.00 Новости.
03.55 "Как избежать наказания за убийство". Сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Земский доктор-4". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Сын моего отца". 11-13 серии. Мелодраматический сериал (12+).
23.50 "Честный детектив" (16+).
00.50 "Владимир Высоцкий. Это я не вернулся из боя...", "Украденные коллекции. По следам "черных антикваров". Док. фильмы (12+).
02.20 "Срочно в номер!" Детективный сериал (16+).
03.20 "Диагноз: гений" (12+).
04.20 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Городок АЮЯ" (0+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Любовь и прочие глупости". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**12.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Башҡорт йыры представляет..."**
**14.45, 02.00 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Цирк в 13 метров" (0+).**
**16.00 "Книга сказок" (0+).**
**16.15 "Борсаҡ" (0+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "ВК "Уфа" - наша команда!" (6+).**
**17.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**17.45 "Полезные новости" (12+).**
**18.00 "Бай" (12+).**
**18.50 Хоккей. КХЛ. "Югра" (Ханты-Мансийск) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**23.00 "Дознание" (16+).**
**23.30 "Похороните меня за плинтусом". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.45 Ф.Богданов. "Измена предкам"**

## 26 ЯНВАРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Мажор". Сериал (12+).
14.25 "Таблетка" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Мажор". 3-я и 4-я серии (12+).
23.40 Ночные новости.
23.55 "Германия 83". Сериал (16+).
01.50 "Наедине со всеми" (16+).
02.50, 03.05 "Модный приговор".
03.00 Новости.
03.50 "Как избежать наказания за убийство". Сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Земский доктор-4". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Сын моего отца". 14-16 серии
23.50 "Вести.doc" (16+).
01.30 "Сланцевая революция. Афера века", "Смертельные опыты. Мирный атом". Док. фильмы (16+).
03.05 "Срочно в номер!" Детективный сериал (16+).
04.05 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Зеркальце" (0+).**
**11.00, 17.45 "Полезные новости" (0+).**
**11.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Любовь и прочие глупости". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Тәмле" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**14.45, 01.15 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Фанташ" (0+).**
**16.00 "Бауырһаҡ" (0+).**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.45 "Дорога к храму" (0+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**18.00 "Асыҡ дәрес" (12+).**
**19.00 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Үткән ғүмер" (12+).**
**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**21.00 "Интервью с Азаматом Юлдашбаевым" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Один день". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 Т.Миннулин. "Встреча с молодостью" (12+).**

## 27 ЯНВАРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 02.50, 03.05 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Мажор". Сериал (12+).
14.25 "Таблетка" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 01.50 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Мажор". 5-я и 6-я серии (12+).
23.40 Ночные новости.
23.55 "Германия 83". Драматический сериал (16+).
03.00 Новости.
03.50 "Как избежать наказания за убийство". Сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Земский доктор-4". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Сын моего отца". 17-я и 18-я серии (12+).
22.55 "Специальный корреспондент"
00.35 "Блокада снится ночами", "Нарисовавшие смерть. От Освенцима до Нойенгамме" (12+).
02.35 "Срочно в номер!" Сериал (16+).
03.35 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00, 14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Любовь и прочие глупости". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.45, 01.15 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Физра" (0+).**
**16.00 "Байтус" (0+).**
**16.15 "Капитономика" (0+).**
**16.45 "Клио" (6+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**18.50 Хоккей. КХЛ. "Автомобилист" (Екатеринбург) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Упражнения в прекрасном". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 Т.Миннуллин. "Луга мои, поля мои" (12+).**

## 28 ЯНВАРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Мажор". Сериал (12+).
14.25 "Таблетка" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 01.50 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Мажор". 7-я и 8-я серии (16+).
23.40 Ночные новости.
23.55 "Городские пижоны". "Германия 83" (16+).
02.50, 03.05 "Модный приговор".
03.00 Новости.
03.50 "Как избежать наказания за убийство". Сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.40 "Земский доктор-4". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Сын моего отца". 19-я и 20-я, заключительная, серии (12+).
22.55 "Поединок". Программа Владимира Соловьева (12+).
00.35 "Река жизни". Фильм 1. "Мертвая вода" (12+).
02.30 "Срочно в номер!" Детективный сериал (16+).
03.30 "Комната смеха" (12+).
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Дети-герои" (0+).**
**11.00, 14.15 "Учим башкирский язык" (0+).**
**11.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Любовь и прочие глупости". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Хазина" (6+).**
**14.45, 01.15 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Шәп арба" (0+).**
**16.00 "Семәр" (0+).**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.45 "Здоровое решение" (6+).**
**17.15 "История признания" (12+).**
**17.30 "Новости культуры".**
**17.45, 01.00 "Полезные новости" (12+).**
**18.00 "Автограф" (12+).**
**19.00 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.15 "Башҡорттар" (6+).**
**20.45 "Точка зрения. ЛДПР" (12+).**
**21.00 "Наука 102" (6+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Магия слов: История Роулинг". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 М.Карим "В ночь лунного затмения" (12+).**

## 29 ЯНВАРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Мажор". Сериал (16+).
14.25 "Таблетка" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами) (16+).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00, 04.20 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 Церемония вручения народной премии "Золотой граммофон". Часть 1-я (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.25 "Хищники". Худ. фильм (18+).
02.25 "Семейная свадьба". Худ. фильм

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Хрустальный соловей".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.40 "Земский доктор-5". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-ПФО".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Юморина". Юмористический фестиваль.
23.40 "Четвертый пассажир". Мелодрама (12+).
01.40 "Прячься". Худ. фильм (16+).
03.25 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**11.00, 14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Любовь и прочие глупости". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.45, 01.15 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Перекличка" (0+).**
**16.00 "Сулпылар" (0+).**
**16.15 "Ал да гөл" (6+).**
**16.45 "Наука 102" (6+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Позывной "Барс" (6+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Нефтехимик" (Нижнекамск) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**22.00 "ФК "Уфа" - наша команда!" (6+).**
**23.00 "Женщина из пятого округа". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.00 "Полезные новости" (12+).**
**02.00 Х.Иргалин "Вой волчицы" (12+).**

## 30 ЯНВАРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.15, 06.10,04.40 "Наедине со всеми"
06.00 Новости.
06.20 "Зубная фея-2". Худ. фильм (12+).
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Анатолий Кузнецов. Сухов навсегда" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "На 10 лет моложе" (16+).
14.00 "Теория заговора" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Женщины". Худ фильм.
17.10 "Следствие покажет" с Владимиром Маркиным (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.10 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.10 "ДОстояние РЕспублики".
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "Жажда скорости". Криминальная драма (16+).
01.25 "Паттон". Военная драма.
05.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.45 "Великий укротитель". Худ. фильм.
06.15 "Сельское утро".
06.45 "Диалоги о животных".
07.40 "Вести-Башкортостан".
08.00 "Вести".
08.10 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.00 "Тренды" (12+).
09.15 "Правила движения" (12+).
10.10 "Личное. Светлана Пермякова"
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Украина. Ностальгическое путешествие" (12+).
12.30 "Не жалею, не зову, не плачу". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Не жалею, не зову, не плачу". Продолжение сериала (16+).
17.15 Юбилейный концерт Игоря Николаева.
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Укради меня". Мелодрама (12+).
00.45 XIV Торжественная церемония вручения Национальной кинематографической премии "Золотой Орел".
03.15 "Марш Турецкого". Сериал (12+).
05.00 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Ролли и Эльф: в поисках сердца" (6+).**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00 "Клио" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.45 "Учу башкирский язык" с Вячеславом Черневым (6+).**
**13.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ" представляет…" (12+).**
**16.55 Волейбол. Чемпионат России. Суперлига. "Урал" (Уфа) - "Нова" (Новокуйбышевск).**
**19.00 "Бай" (12+).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Бала-сага" (6+).**
**20.45 "Осрашыу" (12+).**
**21.15 "Знай наших!"**
**21.30 Новости.**
**22.00 "4-й период" (6+).**
**22.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры представляет…" (12+).**
**23.45 "Джэйн Эйр". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 Т.Гарипова. "Гильмияза" (12+).**

## 31 ЯНВАРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Ералаш".
06.35 "Гранатовый браслет". Мелодрама
08.10 "Армейский магазин" (16+).
08.45 "Смешарики".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Гости по воскресеньям".
13.00 "Барахолка" (12+).
13.50 "Вера Глаголева. "Меня обижать не советую" (12+).
14.50 "Точь-в-точь" (16+).
18.00 "Без страховки". Шоу (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 И. Кобзон, Т. Гвердцители, Л.Лещенко в юбилейном концерте оркестра "Фонограф".
00.15 Бокс. Бой за титул чемпиона мира
01.15 "Люди как мы". Худ. фильм (16+).
03.20 "Модный приговор".
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.35 "Тайна "черных дроздов". Худ. фильм (12+).
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20, 03.25 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
12.10 "И Шарик вернется". 8 серий. Мелодраматический сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "И Шарик вернется". Продолжение сериала (16+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
00.30 "По горячим следам". Детективный сериал (12+).
02.30 "Крымская фабрика звезд".
03.55 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Йома" (0+).**
**08.30 "Осрашыу" (12+).**
**09.00 "4-й период" (6+).**
**09.30 Мультфильмы (0+).**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.15 "Фанташ" (6+).**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "В капле воды - весь мир" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 "Вестник "Газпром трансгаз Уфа"**
**16.45 "Полезные новости" (12+).**
**17.00 XII Всероссийский форум боевых искусств Республики Башкортостан (6+).**
**18.45 "Любимое дело" (12+).**
**19.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**19.30 "История признания" (12+).**
**19.45 "Девушка моего лучшего друга". Худ. фильм (16+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Байыҡ" представляет…" (12+).**
**23.30 "Вечер.com" (12+).**
**00.15 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.15 "Хлоя". Худ. фильм (18+).**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ҺЫУЫҒАЙ ЮБИЛЯРҘАРЫ




**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА төҙөнө.**

**1-се һандағы кроссворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** 2. Ҡар. 3. Клаус. 6. Сумамед. 7. Лапландия. 10. Трайн. 11. Аҡлан. 12. Шаҡай. 14. Алмас. 16. Торатау. 18. Ҡарағай. 19. Гриль. 21. Сымры. 22. Уяныу. 26. Көсө. 27. Юлбарыҫты. 28. Ҡышы. 29. Ылаҡ. 30. Арыш. 31. Саян. 32. Урау.

**Вертикаль буйынса:** 1. Сана. 4. Ломилан. 5. Урманда. 8. Амарант. 9. Иллелер. 13. Апрель. 15. Арғаяш. 17. Уҡымаған. 18. Ҡарһылыу. 20. Рәсүл. 23. Ырыҫы. 24. Улына. 25. Атына.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Ғинуар (Рабиғел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 25 (15) дүшәмбе | 7:51 | 9:21 | 13:30 | 16:06 | 17:36 | 19:06 |
| 26 (16) шишәмбе | 7:49 | 9:19 | 13:30 | 16:08 | 17:38 | 19:08 |
| 27 (17) шаршамбы | 7:48 | 9:18 | 13:30 | 16:10 | 17:40 | 19:10 |
| 28 (18) кесе йома | 7:46 | 9:16 | 13:30 | 16:12 | 17:52 | 19:12 |
| 29 (19) йома | 7:44 | 9:14 | 13:30 | 16:14 | 17:54 | 19:14 |
| 30 (20) шәмбе | 7:43 | 9:13 | 13:30 | 16:16 | 17:56 | 19:16 |
| 31 (21) йәкшәмбе | 7:41 | 9:11 | 13:30 | 16:18 | 17:58 | 19:18 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

Рәми Ғарипов исемендәге Башҡорт республика гимназия-интернатының 1974 йылғы сығарылыш уҡыусылары хөрмәтле һабаҡташыбыҙ Хәйбулла районы Аҡъяр ауылының 2-се урта мәктәбе уҡытыусыһы

**Һағынбаева (Аҡназарова) Наилә Насырйән ҡыҙының**

ваҡытһыҙ вафат булыуы айҡанлы балаларының, туғандарының тәрән ҡайғыһын уртаҡлаша һәм сабырлыҡ теләй. Уның яҡты иҫтәлеге беҙҙең йөрәктәрҙә мәңге һаҡланыр.

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмәнең.**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Баймаҡ районы Үрге Яйыҡбай ауылында тыуып-үҫеп, әле Сибай ҡалаһында йәшәүсе ҡәҙерле кешебеҙ

**Фәйзулла Ғибаҙулла улы Ғарифуллинды**

60 йәшлек күркәм юбилейы менән ҡайнар ҡотлайбыҙ. Ныҡлы һаулыҡ, күтәренке кәйеф, йән тыныслығы теләйбеҙ. Әсәйебеҙ Фәриҙә Хөрмәт ҡыҙы менән артабан да балаларығыҙҙың изгелеген, ҡәҙер-хөрмәтен күреп, ейән-ейәнсәрҙәрегеҙҙе һөйөп-иркәләп, бәхеткә-шатлыҡҡа төрөнөп оҙон-оҙаҡ ғүмер итергә яҙһын.

*Юбилейың ҡотло булһын,*
*Килер көнөң булһын ҡояшлы.*
*Хоҙай һиңә барын йәлләмәһен -*
*Уңыш, һаулыҡ, бәхет-шатлыҡты!*

**Иң изге теләктәр менән, улдарың Азамат, Айнур, ҡыҙҙарың Гөлфирә, Айгөл, килендәрең Гөлдәр, Гүзәл, кейәүҙәрең Дима, Азат, ейәнсәрҙәрең Рәғинә, Мәликә, Зөлхизә, ейәндәрең Вилдан, Шамил, Дауыт.**

* * *

Баймаҡ районы I Этҡол ауылында йәшәүсе һөйөклө әсәйебеҙ, ҡәйнәбеҙ, ҡартәсәйебеҙ Сәмиғә Кизелхаҡ ҡыҙы Хисматуллинаны тыуған көнө менән ҡайнар ҡотлайбыҙ!

Күңелең тыныс, кәйефең гел күтәренке булһын, йөҙөңдән йылмайыу китмәһен. Бөгөн беҙ һиңә ныҡлы сәләмәтлек, оҙон ғүмер теләйбеҙ, ғаиләбеҙҙең йәме, өйөбөҙҙөң ҡото һин, әсәйебеҙ! Атайыбыҙ менән киләсәктә лә изгелектә, муллыҡта татыу ғүмер кисерегеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, улың Артур, киленең Розалия, ейәнең Азамат, ейәнсәрҙәрең Азалия, Әминә.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**23 ғинуар "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия

**24 ғинуар "Мин - ҡатын-ҡыҙ"** (Т. Миңнуллин), бишек йыры

**26 ғинуар "Зөбәржәт ҡала тылсымсыһы"** (А. Волков), әкиәт. Башлана 11.00

**26 ғинуар "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия

**27 ғинуар "Һаран"** (Ж. Мольер), комедия

**28 ғинуар "Ике төш"** (М. Багаев), драма

**29 ғинуар "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**26 ғинуар "Диңгеҙ ярын иңләй ала эт"** (С. Айытматов), хикмәт

**27 ғинуар "Ҡыҙ урлау йәки башкирская пленница"** (М. Кәрим), музыкаль комедия

**28 ғинуар "Аҡса булһа бер муҡса"** (М. Багаев), музыкаль комедия

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**29 ғинуар** үткән быуаттың иң популяр йырсыларының береһе, РСФСР-ҙың атҡаҙанған, Башҡорт АССР-ның халыҡ артисы **Илфаҡ Смаковтың** ижадына арналған концерт була.

**КЕМ АЛЫҠ?**

1. Илфаҡ Смаков ҡайһы районддан? 2. Йырсы филармонияла нисәнсе йылдарҙа эшләй? 3. Уның репертуарынан ниндәй йырҙарҙы беләһегеҙ? 4. Йырсының тормош иптәшенең исеме кем? **Филармонияның әҙәби бүлеге: 276-24-41**

КӨНАУАЗ

# КИНО ЙЫЛЫНЫҢ...

## маҡсаттары ни булыр?

**2016 йыл илдә һәм республикала Рәсәй киноһы йылы тип иғлан ителде. РФ Президенты ҡарарында аныҡ әйтелеүенсә, тәү сиратта йәмәғәтселектең иғтибарын Рәсәй кинематографына йүнәлтеү маҡсаты күҙ уңында тотола. Өфөлә был йәһәттән ниндәйҙер эштәр башланды ла инде. Әҙәбиәт йылында нигеҙ һалынған матур йола буйынса, ҡаланың Баҡалы, Пушкин урамдарында, Салауат Юлаев проспектында Рәсәй киноларынан цитаталар менән тәүге баннерҙар барлыҡҡа килде. Һәр баннер "Яҡшы кинобыҙ", "Дөрөҫлөклө һөйләгән кинобыҙ", "Матур кинобыҙ" слоган-фразалар менән биҙәлгән. Әлеге мәлдә "Башҡортостан" киностудияһы башҡорт киноларынан цитаталар әҙерләү менән мәшғүл. Рәсәй йылын рәсми асыу тантанаһы 25 ғинуарға билдәләнгән. Ул Өфөләге Рәсәй кинематография үҙәге - "Родина" кинотеатрында уҙасаҡ.**




Ысынлап та, һәр өлкәлә хәл ителәсәк проблемалар, пландар, проекттар йыйылып китеүсән. Тематик йыл был һөнәр эйәләренең теләктәре, тәҡдимдәре юғары урындарға барып етеү мөмкинлеген дә бирә. Шулай уҡ эксперттар билдәләүенсә, йыл Кино фондының уңыштарын барлауға ғына ҡайтып ҡалыуы ла ихтимал. 2016 йылда бюджеты 500 млн һумдан күберәк булған һәм дәүләт ярҙамы менән төшөрөлгән тиҫтәгә яҡын масштаблы кинопроекттар прокатҡа сығыуы көтөлә - был да йылдың темаһын һайлауға булышлыҡ итеүе бар. Һәр хәлдә, быйыл Рәсәйҙә кино төшөрөүгә дәүләт ярҙамы былтырғыса 6 млрд һум кимәлендә ҡаласаҡ, ул башлыса кино эшен яңы башлаусыларға йүнәлтеләсәк, тип белдерелә. Бынан тыш, бәләкәй һәм уртаса ҙурлыҡтағы ҡалаларҙа кинотеатрҙар асыу эшенә тотоноусыларға матди ярҙам күрһәтеләсәк. Субсидияны алыуҙың төп шарты - 2018 йылдың аҙағына тиклем был кинотеатрҙар сеанстарының яртыһын Рәсәй фильмдары алып торорға тейеш. Кинотеатрҙарҙа әлегә был нисбәт 20 процентҡа ла тулмай. Тимәк, тармаҡ прокат проблемаһы менән ныҡлап шөғөлләнергә уйлай.

Тик был тамашасыларҙы кино сәнғәтенә йәлеп итәсәкме, был һорауға яуап биреүе ауыр. Ни тиһәң дә, үҙенең йөҙө, эстетикаһы булған совет киноһының Рәсәй киноһыныҡы кеүек конкуренттары булмаған тиерлек. Былтырғы йыл һуңғы 10 йыл эсендә прокатҡа сыҡҡан кинолар һаны буйынса иң юғары торһа ла, уларҙың береһе лә үҙен тулыһынса аҡлай алмаған. Йәғни, Рәсәй киноһының һан яғынан үҫеше сифат тураһында һөйләмәй әле. Ил Президенты В. Путин "Кино йылы йәмғиәтебеҙҙә юғары әхлаҡи ҡиммәттәрҙең нығыныуына тағы бер аҙым яһасаҡ", - тип ышандырһа ла, коммерция маҡсатын әҙәрлекләгән проект бер ҡасан да быға өлгәшә алмайҙыр. Ғөмүмән, иң ҙур касса туплаған Рәсәй киноһы ла Голливуд менән ярыша алмай бөгөнгө көндә, үкенескә күрә. Тимәк, кинотеатрҙар коммерцияға ҡоролған Голливуд блокбастерҙарынан баш тартмаясаҡ, уларҙы алып ташлап ҡына тамашасыны Рәсәй киноһы менән ҡыҙыҡһындырып та булмаясаҡ.

Шулай уҡ сәнғәттең башҡа төрҙәре кеүек үк, кино күңел асыу сараһы түгел, ул милләтте тәрбиәләүсе. Асылда, кинематограф мәғлүмәти һуғышта иң көслө ҡорал, тик ул йышыраҡ халыҡтың әхлаҡи һәм рухи сәләмәтлеген нығытыу өсөн түгел, ҡаҡшатыу өсөн ҡулланыла кеүек. Ошо яҡтан ҡарағанда, милли кино юҡ, тип зарланһаҡ та, башҡорт режиссерҙарының картиналарының һәр береһе тик ыңғай хис-тойғолар, ихласлыҡ менән тоҡылғанын күреп ҡыуанаһың. "Көмөш Аҡбуҙат" II милли һәм этник кино фестивале ҡунаҡтары юҡҡа ғына: "Бөгөн ижади атмосфера төбәктәргә күскән", - тип раҫламағандыр. Һәр хәлдә, Рәсәй киноһы йылы башҡорт киноһына ла үҫеш килтерер, тип ышанайыҡ. Республиканың кино сәнғәте өлкәһендә эшләүселәр ең һыҙғанып эшкә тотондо ла инде. Быйыл кинодраматургтар семинары, II дебютанттар питчингы, "Йәнле һүрәттәр" балалар анимацияһы фестивале, "Балалар - кино геройҙары" фестивале үткәреү планлаштырыла. "Көмөш Аҡбуҙат" III Халыҡ-ара милли һәм этник кино фестивале лә йылдың иң сағыу тамашаһына әүереләсәк. Бынан тыш, башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрҙә башҡорт киноһы көндәре уҙғарыласаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ил иҡтисади яҡтан ауыр хәлдә булғанда кино йылы үткәреү кино индустрияһы үҫешенә әллә ни етди этәргес бирмәүе лә ихтимал, әлбиттә. Шуға ла, йыл бары тик булғанды иҫкә төшөрөп, элекке киноларҙы ҡарап, күңел асыуға ҡоролған тамашалар менән генә үтеп китмәҫме икән, тигән борсолоуҙар ҙа урынлылыр. Кино сәнғәте өлкәһендә системалы үҙгәрештәр булмай тороп, ыңғай һөҙөмтәгә өлгәшеүе еңел булмаясаҡтыр.**

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

АТЫҢ КЕМ?

# УЛДАРЫБЫҘ - ИЛНАР, ЗАҺИР

**Ғинуар беҙҙең ғаилә өсөн бик ҡыуанысла ай, сөнки беҙҙең ике улыбыҙ ҙа ошо һыуығайҙа донъяға килде.**

Өлкән улыбыҙ тыуғас, тормош иптәшем менән уға исемде оҙаҡ һайланыҡ, хатта туған-тумасаларға ла мөрәжәғәт иттек. Шулай итеп, башҡорт исемдәренән торған оҙон теҙмә килеп сыҡты. Шулар араһынан Илнар тигән исемде һайланыҡ. Ул "Халыҡтың танылған, данлы кешеһе" тигәнде аңлата. Теле асылғас та, "Мин президент булам" тип йөрөнө Илнарыбыҙ. Ул үҙенә күп иғтибар талап итеүсән. 2012 йылдың 1 ғинуарында тыуғас, уҡыуҙа ла, эштә лә, тормошта ла гел беренсе булыр, тип ышанабыҙ.

Ә кесе улыбыҙҙың тыуғанға тиклем үк исеме бар ине инде. Матур башҡорт исемен ҡуштыҡ: Заһир, ул "Яҡты нур сәсеүсе, бик матур; ярҙамсы" тигәнде аңлата. Улыбыҙ бик тә тыныс холоҡло, күңелле, үҙ аллы бала. Һәр саҡ ярҙам итергә һәм уйынсыҡтарын һис ҡыҙғанмай ағаһы менән бүлешергә әҙер. Машина һәм конструкторҙар менән уйнарға ярата.

Улдарыбыҙға бәхет, һаулыҡ теләйбеҙ, матур теләктәре тормошҡа ашып торһон, тормош юлдарында тик яҡшы кешеләр осраһын, ҡыуанып, ҡыуандырып йәшәүҙәрен теләйбеҙ.

**Нәҙершиндар ғаиләһе.**
**Учалы ҡалаһы.**



АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АЯҠ ҺАЛМАЙ...

## түргә уҙма!

Матурлыҡты табаҡҡа һалып, табынға сығармайҙар.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Йәшәйһең икән - уҡы, өйрән. Картлыҡ менән килер ғилемде көтөп ултырма.

**(Солон).**

Күп әрләмә - әрһеҙ итерһең,
Бикләп китмә - уғры итерһең.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Халҡының азатлығына түгел, ә ҡол булыуына нығыраҡ шатланған хакимдар хөрмәт күрһәтеүгә лайыҡ түгел.

**(Плиний).**

Күптәргә хас был ҡылыҡ дөрөҫ түгел: улар үҙҙәрендә булмаған сифаттарға эйә дуҫтар эҙләй, һәм дуҫтарынан үҙҙәре бирә алмағанды талап итә.

**(Цицерон).**

Рух камиллығын үтескә лә, һатып та алып булмай. Һатылһа ла, һатып алыусыһы булмаҫ ине. Уның ҡарауы, түбәнлек көн дә һатып алына.

**(Сенека).**

Дошманым алыҫ, тип, ҡысҡырып һөйләмә: ҡолағына алыр ҙа, күңеленә һалыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бәләкәй ҡайғыны һөйләнә-һөйләнә, олоһон өндәшмәй үткәрәһең.

**(Кесе Сенека).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер һаран ғына кеше ғүмере буйы эшләп-эшләп, өс йөҙ динар меңлек байлыҡ туплаған. Уның ерҙәре, ҡоролмалары, башҡа байлыҡтары ла байтаҡ булған. Бер саҡ ул берәй йыл ял итеп, күңел асып алырға ҡарар итә. Аҡсаларын иҫәпләп кенә бөтөүе була, уның алдына Үлем фәрештәһе килеп баҫа. Кеше уны, ғүмеремде өҙмә, тип, төрлөсә өгөтләй башлай. Ләкин Фәрештә уны тыңларға теләмәй икән. Шунда кеше былай ти: "Һин миңә өс кенә көн бир, шунда мин һиңә бар байлығымдың өстән бер өлөшөн бирәм". Фәрештә ризалашмай. Шунан кеше былай тигән: "Әгәр ҙә һин миңә ике генә көн ерҙә йәшәргә рөхсәт итһәң, мин һиңә ике мең динарымды бирәм". Ләкин Фәрештә уны тыңларға ла теләмәгән. Ул хатта кешенең, бер көн өсөн барлыҡ байлығымды бирәм, тигәненә лә риза булмаған. Шунда һаран кеше былай ти: "Үтенәм һинән, миңә бер нисә генә һүҙ яҙырға рөхсәт ит". Был юлы Үлем фәрештәһе уға бер аҙ ваҡыт бирә. Һәм кеше үҙ ҡаны менән былай тип яҙа: "Кешеләр, үҙ ғүмерегеҙҙе әрәм итмәгеҙ. Мин ғүмер буйы йыйған өс йөҙ мең динарға хатта бер генә сәғәт тә ғүмер һатып ала алманым..."**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 22 ғинуар 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары — **50665, 50673**

Тиражы - 4877
Заказ 99/01